ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

5-11 декабрь (аҡъюлай) 2020

№49 (935)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • Һатыуҙа хаҡы ирекле

*Дуҫлыҡ - күңелдәр араһында йөрөгән илсе, ауыр ваҡыттарҙа бер-береңә ярҙамлашыуға сәбәп булған нәмә, аралағы яҡшы мөнәсәбәт. Әгәр яҡшы мөнәсәбәт ике яҡтың ихласлыҡ һәм мөхәббәте бер-беренә иш булғанда тыуһа, ул даими тойғо. Ваҡытлы файҙа күреү өсөн генә икән, алдау була. Шуның өсөн мөхәббәтегеҙҙең ысын асылы өсөн тырышығыҙ һәм дуҫтарығыҙҙы камил һәм яҡшы кешеләр араһынан һайлағыҙ.*

*Ризаитдин нәсихәттәренән.*


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бер аяғына аҡһармы?** 3



**Автономия бишеге лә,** шәхестәр һандалы ла ул - Ырымбур 6,15



**Бәхет тынлыҡты ярата** 8-9



**Һаҡланғанды...** 12



**ТВ-программа** 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәй Президентының сираттағы матбуғат конференцияһында Владимир Путинға ниндәй һорау бирер һәм теләктәр еткерер инегеҙ?



***Сәйфулла ӘМИРОВ, РФ һәм БР Журналистар берлеге ағзаһы, Мәләүез ҡалаһы:*** Бына егерме йылға яҡын инде декабрь айы етһә, илебеҙ Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путинға һорауҙар биреү менән йәшәй. Тәүге осорҙа уға ебәрелгән һорауҙар етди мәғәнәле, икенсе төрлө әйткәндә, Президент статусына торошло ине. Үҙәк телевидениеның төрлө каналында эшләгән журналистар нисә һорау бирелгән, уларға күпме ваҡытта яуап алынғанын иҫәпләп, осрашыу сифатын түбән төшөрҙө. Ҡайһы берҙә төбәк, муниципалитет кимәлендә хәл итә торған һорауҙар бирелә. Әйтерһең дә, уларҙы ил Президентынан башҡа хәл итерҙәй кеше юҡ. Был - Рәсәйҙә закондарҙың эшләп етмәгәнен аңлата торғандыр. Ҡайһы саҡта урындағы власть Владимир Путинға мөрәжәғәт итеүсенең генә мәсьәләһен сисә лә, шундай уҡ проблемалы меңәрләгән кеше ситтә тороп ҡала.

Был турала күп яҙырға булыр ине. **Мин әле, әгәр мөмкин булһа, Владимир Владимировичҡа тәүге осрашыуҙарҙың береһендә бирелгән һорауҙарҙы ҡабатлар инем: "Ни өсөн беҙҙең илдә етәксене башҡарған вазифаһын тағы ла юғарыраҡ күтәреү менән "язалайҙар"? Был ун биш - ун алты йыл элек бирелгән һорау бөгөн дә көнүҙәк булып ҡала.** Миҫалға яңыраҡ Рәсәй Хөкүмәтендә булып үткән үҙгәрештәрҙе алайыҡ. Энергетика министры Александр Новакты вице-премьер итеп үрләттеләр. Ә бит уның министрлығы осоронда ярты йыл һайын электр энергияһына, газға хаҡ арта барҙы. Мәҫәлән, мин йортҡа газ үткәргән 2003 йылда бер кубометр газ 95 тин тора ине. Бөгөн - 6 һумдан ашыу. 6,5 тапҡыр артҡан. Йәнәһе, инфляция. Ә инфляция нимәнән? Эйе, энергия ташыусыларға хаҡ артыуҙан. Уны ябай халыҡ түгел, ә министр хәл итергә тейеш түгелме ни? Министр вазифаһында хәл итә алмағас, уны вице-премьер итеп үрләтеү кәрәк булдымы икән?

Бына икенсе миҫал. Тағы бер вице-премьер булып Татьяна Голикова ханым эшләй. Бөгөн Президент ҡул режимында бөтә Ер шарын сорнап алған пандемия проблемаларын илебеҙҙә хәл итә. Район, ҡала дауаханаларында тейешле медицина ҡорамалдары, ашығыс ярҙам машиналары, ә иң мөһиме, кадрҙар етешмәй. Был мәсьәләләр бөтәһе лә Татьяна Голикова Рәсәй Федерацияһы һаулыҡ һаҡлау министры булып эшләгәндә үткәргән оптимизация һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килмәнеме ни? Бөгөн ил шул осорҙа ебәрелгән хаталар өсөн бик ҡиммәт хаҡ түләй. Һаран ике түләр, тиҙәр бит. Был әле нәҡ шул осор. Ә Т. Голикова, бер ни булмағандай, тағы ла юғарыраҡ вазифаны биләй. Уның "оптимизацияһынан" бөтә ил яфа сигә.

Путин Президент булып һайланғас та Рәсәйҙә власть вертикале булдырылды. Уны Дмитрий Медведев та үҙ файҙаһына бик оҫта ҡулланды. Ил йөгөн иң ауыр осорҙа тартҡан, халыҡса әйткәндә, бынамын эшләп йөрөгән Юрий Лужков, Мортаза Рәхимов, Минтимер Шәймиев кеүек "ауыр йөк аттарын" эштән бушатты. Уларҙың йәше үткән, тип тә әйтеп булмай. Ана, Америка Ҡушма Штаттарында уларҙан күпкә олораҡ Байденды президент итеп һайлап ҡуйҙылар. Штаттар Рәсәй төбәктәренән күпкә ҙурыраҡ бит!

Һөйләнгәндәрҙән сығып, Рәсәй Президентына бер үк мәғәнәлә һорау ҙа бирге, теләк тә теләге килә: **Рәсәй кеүек ҙур илдә кадрҙар мәсьәләһен кем хәл итә һәм нисек уларҙың эшлеклелеген күтәрергә була?**

***Фәрит ӘХМӘРОВ, РФ һәм БР Журналистар берлеге ағзаһы, Сибай ҡалаһы:*** Бөгөн тормошобоҙҙо киң мәғлүмәт сараларынан тыш күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Хәйер, был һәр заманда ла шулай булды: киң мәғлүмәт саралары һәм матбуғат һуңғы хәбәрҙәр, ил, донъя хәлдәрен йәмғиәт иғтибарына оператив еткереп кенә ҡалмай, бәлки, ана шул ваҡиға һәм хәлдәргә мөнәсәбәт белдерә, анализлай, баһа бирә - ҡыҫҡаһы, йәмәғәтселек фекерен булдырыуға, бихисап мәғлүмәт массаһында буталып ҡалмаҫҡа, улар араһынан хәҡиҡәтте таный алырға, нахаҡтан хаҡты айыра белергә булышлыҡ итә, ижтимағи аң үҫешен тәьмин итә. Тағы бер мөһим функцияһы - уны ойоштороусы власть органдары сәйәсәтен сағылдырыу, таратыу һәм йәмәғәтселек менән йәнле бәйләнештә булыуҙы тәьмин итеү.

Үҙегеҙ ҙә яҡшы шаһит: бөгөн кеше аңын электрон мәғлүмәт саралары, айырыуса телевидение, интернет селтәре яулап алды. Үкенескә күрә, йәмғиәттә яҙма матбуғатҡа иғтибар һүрелә бара. Бында электрон мәғлүмәт саралары, интернет күп йәһәттән хәл-ваҡиғаларҙы оператив еткерә алыуы менән ота, әлбиттә, ләкин сифат, йөкмәтке һәм социаль-сәйәси йүнәлештәре йәһәтенән улар яҙма матбуғатҡа тиңләшә аламы икән? **Ил Президенты В.Путинға әйтергә теләгән һүҙем ана шул баҫма матбуғат яҙмышы - күңелебеҙ түренә бала саҡтан яҡты нур булып һеңеп ҡалған, яңылыҡ, һөйөнөслө хәбәрҙәр еткереүсе гәзит-журналдарыбыҙ хаҡында ине.** Бөгөн улар ҡатмарлы хәлдә тороп ҡалды: ижади коллективтар тырышып эшләүгә ҡарамаҫтан, халыҡ гәзит-журналдар алдырмай башланы, сөнки илдәге тотороҡһоҙлоҡ арҡаһында бөтөн башҡа төр продукция кеүек үк, баҫма матбуғат хаҡтары ла йылдан-йыл арта бара, ә власть органдарының бында эше лә юҡ кеүек: бер ниндәй матди һәм хатта һүҙ ярҙамы ла юҡ. Һөҙөмтәлә редакцияларҙың финанс хәле ауырлашты: журналистар (мин үҙебеҙҙең төбәк, ҡала, район гәзиттәрен күҙҙә тотам) урам һепереүсегә ҡарағанда ла аҙыраҡ эш хаҡы ала, гонорар тигән дәртләндереү сараһы яйлап ҡына онотторолдо. Баҫма матбуғаттың абруйын юғалтыуға илткән осо һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында бөгөн гәзит-журналдарға йәштәр эшкә килмәй, кадрҙар етешмәй, редакциялар компьютер, автомашина, башҡа төрлө техник сараларына мохтаж, хатта ҡайһы саҡ ҡағыҙҙары ла бөтөп китә.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

✓ ***Ни сәбәпле беҙҙә үтә байҙар донъяла башҡаса бер генә илдә лә, ғөмүмән, бөгөнгө цивилизация шарттарында тейешле булмағанса тейелгеһеҙ айырым хоҡуҡтар менән файҙалана һәм майҙа йөҙә?***



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Рәсәй Президентының сираттағы матбуғат конференцияһында Владимир Путинға ниндәй һорау бирер һәм теләктәр еткерер инегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

Бының менән нимә әйтергә теләйем? Яңыраҡ ҡына 2021-2023 йылдарға ил бюджеты ҡабул ителде. Унда ошо йылдарға киң мәғлүмәт сараларын финанслауға 300 млрд һум аҡса бүленәсәге тураһында белдерелде, ләкин бюджет бүленешенә аңлатмаларҙа иң элек электрон мәғлүмәт саралары һәм телевизион каналдар иғтибар үҙәгенә ҡуйыла һәм исемләп-адреслап уларға дәүләт ярҙамы арттырылыуы, миллиардтарса һум аҡса бүлеү тураһында һүҙ бара. Әлбиттә, гәзит-журналдар, китап нәшриәттәре, мәғлүмәт агентлыҡтары, телекомпаниялар һәм радиостанциялар ҙа коронавирустан зыян күреүсе тармаҡтар иҫәбендә телгә алынып китә ул һәм һалым, шулай уҡ ҡуртым түләүҙәрен кисектереү, ашығыс ихтыяждар, эш хаҡы түләү өсөн процентһыҙ кредит биреү кеүек әллә ни популяр булмаған ярҙам саралары тураһында ла әйтелә, тик барыбер баҫма матбуғат сараларына элеккесә ҡалдыҡ принцип буйынса мөнәсәбәт һаҡланып ҡалыр төҫлө. Уның ҡарауы, бәлки, төбәк кимәлендә ниндәйҙер ярҙам сараларына өмөт итергәләр? Һәр хәлдә, милли баҫмаларҙың юғалыуына юл ҡуйылырға тейеш түгел. Был юҫыҡта В.Путиндың матбуғат конференцияһында һүҙ ҙә булмаҫ, моғайын, сөнки бөгөн төп тема - бөтөн бәләләрҙең башы итеп ҡаралыусы коронавирус һәм халыҡ-ара хәлдәр. Ә илдең эске проблемалары ошо фонда юғалып, бәләкәйләнеп тә ҡалыусан...

***Фәрзәнә ИШМӨХӘМӘТОВА, хеҙмәт ветераны:*** Илдә, хаҡлы ялда булыуҙарына ҡарамаҫтан, эшләп йөрөүсе пенсионерҙар һаны бынан 4-5 йыл элек кенә 15 миллиондан ашыу ине, ләкин 2016 йылдан уларҙың пенсияһын законлы индексациялауҙы туҡтатып, хоҡуҡтарын сикләгәндән һуң, рәсми һандарҙа уларҙың яртыһы ғына тороп ҡалды: күптәре рәсми теркәлмәйенсә, "күләгә"гә күсеп эшләүен дауам итте һәм рәсми һандарҙа, әйтеүемсә, уларҙың яртыһы ғына күренеп тора. Бынан хөкүмәт бер ни ҙә отманы, бәлки, юғалтты ғына, сөнки хәҙер "күләгә"лә эшләүсе пенсионерҙар һалым да түләмәй, улар өсөн Пенсия фондына взнос та күсерелмәй...

Өлкән йәштә эшләп йөрөргә иһә уларҙы яҡшынан булмаған тормош хәле мәжбүрләй, сөнки бәләкәй генә пенсия аҡсаһын ғаилә аҫрауға, коммуналь хеҙмәттәргә түләүгә һәм дауаланыу, дарыуҙар һатып алыуға еткерә алмағандан эшләй бит улар. Был йәштә уларҙың эш хаҡы ла самалы ғына, ләкин бына нисә йылдар инде улар хаҡһыҙ рәүештә рәнйетелә һәм күрәләтә хоҡуҡтары боҙола. Был турала бик күп һүҙ һәм бәхәстәр булды, эшләүсе пенсионерҙар хоҡуҡтарын яҡлап, "Рәсәй пенсионерҙар берлеге", "Ғәҙел Рәсәй" партияһы яҡлап сыҡты, ә Рәсәй бойондороҡһоҙ профсоюздар ферерацияһы В.Путиндың үҙенә шәхсән мөрәжәғәт итеп, эшләүсе өлкәндәргә индексацияны ҡайтарыуҙы талап итте. Шунан һуң Президент эшләүсе пенсионерҙарға индексацияны кире ҡайтарыу тураһында октябрҙә үк указ менән Хөкүмәткә мөрәжәғәт итеүгә ҡарамаҫтан, уның күрһәтмәһе һанға һуғылманы. Илдең финанс хужаһы А.Силуановтың һүҙе һүҙ булды: ул Президент күрһәтмәһен кире ҡаҡты. Мине бына шуныһы аптырата: нисек инде Президент фекере иҫәпкә алынмай? Был бит уның абруйына зыян тигән һүҙ. Ошо фактҡа Владимир Путин үҙ һүҙҙәре менән ниндәй аңлатма бирер ине икән? Хәйер, нимә тиһен инде, Рәсәйҙә бындай осраҡтарҙа бер генә әҙер яуап бар: аҡса юҡ...

Был хаҡта башҡаса һүҙҙе дауам итке лә килмәй, ул шул тиклем ялҡытты һәм бер ниндәй һөҙөмтәһеҙ, буш, ҡоро хәбәр булып сыҡты. Күпме генә тылҡыма, хәл хәҙер үҙгәрмәйәсәк. Шулай булһа ла, тағы ла бер һөҙөмтәһеҙ, "һаҡаллы" һорау бирер инем президентҡа. Ул да булһа, прогрессив һалым системаһына Рәсәй Президенты тарафынан "табу" һалыныуы. **Ни сәбәпле беҙҙә үтә байҙар донъяла башҡаса бер генә илдә лә, ғөмүмән, бөгөнгө цивилизация шарттарында тейешле булмағанса тейелгеһеҙ айырым хоҡуҡтар менән файҙалана һәм майҙа йөҙә? Кем уларға шундай сикләүһеҙ хоҡуҡтарға гарантия бирә һәм был ниндәй маҡсаттарҙы күҙҙә тота?**

Ошоға бәйле яңыраҡ ҡарар ҡылынған байҙарға һалым тәртибенә пародия иҫкә төштө әле. Ишеткәнһегеҙҙер инде барығыҙ ҙа: хәҙер бит һалым системаһына "2 процент Рәсәйсә ғәҙеллек" тәртибе инде релде. Яңы йылдан башлап, йыллыҡ килеме 5 миллиондан артҡан бай ҡатлам килемгә һалымды ярлылар менән бергә 13 түгел, ә ... 15 процент түләй башлаясаҡ. 5 миллиондан түгел, ә шул сумманан артҡан килем күләменән 15 процент! Ҡайһы бер сәйәсмән һәм эксперттар фекеренсә, йыллыҡ килемең 5 млн һәм унан артығыраҡ тәшкил итһен өсөн айлыҡ эш хаҡың 412 мең һәм унан күберәк булыуы кәрәк. Ә бындай эш хаҡын беҙҙә, нигеҙҙә, юғары власть әһелдәре, депутаттар, сенаторҙар, министрҙар ала. Тимәк, улар "2 процент ғәҙеллек"те үҙҙәре өсөн һәм үҙҙәрен аҡлау, күҙ буяу өсөн булдырҙы? Һәр хәлдә, ҡайһы бер мәғлүмәт сараларында был хәл шулайыраҡ баһаланды. **Бирергә теләгән тағы бер һорауым шундай: ғәҙеллек проценты беҙҙә артабан үҫешерме һәм ул ниндәй "һанға" тиклем күтәрелер икән?**

***Миңзәлә ШӨҒӘЙЕПОВА, БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы, Учалы ҡалаһы:*** Тел беҙҙе кеше булараҡ һаҡлаусы ифрат ҙур көскә эйә булған ҡорал. Эйе, эйе, тап кеше булараҡ! Бында бер ниндәй пафос та, фәстереү ҙә юҡ. **Һәр халыҡты милләт булараҡ һаҡлап ҡалыу өсөн ил етәксселеге ниндәй саралар күрә һуң? Улар милләттәргә, туған телгә, ғөмүмән, ватаныбыҙға ябырылған глобаль хәүефтәрҙе нисек баһалай?**

Мәҫәлән, бөгөнгө көндә бөтөн Ер шары халҡын туплаған бер глобаль дөйөм дәүләт булдырырға тигән идея алға һөрөлә. Йәнәһе лә, был дәүләттең эсендә бәләкәй дәүләт-ара сиктәр ҙә, расалар ҙа, этностар ҙа булмаясаҡ, тимәк, милләттәрҙең бойондороҡһоҙлоғо, туған телдәрҙең кәрәге лә ҡалмаясаҡ. Инглиз теле иһә донъяла берҙән-бер аралашыу теле булып ҡаласаҡ, тип хыяллана проект авторҙары, сөнки бөгөнгө көндә бөтәһе лә, бигерәк тә бизнес-клубтар "донъя селтәре" - интернетта тап ошо телдә аралаша, мәғлүмәт ала. Юҡҡа ғынамы ни, Көнбайышта йыш ҡына "Кемдә мәғлүмәт - шул донъяға хужа!" тип ҡабатларға яраталар...

"Кеше ышанмаҫтай хәбәрҙе дөрөҫ булһа ла һөйләмә", тигән һүҙ бар беҙҙең халыҡта, шулай ҙа тағы бер туҙға яҙмаған проект күптәргә мәғлүмдер. Ул "Форсайт - проект-2035" тип атала. Ошо проектҡа ярашлы, беҙ Кеше тип түгел, ә ситтән буйһондороуға бирешкән биологик йән эйәһе тип аталасаҡбыҙ. Беҙгә, бигерәк тә киләһе быуындарға фаразланған был яҙмыш оҡшаймы һеҙгә?

Һуңғы йылдарҙа тотош ил буйынса халыҡ йәшәгән урындарҙы ултыраҡтарға (поселение) әйләндереү кампанияһы уҙғарылды. Ул һүҙҙең икенсе мәғәнәһе лә бар бит: һөргөн, көсләп ебәрелгән урын... Мин үҙ ауылымда ошондай поселениела йәшәйем булып сығамы? Төптәге аң ул бит бик хәтәр нәмә! Ошо хаҡта уйландымы икән ил етәксеһенә был тәкдимде еткереүселәр? Әллә был "хәсрәт ярҙамсылар" сит тирмәнгә һыу ҡойоусылармы? Сит ил, Көнбайыш стандартына тап килтерәбеҙ тип, паспортта ла хәҙер милләт күрһәтелмәй. Рус теленә лә милли телдәргә кеүек үк хәүеф янағанда, ил башлыҡтары белә-күрә нинә битарафтар, әллә улар өҫтә әйтелгәндәрҙе фантастика өлкәһенә индерәме икән? Ошо борсоулы фекерҙәремде берләштереп, бер һорау бирергә теләр инем, әлбиттә, ил Президентына. Ҡана ла һуң...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# АРЗАНҒА ЯҘЫЛЫП ҠАЛ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

• Шулай итеп, республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 3 декабрҙән 13-нә тиклем иғлан ителгән ун көнлөктө 2021 йылдың 1-се яртыһына ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 635 һум 82 тингә яҙыла алаһығыҙ.

• Гәзит уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙән бүләккә матур китаптар алып тора, йолабыҙ был юлы ла дауам итә. Быға саҡлы бындай бүләктәрҙе алыу бәхете тәтемәгәндәрҙән гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын көтөп ҡалабыҙ.




## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 4 декабрҙә яңы коронавирус инфекцияһы йоҡторғандарҙың һаны 14833-кә етте. Һуңғы тәүлектә сир йоҡтороуҙың 144 яңы осрағы асыҡланған. Билдәләнеүенсә, бөгөнгә сирлеләрҙең 48 проценты - 26-50 йәшлектәр, 22 проценты - 50-60 йәшлек пациенттар. Республикала әлеге ваҡытта COVID-19 диагнозы менән дауаханала ятҡан 575 пациенттың 48-е - ауыр хәлдә. Һуңғы тәүлектә 408 кешенең пневмония менән ауырыуы асыҡланған. Вафат булыусылар һаны барлығы 87-гә еткән.

✓Башҡортостан Башлығының "Юғары әҙерлек" тәртибе тураһындағы указына ярашлы, республикала 65 йәштән өлкәндәр өсөн, шулай уҡ хроник сирлеләр өсөн мотлаҡ изоляция режимы 31 декабргә хәтлем оҙайтыла. Социаль учреждениеларҙа булғандар өсөн дә мотлаҡ изоляция режимы 31 декабргәсә һаҡлана. Радий Хәбиров шулай уҡ халыҡтың битлек режимын һәм 65 йәштән өлкәндәрҙең изоляция тәртибен үтәүен тикшереүҙе көсәйтергә ҡушты.

✓Республика Хөкүмәте президиумы ултырышында белдереүҙәренсә, ирекмәнлек эшен башҡарған ирекмәндәргә пособие суммаһы билдәләнде. Һаулығына зыян килгән осраҡта ирекмәнгә бер тапҡыр 50 мең һум түләргә тейештәр.Пособие түләү мәсьәләләре Республика ирекмәндәр хәрәкәте һәм йәштәр башланғыстарына ярҙам итеү үҙәге ҡарамағында була, тип асыҡлыҡ индерҙеләр Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығында.

✓Башҡортостанда "Башҡортостан Республикаһы ирекмәне" наградаһы - Почет билдәһе булдырылды, ул йыл һайын ун ирекмәнгә тапшырыла. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шундай указға ҡул ҡуйҙы. Билдәләнеүенсә, быйыл беҙҙең ирекмәндәр коронавирус инфекцияһына ҡаршы көрәштә алғы сафта булды. Хәҙер Башҡортостанда 400 ирекмән отряды бар.

✓Республикала "Башкиравтодор" дәүләт предприятиеһына етәксе итеп Өфө мэрияһынан 35 йәшлек Илдар Юланов тәғәйенләнде. Илдар Юланов 2019 йылдың июленән Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары - Транспорт һәм элемтә идаралығы начальнигы булып эшләне. Бынан алда ул ошо идаралыҡта пассажир транспортын үҫтереү программалары бүлеге етәксеһе вазифаһын биләне.

✔ *Рейтингта Яңы Зеландияның беренсе урынға сығыуы һис ғәжәп тә түгел, сөнки бында коронавирустан тәүге үлем осрағынан уҡ ил сиктәре ябыла, ҡәтғи локдаун иғлан ителә һәм халыҡ быны бик аңлап ҡабул итә.*



БЫНАҒАЙЫШ!

**Һаулыҡ һаҡлау өлкәһе быйыл айырым бер илдең генә түгел, ә тотош донъя кимәлендә социаль сәйәсәт сиктәренән сығып, дөйөм милли хәүефһеҙлек сараһына әүерелде. Беренсенән, ул көтөлмәгән осраҡтарҙа һәр илдең эске милли мәнфәғәтен һәм хәүефһеҙлеген һаҡларға әҙерлек хәлен, потенциаль мөмкинлектәрен асып һалһа, икенсенән, теге йәки был дәүләттең социаль йүнәлешен - кешелеклелек йөҙөн күрһәтте. Эйе, коронавирус пандемияһы тап ана шундай көҙгө рәүешен дә үтәне.**

# БЕР АЯҒЫНА АҠҺАРМЫ?

Яныраҡ тап ошо йәһәттән Bloomberg тарафынан коронавирусҡа ҡаршы көрәштә донъя илдәренең пандемияға ҡаршы тороу кимәлен билдәләү буйынса рейтинг төҙөлгәйне. 53 илдән торған был рейтинг исемлегендә Рәсәйҙең ни бары 22-се урынға ҡалыуы, әлбиттә, бик күп һорауҙар тыуҙыра, сөнки илдәр бында 10 төрлө күрһәткес буйынса баһалана. Иң тәүҙә илдә һуңғы айҙарҙа һәр 100 мең кешегә ҡарата күпме коронавирус йоҡторо-усы булыуы, пандемия башланғандан алып 1 млн кешегә тап килгән үлем һаны, тапшырылған анализдарҙың ыңғай тестар өлөшө һәм вакциналар һатып алыу өсөн төҙөлгән килешеүҙәр төп факторҙар булараҡ иҫәпкә алына. Ҡалған күрһәткестәр ҙә илдәрҙең һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге сәйәсәтен сағылдырыусы мөһим пункттарҙан тора: пандемия сәбәпле иғлан ителгән сикләүҙәр һәм сараларҙың ҡәтғилеге, халыҡтың был осорҙа өйҙә һәм сауҙа үҙәктәренә йөрөү мөмкинлеге һәм, әлбиттә, 23 параметр (балалар прививкаларынан алып яман шеш сирҙәрен дауалауға тиклем) буйынса илдең һаулыҡ һаҡлау системаһы һөҙөмтәлелеге билдәләнә.

Рейтингта Яңы Зеландияның, көтөлмәгәнерәк тойолһа ла, беренсе урынға сығыуы һис ғәжәп тә түгел, сөнки бында коронавирустан тәүге үлем осрағынан уҡ ил сиктәре ябыла, ҡәтғи локдаун (сикләүҙәр) иғлан ителә һәм халыҡ быны бик аңлап ҡабул итә, бераү ҙә беҙҙәге һымаҡ башбаштаҡлыҡ күрһәтмәй. Һөҙөмтәлә Яңы Зеландияла сир йоҡтороу осраҡтары бер нисәү генә теркәлә һәм был ҡурҡыныс менән янамау сәбәпле, ил нормаль тормошто дауам итә. 2-се урындағы Япония, үҙегеҙ беләһегеҙ, халҡының тәртипле һәм аңлы булыуы менән отто. Өҫтәүенә, унда ваҡытында туберкулезға ҡаршы көрәш тәжрибәһе - кешеләрҙең аралашыу мөхитен күҙәтеү системаһы яҡшы эшләгән. Артабан Тайвань, Көньяҡ Корея, Финляндия, Норвегия, Австралия, Ҡытай, Дания, Вьетнам рейтингты дауам итә. Хатта таж-зәхмәттән иң күп һанлы зарарланыусы АҠШ та был рейтингта Рәсәйҙән алға сыҡҡан - 18-се урында. Ҡушма Штаттарҙың һөҙөмтәле дауалау сараларына (тәүлегенә 139 меңдән ашыу кеше аяҡҡа баҫтырыла) һәм вакцинаға ныҡлы иғтибар бирелеүе иҫәпкә алынған.

Рейтинг һөҙөмтәләре Рәсәйҙең пандемияға ҡаршы көрәштәге ике төп йүнәлеш: тәртип һәм аңлылыҡ кимәле яғынан да, һаулыҡ һаҡлау системаһының әҙерлек кимәле, дауалау һөҙөмтәлелеге буйынса ла күп илдәрҙән артта ҡалыуын күрһәтә. Ҡайһы яҡтан ғына ҡараһаң да, Рәсәйҙә һаулыҡ һаҡлау системаһын артабан камиллаштырыу, үҫтереү кәрәклеге бәхәсһеҙ һәм был ошо өлкәлә белгес булмаған кешеләр лә асыҡ күрене.



**Үкенескә, власть даирәләре икенсерәк төрлө уйҙа, ахыры, сөнки ошондай хәлдәргә, бигерәк тә пандемия хәүефенә ҡарамай, ошо көндәрҙә Дәүләт Думаһында һаулыҡ һаҡлау һәм социаль сәйәсәткә сығымдар бермә-бер ҡыҫҡартылған мөһим документ - 2021-2023 йылдарға федераль бюджет проекты күпселек тауыш менән ҡабул ителде. Ҡайһы бер эсе теллеләр был документты "медицина скальпеле ҡулланылған" бюджет тип атаны һәм уның нигеҙҙә бизнестан, шулай уҡ халыҡтан йыйымдар туплауға иҫәпләнеп, бер үк ваҡытта һаулыҡ һаҡлауға, социаль сәйәсәткә һәм төбәктәргә ярҙам өсөн сығымдарҙың кәметелеүен тәнҡитләп сығырға ла өлгөрҙө.**

Тәү ҡарашҡа, ҡағыҙҙа һәм бөгөнгө һандар менән килһә йылға һаулыҡ һаҡлауға дәүләт сығымдары (пандемия зыянын да иҫәпләп) 2019 йылға ҡарағанда байтаҡҡа артасаҡ та һымаҡ, тик инфляция юғалтыуҙары һөҙөмтәһендә киреһенсә килеп сығасағын раҫлай белгестәр. Йәғни, килһе йыл һаулыҡ һаҡлауға сығымдарҙың быйылға ҡарағанда - 3, ә унан һуңғы йылдарға 4 процентҡа тиклем кәмейәсәге фаразлана.

Әбит һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә аҡса етешмәүҙең ниндәй бәләләргә килтереүен бөгөнгө көн дә бик асыҡ күрһәтте. Иң тәүҙә был ошо өлкәне кадрҙар - табиптар менән тулыландырыу эшенә аяҡ салаcаҡ. Хәйер, кадрҙар ҡытлығына нисә йылдар инде шаһитбыҙ, ә пандемия шарттарында был ысын мәғәнәһендә фажиғәгә әүерелде. Бөгөнгө хәлебеҙ табиптарҙың әһәмиәтен аңларға, уларҙың хеҙмәтен баһаларға, ихтирам итергә өйрәтмәнеме икән ни юғарыла ултырғандарҙы? Әйткәндәй, медиктар йәмғиәттәре берлеге табиптарҙың социаль гарантияларға хоҡуғын закон нигеҙендә ныҡытыу тураһында һүҙ ҡуҙғата икән, тимәк, был категория һөнәрмәндәр үҙҙәрен социаль яҡланған мөхиттә күрмәй. Тимәк, табип һөнәренең абруйы кәмегәндән-кәмей. Пандемияға тиклем бит уларҙың күпселегенә шәхси ваҡыттары менән дә иҫәпләшмәйенсә бер нисә ставкаға эшләп йөрөргә тура килде. Ә бөгөнгө шарттарҙа, етмәһә, улар үҙ сәләмәтлектәрен үлемесле хәүеф аҫтына ҡуйып, "ҡыҙыл зонала", кемдер хаҡлы әйтмешләй, алғы һыҙыҡта хеҙмәт итергә мәжбүр. Ошондай хәлдәрҙән һуң да, медицинаға бюджет ниндәй генә "сонтор" булмаһын, ул табиптарға лайыҡлы эш хаҡы тәғәйенләүгә кәртә булырға тейеш түгелдер. Бынан тыш та бит әле медицина учреждениеларын заманса медтехника, махсус автотранспорт менән яңыртыу, тулыландырыу кәрәк.

Эксперттар фекеренсә, әле ҡабул ителгән бюджет халыҡҡа бушлай медицина ярҙамына мөмкинлектең кәмеүенә килтереүе ихтимал. Шул уҡ ваҡытта ташламалар буйынса бушлай дарыуҙар менән тәьмин итеүҙә лә проблемалар тыуыуы бар, сөнки Мотлаҡ медицина страховкаһы фонды өлкәһендә үткәрелгән реформалар, страховкалау компанияларын финанслауҙы ҡыҫҡартыуҙың да һөҙөмтәләре һаулыҡ һаҡлау файҙаһыналыр тип раҫлап булмай. Етмәһә, "пандемия дауам итеүенә бәйле Рәсәйҙә үлем кимәле йылына 130-140 мең кешегә барып баҫыуы ихтимал һәм уларҙың яртыһы коронавирус ҡорбанына әүерелһә, ҡалғандары ваҡытында медицина ярҙамы ала алмағанлыҡтан яҡты донъя менән хушлашасаҡ", - тип һығымта яһай Һаулыҡ һаҡлауҙы ойоштороу һәм идара итеү буйынса Юғары мәктәп ректоры Гүзәл Улумбекова.

Эксперттар башҡа төрлө хәүефле фараздар ҙа килтерә. Рәсәйҙә 2017 йылдан бирле тыуым кимәле кәмеүе күҙәтелә. Һуңғы 30 йылда Рәсәйҙә ғәрип балаларҙың тыуыуы 4,4 тапҡырға артыу факты ла илдәге һаулыҡ һаҡлау проблемаларына етди ишара. Балалар дауаханаларында егермә йыл эсендә койка урындар 54 процентҡа ҡыҫҡартылған, педиатрҙар етешмәй. Был проблемаларҙың барыһы ла бөгөн һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә дәүләт сығымдарын мөмкин тиклем арттыра барыу кәрәклегенә баҫым яһай. Әгәр шулай булмай икән, Рәсәй байтаҡ халҡын юғалтасаҡ, ти белгестәр. Тик шул уҡ ваҡытта Хөкүмәт милли оборонаға аҡса йәлләмәй: килһе өс йыллыҡҡа хәрби сығымдар өсөн 10 триллионға яҡын аҡса бүлеү ҡарала. Ә бит һаулыҡ һаҡлау өлкәһе лә, оборона кеүек үк, көн-төн ил хәүефһеҙлеген, халыҡ именлеген тәьмин итеү һағында тора. Стратегик ресурс булараҡ, кеше гүмере - ил ҡеүәте ул. Уларға тигеҙ ҡараш юҡ икән, тимәк, ил именлеге бер аяғына аҡһарға тейеш булып сығамы инде?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**



● Почтальондарға бик тә рәхмәтлебеҙ, улар үҙ эшен эшләй, өйҙән-өйгә, фатирҙан-фатирға йөрөп, матбуғат баҫмаларын тарата. Шуға ла бар ышанысыбыҙ, өмөтөбөҙ - почта хеҙмәткәрҙәрендә һәм... уларҙы өйҙәрендә ҡабул итеп, гәзитебеҙҙе яҙылыу гәмәлен атҡарыусы аңлы милләттәштәребеҙҙә. Әйткәндәй, гәзитте әүҙем таратыусы почтальондарға ла ошондай матур бүләктәр әҙерләйбеҙ. Улар, әлбиттә, 10, 20, 30 дана гәзит яҙҙырыусылар өләшенә эләгәсәк.

● Бөгөн, бөтә донъяны тетрәткән коронавирус ваҡиғалары мәлендә, гәзиткә яҙылыу кампанияһын ойоштороу, үткәреү бик үк еңелдән түгел икәнен белеп-һиҙеп тораһығыҙҙыр. Шуға ла ҡайта-ҡайта мөрәжәғәт итәбеҙ уҡыусыларыбыҙға: әйҙәгеҙ, гәзитебеҙгә яҙылып, дуҫлығыбыҙҙы, берҙәмлегебеҙҙе артабан да нығытыуҙы дауам итәйек!

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔7 декабрҙән республиканың барлыҡ мәктәптәрендә лә уҡыуҙар башлана. Төбәк оператив штабында коронавирус таралыуы буйынса хәлдең тотороҡланыуы менән бәйле ошондай ҡарар ҡабул ителде. Белеүегеҙсә, уҡыусылар 9 ноябрҙән алып дистанциялы уҡыуға булғайны.

✔Рәсәй Гидрометүҙәге фаразы буйынса, республикала ҡыштың тәүге айы фаҙаттағанән бер градусҡа һыуығыраҡ булыуы көтөлә. Уртаса һауа температураһының -11,-12 градус (норма -11), ауыл-төшөмдөң фаҙаттағанән аҙыраҡ булыуы фаразлана. Температура бер төрлө булмаясаҡ, айырыуса төнгө сәғәттәрҙә: -13,-20, болотло булғанда -7,-12 градус. Көнсығыш райондарҙа -22,-27 градусҡаса һыуыҡ була, көндөҙ -7,-13, таулы райондарҙа -14, -17.

✔Башҡортостанда 2020 йылдың өсөнсө кварталы өсөн йәшәү минимумының уртаса дәүмәле раҫланды. Республика Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, йәшәү минимумының уртаса айлыҡ дәүмәле йән башына 9 908 һум тәшкил итте. 2020 йылдың икенсе кварталы менән сағыштырғанда республикала йәшәү минимумы күләме 107 һумға кәмене.

✔Башҡортостанда ата-әсә ҡарауынан ҡалған етем балалар өс йәшкә тиклем "Һөт кухняһы" продукцияһын бушлай алырға мөмкин. Бушлай тукланыуҙы юллау өсөн ғариза яҙырға һәм "Һөт кухняһы" учреждениеһы менән килешеү төҙөргә кәрәк. Һөт кухняһы продукцияһы менән тәьмин итеү мәсьәләһе буйынса 8 (347) 246-55-01 номеры буйынса шылтыратып кәңәшләшергә була.

✔Рәсәйҙә яңы коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймауға бәйле барлыҡ карантин һәм иҫкәртеү саралары 2022 йылдың 1 ғинуарына тиклем оҙайтыла. Роспотребнадзор ҡарарында йәмәғәт урындарында битлек кейеү, социаль дистанцияны һаҡлау, бәйләнештә булғандар өсөн мотлаҡ изоляция кеүек сикләүҙәрҙе оҙайтыу һәм башҡалар хаҡында һүҙ бара. Шулай уҡ эш урындарында термометрия һәм дезинфекция үткәреү һаҡлана, уҡыу йорттарында күп кеше ҡатнашҡан саралар тыйыла.

✔Рәсәйҙең Сит ил эштәре министрлығы вәкиле Мария Захарова 8-11 декабрҙә Өфөлә "Халыҡ-ара бизнес аҙналығы" ойошторолоуы тураһында иғлан итте. Башҡортостан хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров һүҙҙәренсә, дүрт көнлөк эшләкле программа ШОС һәм БРИКС илдәренең бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ, туризм, иҡтисад һәм экспорт темаларына арнала. Форумды 33 майҙансыҡта уҙғарыу, кәмендә 50 сәғәтлек дискуссия ойоштороу планлаштырыла.

✓ *"Өфө халҡы йүкәләр ҡырҡылғас, бик ныҡ көйәләнгәйне, беҙ бында шыршылар ултыртабыҙ, - тине Радий Хәбиров. - Совет майҙаны ысын мәғәнәһендә монументаль буласаҡ, беҙ уның менән ғорурланасаҡбыҙ".*



*ҠЫҪҠАСА*

# ПУТИН ЯУАП ТОТА

**Рәсәй Президенты Владимир Путин йомғаҡлау матбуғат конференцияһын 17 декабрҙә үткәрә.** Хәбәр ителеүенсә, ҡатмарлы эпидемиологик хәлгә бәйле был йылы матбуғат конференцияһы видеоконференция режимында уҙғарыла. Президент үҙенең Яңы Огарёвта урынлашҡан резиденцияһынан видеоэлемтәгә сығасаҡ. Билдәле булыуынса, федераль һәм сит ил киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре Халыҡ-ара сауҙа үҙәге залында эшләй. Төбәк киң мәғлүмәт саралары журналистары үҙҙәренең Федераль округынан сыҡмайынса сарала ҡатнаша ала: һәр округта Мәскәү менән бәйләнешкә инеү өсөн махсус майҙансыҡтар ойоштороla. Волга буйы федераль округы өсөн Түбәнге Новгород була. Роспотребнадзор талаптарын иҫәпкә алып, һәр майҙансыҡта ҡатнашыусылар һаны сикләнә. Журналистар өсөн аккредитация 29 ноябрҙә башланды.

✓ **Башҡортостанда йәшәүселәр льготалы ауыл ипотекаһы программаһы буйынса 3,7 миллиард һумға 1818 кредит алды, тип хәбәр иттеләр республиканың Ауыл хужалығы министрлығынан.** Республика Ленинград һәм Новосибирск өлкәләре менән бер рәттән лидерҙар иҫәбендә. Рәсәйҙә кредитлау күләме - 59,7 миллиард һум, был 1,6 миллион квадрат метр торлаҡ һатып алырға йәки төҙөргә мөмкинлек бирергә тейеш. Ауыл ипотекаһының күләме 25 йылға тиклем 3 миллион һум тәшкил итеүе ихтимал. Процент ставкаһы йылына - 0,1-ҙән 3 процентҡа тиклем, ә төп ставканы (йылына 8 процент самаһы) Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы ҡаплай. Шулай уҡ инженер коммуникацияларын үткәреү өсөн ҡулланыусылар кредитын алырға була. Уның күләме йылына 5 процент менән биш йылға 300 мең һум тәшкил итергә мөмкин.

✓ **Башҡортостанда дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдары араһында дәүләт милке сикләнмәгән ер биләмәләрен биреү буйынса вәкәләттәрҙе бүлеү тураһында ҡануниәттең үтәлешен күҙәтеү буйынса эшсе төркөм булдырылды.** Эшсе төркөмдә парламенттың урындағы үҙидара, граждандар йәмғиәте институттарын үҫтереү һәм киң мәғлүмәт саралары комитеты рәйесе Салауат Хөсәйенов етәкләй. "Хәҙер төп бурыс - закон халыҡҡа проблемалар тыуҙырмаһын, ә ынғай үҙгәрештәргә килтерһен өсөн уны контролдә тотоу, - тип билдәләне Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Халыҡтан килгән мөрәжәғәттәргә һәм ялыуҙарға иғтибар итербеҙ, ҡатмарлы хәлдәр килеп тыуған осраҡта урындағы хакимиәттәр менән бергә асыҡларбыҙ. Етешһеҙлектәр табылһа, законды ҡайтанан әҙерләрбеҙ".

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## УРЫНДАҒЫ ЕТЕШТЕРЕҮСЕГӘ...

**Республика Башлығы Радий Хәбиров Республика Йортонда биләмәләрҙе төҙөкләндереүҙә урындағы етештереүселәрҙең продукцияһын ҡулланыу буйынса кәңәшмә үткәрҙе.**

Сара алдынан ул Сибай, Баймаҡ, Белорет һәм Нуриман райондары эшҡыуарҙары сығарған тротуар плитәһе һәм йөҙләү ташы күргәҙмәһе менән танышты. Күргәҙмәлә ҡатнашыусылар белдереүенсә, төбәктә төҙөкләндереү продукцияһына һорау йылдан-йыл арта. Был республика район-ҡалаларында уңайлы мөхит булдырыу буйынса алып барылған киң ҡоласлы эшмәкәрлек һөҙөмтәһе. Радий Хәбиров плитәнең, декоратив кирбестең, йөҙләү ташының ҙур ассортиментын билдәләп, сираттағы "Инвестсәғәт"тең береһен ошо тармаҡҡа арнарға ҡушты һәм төҙөкләндереү программаларын тормошҡа ашырғанда республика етештереүсеһенә айырым иғтибар бирергә кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Әлбиттә, был уларға тәү сираттағы өҫтөнлөк булырға тейеш, тигәндә аңлатмай. Әгәр айырым проекттарға таштың билдәле сорты ғына кәрәк һәм республика уның менән тәьмин итә алмай икән, башҡаларҙы ла йәлеп итергә мөмкин, - тине ул. - Әммә шул уҡ "Башҡортостан ихаталары"нда беҙ, хаҡтар һәм сифат талаптарға тап килгән осраҡта, үҙебеҙҙең етештереүселәргә ярҙам итергә тейешбеҙ". Башҡортостан Башлығы бындай продукция сығарыусы республика компанияларының исемлеген булдырырға ҡушты. Әйткәндәй, был исемлеккә эләгерҙән алда эшҡыуарҙар һәм предприятиелар сифат тикшереүен үтәсәк.

## ӨФӨ ЙҮКӘЛӘРЕН...

**Совет майҙанында ҡарт йүкәләр урынына шыршылар ултыртылды. Мәғлүм булыуынса, әле майҙанда реконструкция эштәре алып барыла, унда легендар 112-се Башҡорт (16-сы Гвардия) кавалерия дивизияһы командиры, Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәли Шайморатовҡа һәйкәл ҡуйыласаҡ. Эштәр йыл һуңына тиклем тамамланырға тейеш.**

Ошо көндәрҙә Республика Башлығы Радий Хәбиров эш барышы менән танышты. Майҙанда буласаҡ һәйкәл өсөн нигеҙ һалынған, фонтандың ер аҫты инженер ҡоролмалары монтажланған, уға гидравлика һынауҙары үткәрелгән, ямғыр һыуҙарын ағыҙыу буйынса эштәр башланған. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты алдындағы скверҙа иҫке брусчатка алынған, ағастарҙы биҙәүсе яҡтыртыу ҡоралмалары ҡуйыла. Музыка мәктәбе алдында декоратив яҡтылыҡ сығанаҡтары урынлаштырылған, йәйәүлеләр өсөн юлдар төҙөкләндерелгән. "Өфө халҡы йүкәләр ҡырҡылғас, бик ныҡ көйәләнгәйне, беҙ бында шыршылар ултыртабыҙ, - тине Радий Хәбиров. - Совет майҙаны ысын мәғәнәһендә монументаль буласаҡ, беҙ уның менән ғорурланасаҡбыҙ, балаларыбыҙ менән киләсәкбеҙ һәм был урындың бөйөклөгән аңлаясаҡбыҙ - сөнки тап ошонда 1942 йылда генерал Шайморатовҡа Ҡыҙыл Байраҡ тапшыралар. Бында автомобилдәр туҡталҡаһы булыуы ата-олатайҙарыбыҙҙың иҫтәлеген рәнйетеү тип иҫәпләйем".

## ТУҠТАЛҠА - ТҮЛӘҮЛЕ

**Башҡортостанда түләүле туҡталҡалар тураһында закон көсөнә инде. Ул дәүләт һәм муниципаль ерҙәрҙәге парковка эшмәкәрлеген көйләй.**

БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев билдәләүенсә, ҡанун транспорт көсөргәнеше юғары булған проблемалы биләмәләрҙә бер урында оҙаҡ туҡталған транспорт өсөн түләү индереүҙе күҙаллай. Был - Өфө өсөн көнүҙәк мәсьәлә. "Ҡаланың эшлекле үҙәгендә эш көндәрендә ҡайҙалыр туҡталыуы бик ҡатмарлы. Ҡайһы бер автотранспорт хужалары юлдың ситке һыҙатын көн дауамында биләй, шуның менән башҡаларға ҡамасаулай, юлды тарайта. Әгәр оҙайлы парковка түләүле булһа, үҙәк барыһы өсөн дә уңайлы буласаҡ", - тип аңлата ул.

Ҡанунға ярашлы, машинаны түләүле парковкаларҙа 20 минутҡа тиклем бушлай ҡалдырырға мөмкин. Әгәр парковка мәктәп, дауахана, мәҙәниәт, спорт объекттары йәки власть органдары бинаһары эргәһендә булһа, мәсьәләне хәл итеүгә оҙайлыраҡ ваҡыт кәрәк булғанлыҡтан, бушлай бер сәғәт туҡталып торорға була. Эш көндәрендә киске 9-ҙан иртәнге 7-гә тиклем, шулай уҡ ял, байрам көндәрендә парковка бушлай. Шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡандар һәм инвалидтар, уларҙы алып килеүсе машиналар, бындай хоҡуҡҡа эйә башҡа категория граждандар парковка өсөн түләмәй. Парламент спикеры белдереүенсә, законды көсөнә инеүе түләүле парковкалар бөгөн үк бөтә ерҙә лә булдырыла, тигәндә аңлатмай. "Яңы талаптарҙы ҡулланыу өсөн ваҡыт кәрәк. Закон вәкәләтле органдарға барлыҡ мәғлүмәтте сайттарҙа һәм норматив-хоҡуҡи акттар баҫылған киң мәғлүмәт сараларында бер ай алдан хәбәр итеүҙе йөкмәтә. Мәғлүмәттә дата, сумма, түләү тәртибе һәм юл хәрәкәте өлкәһендәге проблеманы шундай алым менән хәл итеү күрһәтелергә тейеш", - ти Константин Толкачев.

## ЭКОТУРИЗМ ҮҘӘГЕ БУЛҺЫН

**Экотуризмды үҫтереү буйынса Бөтә Рәсәй конкурсында Башҡортостан бронза миҙалға лайыҡ булғас, республика Башлығы Радий Хәбиров донъя кимәлендәге туристарҙы йәлеп итеү үҙәге ойоштороу маҡсатын ҡуйғайны. "RUSSPASS" (мәҙәни-мәғрифәтселек һәм күңел асыу ялын тулыһынса күҙаллау мөмкинлеге биргән цифрлы туристик сервис) платформаһында ҡатнашыу ошо йүнәлештә бер аҙым булып торҙо.**

"Туристар менән урында эшләүсе кеше булараҡ, шуны әйтә алам: быйылғы миҙгелдә уларҙың ағымы ике тапҡырға күберәк булды. Быға сиктәрҙең ябылыуы ла, Башҡортостанды федераль кимәлдә социаль селтәрҙәр һәм киң мәғлүмәт саралары аша күрһәтеү йоғонто яһаны. Быйыл был бигерәк тә ныҡ һиҙелде, - ти "Шүлгәнташ-тур" туроператор компанияһы директоры Урал Хәлиуллин. - Июль башында август һуңына тиклем барлыҡ путевкалар ҙа һатылып бөткәйне. Яңы маршруттар булдырырға, яңы катамарандар һатып алырға, хеҙмәтләндереүселәр һанын бер нисә тапҡыр арттырырға тура килде".

Туризм буйынса эксперт Артур Иҙелбаев республиканың туризм өлкәһендәге уңышының сәбәптәрен билдәләне: улар - юл буйы туристик сервисын үҫтереү концепцияһын эшләү һәм индереү, төп туристик йүнәлештәргә туристик навигация билдәләре ҡуйыу, юлдар һәм туристарҙы ылыҡтырырлыҡ ҙур объекттар төҙөү. Уңайлы ҡала мөхите булдырыу, яңы автобустар алыу, яңы фонтандар, парктар, скверҙар, һәйкәлдәр, ҡала халҡы һәм килгән ҡунаҡтарҙың башҡа ял итеү урындарын булдырыу һәм элеккеләрен төҙөкләндереү, Ағиҙел яры буйын эшләү Өфөнөң һәм республиканың башҡа ҡалаларының ылыҡтырыу көсөн арттыра.

"Тархан" туроператоры вәкиле Илдар Биккузин әйтеүенсә, республиканың туристик ҡеүәтен күрһәтеү һәм артабан үҫтереү өсөн даими рәүештә федераль кимәлдәге һөнәри конкурстарҙа, күргәҙмәләрҙә һәм башҡа сараларҙа ҡатнашырға кәрәк. "Үҙендә күрһәтергә, башҡаларҙы ҡарарға, тәжрибә өйрәнергә кәрәк. Һуңғы ике йылда БР Туризм буйынса дәүләт комитеты һәм Туризмды үҫтереү үҙәге ағынан был эш системаға һалынды, шул иҫәптән финанс ярҙамы күрһәтеү буйынса ла", - ти агентлыҡ вәкиле.

Әйткәндәй, Мордовияла үтәсәк "Маршруты года - 2020" Бөтә Рәсәй премияһы финалына республиканан 18 проект ҡатнаша. Russia Event Awards 2020 конкурсына 11 проект үткән. Башҡортостандың быға сыҡа бындай ҡаҙаныштары булғаны юҡ ине әле.

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө мэры вазифаһын башҡарыусы итеп ҡала хакимиәте етәксеһе урынбаҫары вазифаһында кадрҙар, спорт, граждандарлыҡ йәмғиәте һәм йәштәр мәсьәләләре өсөн яуап биргән Рөстәм Ғәзизов тәғәйенләнде. 2 ноябрҙә ошо вазифаға тәғәйенләнгән Радмил Мөслимов сәләмәтлек торошо буйынса вәкәләттәрен һалды - унда коронавирус асыҡланды.

✓Өфөлә 1 декабрҙә ковид-госпиталдә эшләгән табиптарҙы ташыу буйынса акция старт алды. "Берҙәм Рәсәй"ҙең тыуған көнөндә партия ағзалары Зубов ауылындағы йөгошло сирҙәр үҙәге табиптарына ошондай бүләк эшләне. Тәүгеләрҙән булып акцияға республика Дәүләт Йыйылышы депутаттары, "Рәсәй терәге" эшҡыуарҙары һәм башҡарма комитет хеҙмәткәрҙәре ҡушылды. Әлеге ваҡытта акция ковид-госпиталдәрҙә эшләгән барлыҡ табиптарҙы йәлеп итә алһын өсөн такси компаниялары менән һөйләшеүҙәр алып барыла.

✓Баш ҡалала 590 егеткә эҙләү иғлан ителгән. Улар барыһы ла хәрби хеҙмәттән ҡасып йөрөй. Әрме хеҙмәтенән ҡасып ҡалыусылар өсөн яза ла ҡаралған: 200 мең һумға тиклем штраф, алты айға тиклем ҡулға алыу йәки ике йылға тиклем төрмәгә ябыу. Ҡайһы бер өфөләр призыв комиссияларының ҡарарын суд аша хәл итергә тырыша. Бөгөн судтарҙа шундай 30 эш ҡарала.

✓Өфөнөң күп фатирлы йорттарының фасадтарында бурыстарҙы түләүгә саҡырған һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн ҙур күләмле бурыстары йыйылған фатирҙарҙың һандары яҙылған баннерҙар күренә башланы. БашРТС белдереүенсә, тиҙҙән шундай мәғлүмәтте баш ҡаланың барлыҡ хакимиәттәрендә һәм ойошма хеҙмәтләндергән башҡа ҡалаларҙа ла күрергә тура киләсәк. Бөгөнгә граждандарҙың БашРТС алдында 2 миллиард һум бурысы бар.

✓Өфөлә "Тулҡын" паркына инғән ерҙе популяр йәнһүрәт геройҙарының һындары биҙәй. Бөтәһенә лә таныш булған "Ну, погоди!" һәм "Трое из Простоквашино" йәнһүрәттәренән Бүре һәм Матроскин ҡала халҡының яратҡан урынына урынлаштырылды. "Башҡортостан кирбесе" йәмғиәте ҡуйған артобъект ҡала халҡына бүләк булды. Скульптура балаларға ла, өлкәндәргә лә бик оҡшай, өфөләр улар янында фотоға төшөп, социаль селтәргә һала.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ШЫРШЫ ҠУПШЫ КЕЙЕНӘ...



**Башҡортостанда коронавирус пандемияһы шарттарында Яңы 2021 йылды байрам итеү тураһында ҡарарҙар ҡабул ителде. Республика Башлығы Радий Хәбиров ҡала-ауылдарҙа боҙ ҡаласыктары һанын арттырырға ҡушты. Был боҙ ҡаласыктары биләмәһендә халыҡтың күпләп йыйылыуына юл ҡуймаясаҡ. Майҙансыҡтар 10 декабргә үк әҙер булырға тейеш. Бынан тыш, балалар баҡсаларында яңы йыл иртәлектәре үткәрергә рөхсәт ителде, ләкин төркөмдәрҙә һәм ата-әсәләр ҡатнашлығынан тыш. Рестораҡдарға килгәндә, улар Яңы йылда - тәүлек әйләнәһенә, яңы йыл каникулдары көндәрендә таңғы 6-нан төнгө 2-гә тиклем эшләргә мөмкин.**

Өфө Яңы 2021 йылды байрам итеүгә нисек әҙерләнә? Мэрия мәғлүмәттәре буйынса, ҡалала өс баш ҡала, 16 район шыршыһы һәм күп фатирлы йорттарҙың ихаталарында, сауҙа предприятиелары биләмәләрендә 90-ға яҡын шыршы ҡуйыу күҙаллана.

**Өфөнөң төп шыршылары** Ленин исемендәге майҙанды, Салауат Юлаев майҙанын һәм Совет майҙанын биҙәй.

"Район" шыршылары һәм боҙ ҡаласыҡтарына килгәндә, Яңы йыл ҡупшыҡайҙарының күпселеге **Калинин районында** ҡуйыла ("Моторҙар эшләүселәр" мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда; Инорс биҫтәһендә; Шакша биҫтәһендә; Кенәз, Базилевка ауылдарында биш төп һәм күп фатирлы йорттар, сауҙа предприятиелары биләмәләрендә - 26 шыршы).

"Шыршы бумы" буйынса икенсе урында - **Киров районы** (Мөбәрәков урамында бер төп һәм күп фатирлы йорттар, магазиндар биләмәләрендә - 21 шыршы).

Өсөнсө урын **Октябрь районында** ("Кашҡаҙан" паркында, Спорт һарайы алдындағы майҙанда һәм Нуғай ауылында өс төп һәм күп фатирлы йорттар, магазиндар биләмәләрендә - 12 шыршы).

Артабан **Дим** ("Дим" мәҙәниәт һәм ял паркы янында бер төп һәм күп фатирлы йорттар, магазиндар биләмәләрендә - 11), **Орджоникидзе** (С. Орджоникидзе исемендәге майҙанда, Тимашево, Яңы Черкассы ҡасабаларында өс төп һәм күп фатирлы йорттар, магазиндар биләмәләрендә 8), **Совет** (Өфө балалар филармонияһы алдындағы майҙанда бер төп һәм күп фатирлы йорттар, магазиндар биләмәләрендә - 10) һәм **Ленин** ("Тулҡын" паркы алдындағы майҙанда, "Йәдкәр" мәҙәниәт һарайы янында ике төп һәм күп фатирлы йорттар, магазиндар биләмәләрендә - 2) районлары килә.

Өфөнөң төп майҙанына Яңы йыл шыршыһы урынлаштырылды ла инде. 90 йәшлек йәшел ҡупшыҡайҙы Башҡортостандың Благовещен районынан килтерҙеләр. Уның бейеклеге - 30 метр. Коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре шыршыны биҙәй һәм боҙ ҡаласығы төҙөй башланы.

Байрам иллюминацияларын да ҡороу эштәре башланды. Улар Ленин майҙанында, Орджоникидзе исемендәге Мәҙәниәт һарайы алдында, Ленин һәм Пушкин урамдары киҫелешендә урынлаштырыласаҡ. Баш ҡалала ҡуйыласаҡ яҡтыртҡыс үремдәре 48 мең лампанан торасаҡ һәм 18 километр оҙонлоҡҡа һуҙыласаҡ. Мэрия төрлө предприятие биналарын һәм сауҙа объекттарын биҙәргә, Яңы йыл кәйефе тыуҙырырға саҡыра.

*ҺЕҘҘЕ КӨТӘЛӘР*

# БЫЛ МУЗЕЙҘА БУЛДЫҢМЫ?



**Бынан бер йыл элек 13 сентябрҙә Өфө ҡалаһы тарихы музейы асылды. Ул традицион музей технологиялары һәм мультимедиа ҡорамалдары комплексы менән йыһазландырылыуы йәһәтенән үҙенсәлекле. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә учреждение баш ҡаланың әһәмиәтле мәҙәни һәм туристик объектына әүерелә - ошо ваҡыт эсендә уны 15000 самаһы кеше ҡараған.**

Музейҙа дүрт зал бар һәм улар Өфөнөң 400 йылдан ашыулыҡ тарихын сағылдыра. Интерактив экспозицияларҙа уникаль мәғлүмәт тупланған. Бында күргәҙмәләр, презентациялар, лекциялар, акциялар, тыуған яҡты өйрәнеүселәр, тарихсылар менән осрашыуҙар үтә.

Ҡатмарлы эпидемиологик шарттарҙа ла музей үҙ эшен дауам итә. Хеҙмәткәрҙәр һәм килеүселәр өсөн булдырылған саралар һәм ҡағыҙәләр эште хәүефһеҙ режимда алып барыу мөмкинлеген бирә. Сикләүҙәр индереү һөҙөмтәһендә музей менән айына 500 кеше генә таныша алһа, уның ҡарауы, социаль селтәрҙәге сәхифәһенә инеүселәр көндән-көн арта.

Музей үҙенең рәсми аккаунттарында тура эфирҙар, трансляциялар, акциялар, онлайн-тестар, викториналар ойоштора, "Ҡыҙыҡлы факттар", "Өфө тормошонан бер көн" рубрикаларында мәғлүмәт постары урынлаштыра. Быйыл "Музейҙар төнө", "Сәнғәт төнө" онлайн форматта үткәрелгән.

Музей хеҙмәткәрҙәре Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығына ла әҙерләнә: яңы күргәҙмәләр, мультимедиа экспозициялары ойоштороға, Өфө тарихынан ҡыҙыҡлы факттар баҫтырырға, фәнни тикшеренеүҙәр үткәрергә һәм музей фондын яңы экспонаттар менән тулыландырырға ниәтләй.

*ҠЫҪҠАСА*

# БАЙРАМ ИТӘСӘКБЕҘ!

**Рәсәй Президенты Владимир Путин бөгөн 2024 йылда Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығын байрам итеү тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.** Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә хәбәр итте. Ошо документҡа ярашлы, өс ай эсендә Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Алексей Оверчук рәйеслегендә байрам итеүгә әҙерләнеү һәм уны үткәреү буйынса ойоштороу комитеты төҙөлә. "Шул рәүешле республикабыҙ баш ҡалаһының 450 йыллығына федераль статус бирелә. Тимәк, беҙ Өфөнө үҙгәртеү, ҡаланы заманлаштырыу, уға яңы һулыш биреү һәм илебеҙҙең терәк ҡалаларының береһе итеү өсөн уникаль мөмкинлек алабыҙ, шул иҫәптән федераль үҙәктән ярҙам иҫәбенә. Шуға күрә өфөләр исеменән президентҡа ҡабул ителгән ҡарар өсөн ҙур рәхмәт белдерәм", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

✓ **Комсомол урамында юл хәрәкәте ябылыуы хаҡында күптәр хәбәрҙарҙыр, моғайын. Баш ҡала халҡы ундағы реконструкция эштәренең оҙаҡҡа һуҙылыуына зарлана ла башлағайны инде.** Ниһайәт, уның бер өлөшөндә: Галле ҡалаһы исемендәге урамдан Вишерская урамына тиклем арауыҡ, шулай уҡ Шәфиев урамынан Урман техникумы урамына тиклем арауыҡ асыласаҡ. Әлеге ваҡытта Һәҙиә Дәүләтшина урамынан Галле ҡалаһы исемендәге урамда юл хәрәкәте дүрт һыҙатта, СССР-ҙың 50 йыллығы урамынан Шәфиев урамына тиклем арала ике һыҙатта асылған. Вишерская урамынан СССР-ҙың 50 йыллығы урамы участкаһында әлеге ваҡытта ямғыр һыуын ағыҙыу канализацияһы эшләнә. Ҡала хакимиәтендә аңлатыуҙарынса, объекттың ҡатмарлығы арҡаһында бында эштәр өс йылға планлаштырылған булған. Урамды реконструкциялау буйынса эштәр тулыһынса 2021 йылдың декабрендә тамамланыр тип көтөлә.

✓ **Өфөлә тау саңғыһы миҙгеле асылды. Әле үк тау саңғыһы буйынса олимпия резервындағы спорт мәктәбе һәм "Аҡ Йорт" тау саңғыһы комплексы битләүендә саңғыла, сноубордта шыуырға мөмкин, тип хәбәр итteләр мэрияһан.** "Аҡ Йорт" тау саңғыһы комплексында миҙгел 21 ноябрҙә башланды. Хәҙер комплекста күнекмә битләүе һәм бәләкәй канат юлы эшләй. Тау саңғыһы буйынса спорт мәктәбендә битләүҙәрҙең береһе уҙған кесаҙна асылды (Олимпик-парк) һәм унда әүҙем күнекмәләр бара. "Киләһе аҙнала дүртенсе битләүҙе асабыҙ, әле унда ҡар менән тултырыу эштәре алып барыла. Һауа торошо һәйбәт булһа, декабрь аҙағына биш тау саңғыһы трассаһы ла эшләй башлай", - тип хәбәр итте тау саңғыһы спорты буйынса олимпия резервындағы спорт мәктәбе директоры Андрей Кривошеев. Спорт мәктәбе биләмәһендә инвентарҙы прокатҡа алыу пункты бар. Бында теләгән һәр кем тау битләүендә шыуа ала.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Пневмония

❖ 2-шәр өлөш Исландия мүге, ала миләүшә (фиалка трехцветная) үләне һәм кейәү үләне (тимьян ползучий), 1-әр өлөш татлы тамыр (солодка голая), һары мәтрүшкә үләнен, шифалы шалфей япрағы, һалбыр ҡайын япрағы (береза бородавчатая), дегәнәк тамырын ваҡлап, бутарға. Бер ҡалаҡ ҡатышмаға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Ҡайтмалы пневмония менән яфаланғанда көнөнә 3-4 тапҡыр сирек стаканлап эсергә.

## Аҙ ҡанлылыҡ

❖ Бер тигеҙ нисбәттә кәкүк емеше (медуница) һәм кесерткән япраҡтарын алып, ваҡларға һәм сәй кеүек бешереп, кәрәккәнсә бал ҡушып, көн дауамында йылы көйөнсә эсергә.

❖ Аҙ ҡанлылыҡ булғанда гемоглобин кимәлен ҡара миләш тиҙ күтәрергә ярҙам итә. 50 грамм ҡара миләш емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, бер тәүлек төнәтергә. Ашау мәленә ҡарамай көн дауамында эсеп бөтөргә. Дауаланыу осоро хәл яҡшырғанға тиклем. Миләш ҡандың ойошоусанлығын арттыра, шуны хәтерҙә тотоғоҙ.

❖ Ҡыҙыл миләш тә аҙ ҡанлылыкты дауалағанда бик файҙалы. Бер ҡалаҡ ҡыҙыл миләш һутына бер балғалаҡ бал ҡушып бутап, һәр ашарҙан алда эсергә. Көндәҙгө рационға бауыр, сәтләүектәр һәм йәшелсә ҡушырға.

## Ҡанды шыйыҡлатыу

❖ Тромб барлыҡҡа килмәһен өсөн ҡанды һарымһаҡ һәм зәйтүн майы ярҙамында шыйыҡлатырға була. Ҙур баш һарымһаҡты ваҡлап, 1 стакан зәйтүн майы ҡойорға. Иртәнсәк ҡара икмәк киҫәгенә һылап, лимон киҫәге ҡушып ашарға. Шунан 15 минут үткәс, иртәнге аш ашарға була. Был рәүешле йыһына бер тапҡыр 1 ай дауамында дауаланырға кәрәк.

❖ 1-әр стакан бал, сөгөлдөр һуты, кишер һуты, лимон һуты, керән төнәтмәһен бергә ҡушырға. Килеп сыҡҡан ҡатышманы көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Әҙерләмә бөткәнсе дауаланырға. Ә керән төнәтмәһен былай әҙерләргә: керәнде ҡырғыстан 1 стакан итеп үткәрергә һәм ярты литр араҡы ҡойорға. Бер тәүлек төнәтергә, оҙағыраҡ та ярай.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ **Шул уҡ ваҡытта Ырымбурҙың мәғариф учреждениеларында барлығы 5 мең самаһы башҡорт балаһының уҡыуын иҫәпкә алһаҡ, бөгөн уларҙың ни бары 5 проценты ғына үҙенең конституцион хоҡуғын тормошҡа ашыра ала.**



## ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

Заманса эштәрҙә яңылыҡ өҫтөнлөк итә бара. Вертикаль буйынса ҡырҡылған өс-мөйөштәрҙән боронғо мозаикаға хас булмаған осло мөйөшлө фигуралар төҙөйҙәр (параллелепипед, трапециялар), улар орнамент төҙөлөшөн үҙгәртә; синтетика туҡымалар ҙа әйберҙәргә яңы төҫтәр, үҙенсәлектәр индерә.





*Урындыҡ юрғаны һәм юрған тышына әҙерләмә (Ҡурған өлкәһе). Е.Е. Никонорова фотоһы. 2001*

Туҡыусылыҡ оҫталығын юғалтҡандан һуң, ҡайһы бер төбәктәрҙә һуғылған балаҫтар биҙәген ҡорамала тергеҙеп ҡараусылар бар. Бер нисә төҫлө туҡыма киҫәктәрен 5-7 сантиметр яҫылыҡтағы таҫма итеп киҫеп, тура дүртмөйөштәр яһайҙар (оҙонлоғо һәм яҫылығы 2:1 нисбәтендә була). Ошо әҙерләмәләрҙән - "кирбестәр" - киртләс ҡыя шаҡмаҡтар төҙөйҙәр. 1983 йылда Башҡортостандың Әбйәлил районында беҙ алты төрлө төҫлө туҡыманан ҡоралған карауат эргәһенә эленгән келәм осраттыҡ. Унда ике бер төрлө ҡыя шаҡмаҡ биҙәк һалынған. Ҡара күк үҙәк тирәләй ҡыя шаҡмаҡ формаһын хасил итеп һары, ҡыҙыл, зәңгәр, асыҡ көрән "кирбестәр" урынлашҡан. Ҡыҙыл тура дүртмөйөштәр рәте ерлек кеүек күренһә лә, ярым ҡыя шаҡмаҡтар (төп фигуралар араһында) һәм кварталар (панно ситендәге сирек биҙәктәр) һыҙатын да билдәләп торған. Ҡыҙылдан ситтә күк, ҡара көрән төҫтәр ҙә күренгән.



*Тура дүртмөйөш ҡорамаларҙан төҙөлгән орнаментлы келәм (РБ, Әбйәлил районы). Автор фотоһы. 1983*

Үҙ сиратында ҡорама ла туҡыусылыҡ эшенә йоғонто яһаған. Ейәнсура районы Ибрай ауылындағы сағыу ҡыя шаҡмаҡ һүрәтле балаҫта өс төҫтән торған осло мөйөшлө ҡыя шаҡмаҡтың һәр һигеҙенсеһенең ерлегендә төҫлө тура мөйөш ятҡан: келәм һигеҙ айырым һуғылған өлөштө ҡушып яһалған кеүек тойолған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

## ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәргә сәфәр ҡылыуы, ундағы милләттәштәребеҙ менән осрашып, уларҙың хәл-әхүәлен белешеүе, йәшәйеше менән танышыуы, проблемаларын асыҡлауы, урындағы етәкселек менән берлектә уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләүе - элек-электән килеп, хәҙер инде изге йолаға әүерелде. Быйылғы ҡатмарлы эпидемиологик хәлгә ҡарамаҫтан, Ҡоролтай был йүнәлештәге эшмәкәрлеген әле лә дауам итә. Быйыл бындай осрашыуҙар Ханты-Манси автономиялы округы-ЮГРА-ла, Свердловск өлкәһендә, Үзбәкстанда үтте. Күптән түгел генә Пермь крайында Башҡортостан мәҙәниәте һәм мәғрифәте көндәре уҙғарылһа, был юлы юлдар Ырымбурға илтте.**

# АВТОНОМИЯ БИШЕГЕ ЛӘ,

## шәхестәр һандалы ла ул - Ырымбур

Ырымбур - башҡорттар һәм республика өсөн ҡасандыр Оло Башҡортостан составында булып, совет сәйәсәте арҡаһында бүленеп ҡалған йәнебеҙҙең бер өлөшө генә түгел, ә Рәсәйҙә иң беренселәрҙән булып дәүләтселек булдырыу, уны танытыу, федерализмға нигеҙ һалыу, йәғни Башҡортостан автономияһын төҙөү бишеге лә, автономияға һәм республикаға биргән бик күп арҙаҡлы шәхестәр һандалы ла ул. Башҡортостан мәҙәниәте һәм мәғрифәте көндәре сиктәрендә ойошторолған "Ырымбур башҡорттарының тарихы, теле һәм мәҙәниәте" темаһына арналған түңәрәк ҡорҙа үҙенең сығышында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова ла был исемдәрҙе лайыҡлы билдәләп, тарихҡа байҡау яһап үтте. Сарала Ҡоролтай Башҡарма комитеты һәм Президиум ағзалары, комиссиялар рәйестәре, төбәктәр ҡоролтайҙары етәкселәре, йәмәғәт ойошмалары, Тарихи-мәҙәни үҙәктәр, киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре ҡатнашты. Башҡортостан етәкселеге исеменән БР Башлығы Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса урынбаҫары Урал Килсенбаев, БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов тәбрикләне.

Ырымбур өлкәһенең вице-губернаторы - Ырымбур өлкәһе Хөкүмәте рәйесенең эске сәйәсәт - төбәк һәм мәғлүмәт сәйәсәте министры Игорь Сухарев оло ҡорға йыйылыусыларҙы сәләмләп, түбәндәге мәғлүмәттәрҙе еткерҙе һәм: "Ырымбур өлкәһендә 46 меңдән ашыу башҡорт йәшәй, бик күп башҡорт милләтле шәхестәрҙең исемдәре беҙҙең өлкә менән тығыҙ бәйләнгән. Тарихта ла башҡорттарҙың ижадсы, булдырыусы, төҙөүсе халыҡ икәнлеге тураһындағы мәғлүмәттәр аҙ түгел. Бөгөн дә улар төрлө тармаҡтарҙа хеҙмәт итә һәм Ырымбур өлкәһенең социаль-иҡтисади үҫешенә лайыҡлы өлөш индерә. Ырымбур башҡорттары үҙҙәренең этниклығын һәм мәҙәниәтен ҡәҙерләп һаҡлай. Өлкәнең иң оло йәмәғәт ойошмаһы булып "Каруанһарай" Ырымбур өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы хәрәкәте тора. Ул үҙенә 13 башҡорт йәмәғәт ойошмаһын берләштерә. Мәғариф системаһында башҡорт этномәҙәни компоненты ҡулланыла. Мәҙәниәт өлкәһендә 60-ҡа яҡын фольклор төркөмө эшләй. Улар башҡорт мәҙәниәтен һаҡлап ҡына ҡалмай, уны үҫтереү буйынса ла ҙур эш алып бара һәм Ырымбурҙың этномәҙәни киңлеген уларҙан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. Ырымбурҙа "Милли ауыл" мәҙәни комплексында урынлашҡан "Башҡорт ихатаһы" ҡунаҡтарҙы башҡорттарға ғына хас ҡунаҡсыллыҡ менән ҡаршылай. Ҡала, өлкә халҡы һәм ҡунаҡтары унда башҡорт халҡының бай тарихи-мәҙәни ҡиммәттәре менән таныша ала", - тине.

Түңәрәк ҡор тарих, мәҙәниәт, мәғариф тармаҡтарына арналһа ла, унда төп темаларҙың береһе булып Ырымбур өлкәһендә башҡорт телен өйрәнеү һәм уҡытыу мәсьәләләре ҡаралды. Эльвира Ринат ҡыҙы килтергән рәсми статистика мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, 2018-2019 йылдарҙа өлкәлә 12 мәктәптә 301 бала башҡорт телен өйрәнһә, быйылғы уҡыу йылында уларҙың һаны кәмеп, 9-ға ҡалған, тимәк, башҡорт телен уҡыған балалар һаны ла кәмегән (249). Шул уҡ ваҡытта Ырымбурҙың мәғариф учреждениеларында барлығы 5 мең самаһы башҡорт балаһының уҡыуын иҫәпкә алһаҡ, бөгөн уларҙың ни бары 5 проценты ғына үҙенең конституцион хоҡуғын тормошҡа ашыра ала. Ошо 9 мәктәптең бер нисәһендә генә уҡыусылар 10-11-се кластарҙа башҡорт телен уҡый, йәғни башҡорт телен өйрәнеү 9-сы синыфҡа тиклем генә алып барыла. Башҡорт телен өйрәнеүселәрҙең кәмеүе шулай уҡ башҡорт ауылдарындағы мәктәптәрҙе оптималләштереүгә лә бәйле. Һөҙөмтәлә уҡыусылар уҡыуҙарын рус телле мәктәптәрҙә дауам итергә мәжбүр. Мәктәптәрҙең ҡушылыуы, үкенескә күрә, милли компоненттың юғалыуы менән хәүефле.



БР мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева үҙенең сығышында шулай тип белдерҙе: "Үкенескә күрә, Ырымбур өлкәһенең элекке Мәғариф министрлығы коллективы менән беҙ аңлаша алманыҡ. Ҡыуандыҡ районында 100 ата-әсә балаһына дөйөм белем биреү системаһында туған башҡорт телен өйрәтеүҙе һорап ғариза яҙыуға ҡарамаҫтан, был эш тормошҡа ашырылманы. Туған телен өйрәнеүсе балалар һаны йылдан-йыл кәмей бара. Әле Һарыҡташ, Ҡыуандыҡ райондары буйлап йөрөү барышында асыҡланыуынса, башҡорт теле һәм әҙәби уҡыу дәрестәренә 1 сәғәт бүленә, йәғни аҙнаһына ярты сәғәт башҡорт теле һәм ярты сәғәт әҙәбиәт уҡытыла. Шулай уҡ дәрестән һуң эшмәкәрлек сиктәрендә 34 бала башҡорт телен өйрәнә, был йүнәлештә эшмәкәрлек йәмәғәт башланғысында Новотроицк ҡалаһында йәкшәмбе мәктәбендә алып барыла".

Шулай итеп, был сәфәр ваҡытында өлкәнең мәғариф системаһында башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу буйынса проблемалар булыуын, ата-әсәләр араһында конституцион һәм законлы хоҡуҡтарын аңлатыу эштәре алып барырға кәрәклеген асыҡланы. Башҡортостан, әлбиттә, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә башҡорт телен уҡытыуҙы һәр йәһәттән хупларға тырыша: уҡыусылар башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадала (әйткәндәй, быйылғы уҡыу йылынан башҡорт теле һәм әҙәбиәте еңеүселәре һәм призерҙарына Башҡортостандың юғары уҡыу йортона ингәндә өҫтәмә мәрәйҙәр бирелә; Яңы Сергиев, Түлгән, Һарыҡташ райондары уҡыусылары төбәк-ара олимпиада призерҙары булыуы ҡыуанныслы), төрлө конкурстарҙа ҡатнаша, уҡыусылар белемен Башҡортостандың инновацион белем биреү учреждениеларында дауам итә (бөгөн Ырымбур өлкәһенән Башҡортостанда 84 бала уҡый), уҡытыусылар өсөн дә бәйгеләр, оҫталыҡ дәрестәре үткәрелә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы специальносы буйынса белеме булмаған уҡытыусылар өсөн курстар ойошторола (былтыр 4 уҡытыусы квалификацияһын алмаштырһа, 2021 йылға 9 ғариза бирелгән), мәғариф учреждениелары башҡорт телен уҡытыу өсөн кәрәкле әсбаптар менән тәьмин ителә (уҡыу йылы башында 1612 дана дәреслек, эш, контроль эш дәфтәрҙәре, уҡыу-уҡытыу методик әсбаптар тапшырылған). Быйыл сентябрь һуңында уҙғарылған Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара форумында Ырымбур өлкәһенең Ҡыҙыл гвардия районының Юлтый ауылы Дауыт Юлтый исемендәге мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ринат Ишбулатовҡа "Халыҡтар дуҫлығы" ордены тапшырылған. Беҙҙең делегация Ырымбур өлкәһенә был юлы ла буш ҡул менән бармаған: Һарыҡташ районының Һунарсы дөйөм белем биреү мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлмәһенә, Ҡыуандыҡ ҡалаһының Пионерҙар һәм уҡыусылар йортонда эшләп килгән "Башҡорт телен өйрәнәм" түңәрәгенә стенд комплекты тапшырылған. 2024 йылға тиклем Рәсәй субъекттарының башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәре барыһы ла шундай стенд-комплекттар менән тәьмин ителәсәк. Бынан тыш, 2021 йылдың йәйендә сикләүҙәр бөтөрөлһә, Рәсәй субъекттары һәм яҡындағы сит илдәрҙә йәшәгән башҡорт балалары өсөн махсус профилле йәйге лагерь ойоштороу планлаштырыла.

Былар барыһы ла - Башҡортостан яғынан күрелгән хәстәрлек. Ә бына Ырымбур өлкәһе вәкилдәре был хаҡта нимә уйлай һәм проблема сығанағын нимәлә күрә икән? Өлкәнең мәғариф министры Алексей Пахомов белдереүенсә, башҡорт телен уҡыған балалар иҫәбенең кәмеүе тәбиғи демографик хәлторошҡа бәйле. " Ырымбур өлкәһе - аграр төбәк һәм халыҡтың күпселеге ауылдарҙа йәшәй. 1000-дән ашыу ауылдың 300-өндә генә 1000-дән ашыуыраҡ кеше йәшәй. Башҡаларында бик аҙ, шуға күрә тотош мәктәптә 20-40 бала уҡыған ауылдар етерлек һәм был беҙҙең өсөн ғәҙәти күренеш. Йәғни мәктәптәрҙең күп өлөшө бик бәләкәй. Ябылған мәктәптәр йәки ябылған филиалдар уҡыусылары ҙур мәктәптәргә уҡырға күсә. Башҡортостанда ла шундай процестар күҙәтелгәнен беләм: ауыл халҡы ҙур ҡасабаларға күсенә, йыл һайын туған тел һәм туған әҙәбиәт предмет булараҡ уҡытылған мәктәптәрҙә уҡыусы балаларҙың 2-3 меңе ауыл еренән ҙур ҡасабалараға күсә. Быны төбәк-ара һәм эске миграция менән аңлатырға мөмкин..." - тине Алексей Александрович.

**(Дауамы 15-се биттә).**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

11

# Ғаиләм-кәлғәм

5-11 декабрь (аҡъюлай)

2020 йыл

№49 (935)

МӘРҘӘСТӘР!

## ЯРЫШАЛАР ҘА...

**Өфөлә "Йәш ғаилә" ҡала конкурсы еңеүселәре иғлан ителде. Орджоникидзе районынан Хәсәновтар ғаиләһе еңеүсе тип танылды. Хәҙер улар конкурстың республика этабында баш ҡала намыҫын яҡларға тейеш.**



Ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, быйыл пандемия шарттарында сараны уҙғарыу концепцияһы яңынан ҡаралды. Конкурс тамашаһыҙ, телетапшырыу төшөрөү форматында үтте. Өфөнөң иң шәп ғаиләһе исемен алыу өсөн ҡатнашыусыларға "Ғаилә стендабы", "Ғаилә ҡиммәттәренә социаль реклама" һәм "Интеллектуаль КВИЗ" һынауҙарында мөмкин тиклем күберәк балл йыйырға кәрәк ине. Бәйге йомғаҡтары буйынса Нурзиә һәм Рөстәм Хәсәновтар, уларҙың балалары Нурсолтан, Сәлимә "иң шәп ғаилә" тип танылды. Ғаилә башлығы Рөстәм нефть университетында уҡыта, ә Нурзиәгә күпмелер ваҡытҡа һөнәрен алмаштырырға тура килгән. Ике йыл элек ул "Башҡортостан" гәзитендә хәбәрсе булып эшләгән, хәҙер иһә һатыу буйынса менеджер. Улдары Нурсолтан музыка мәктәбендә баян класында уҡый, карате һәм шахмат менән шөғөлләнә. Сәлимә һүрәт төшөрөү һәм гимнастика менән мауыға. Ғаилә республика буйлап сәйәхәт итергә ярата, бергәләшеп Шүлгәнташ мәмерйәһенә, Торатауға һәм Мораҙым тарлауығына барып ҡайтҡандар.

ЗАКОН НИ ТИ?

## БАЛАҒА ХӘҮЕФ ЯНАҒАНДА...

**Рәсәй Дәүләт Думаһынан һаулығына һәм ғүмеренә хәүеф янаған осраҡта баланы тартып алыу тәртибе тураһында һәм шулай уҡ ғаилә ҡануниәтен реформалау хаҡында закон проекттары кире ҡайтарылды. "Бында иң мөһиме - ашығырға ярамай, тип иҫәпләйем. Балалар яҡлаулы булһын өсөн барыһын да эшләргә һәм закон нормаларын бөтә яҡлап ҡарарға кәрәк", - тине Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин.**

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: хәҙер һаулығына һәм ғүмеренә хәүеф янаған осраҡта баланы ғаиләнән опека органдары ҡарары буйынса ғына тартып алырға мөмкин. Тәҙәтмәләр суд ҡарары буйынса тартып алыуҙы ҡарай ине. Ғариза менән опека һәм эске эштәр органдары мөрәжәғәт итә ала. Суд уны тәүлек эсендә ҡарарға тейеш. Суд ҡарары булмаһа, баланы ғаиләнән ғәҙәттән тыш хәл осрағында ғына тартып алырға мөмкин.

-Был закон проекты 24 сәғәт дауамында иң ҡыҙыу фекер алышыуға килтергән инициативаларҙың береһе булды. Ата-әсәләрҙән йөҙәрләгән мөрәжәғәт килә һәм беҙ ашығырға ярамағанлығын, бөтә яҡлап уйларға кәрәклеген аңлайбыҙ. Шуға күрә, Дәүләт Думаһында закон проектын яңынан эшләргә ҡарар ителде. Был ҡанун бик етди һәм мөһим, был мәсьәләлә бала хоҡуғы ла яҡланырға, ғаилә лә һаҡланырға тейеш. Мин, үҙемдең бик күп хеҙмәттәштәрем кеүек үк, закон проекты киң йәмәғәтселек фекер алышыуын үтергә, бында ата-әсәләр, опека органдары, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, психологтар үҙ фекерен әйтергә тейеш, тип уйлайым. Шунан һуң ғына закон проекты, бөтә тәҡдимдәрҙе иҫәпкә алып, Дәүләт Думаһына тикшереүгә сығарылырға мөмкин, - тип аңлатма бирҙе Дәүләт Думаһы депутаты Рәмзил Ишһарин.

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ



## БЕСӘЙ, ЭТ, АТ,

### йәғни Бала фекерләргә кемдән өйрәнә?

**Гәзит эшендә таныш булмаған кешеләр менән дә интервьюлар, диалогтар ҡорорға тура килеп ҡуя. Әңгәмәсеңде асып алыу, уның эске донъяһына инеү, ҡарашын белеү, фекерҙәрен өҫкә сығарыу өсөн төрлө алымдар ҡулланаһың. Ир-егеттәргә үҙҙәренә айырым, ҡатын-ҡыҙҙарға икенсе төрлөрәк иғтибар бирәһең, әйҙәүсе, хатта провокацион һорауҙар менән уларҙы "уятып" ебәреү юлдарын эҙләйһең.**

Редакцияға әңгәмәгә килгән шәхес, гәҙәттә, эш тураһында ғына һөйләргә теләй. Әммә уҡыусыға был ғына ҡыҙыҡ түгеллеген белгән беҙ уның икенсе төрлө, йәшерен эстәлеген асырға теләйбеҙ. Күптәр үҙҙәрендә был эстәлек барлығын да белмәй булып сыға. Улар, мәҫәлән, булған хәлдәрҙе мәғлүмәт итеп кенә бирә, ә шул хәлгә үҙ ҡарашын, шул ваҡыт нимәләр уйлағанын, борсолғанын йәки ҡыуанғанын, йәки шул ваҡиға менән риза булмауын хис-тойғо кисереше юҫығында бәйән итә белмәй. Асылда, һин был кешенең бик аҡыллы, уҡымышлы, һөнәрендә профессионал икәне хаҡында хәбәрҙарһың, әммә унан фекер ишетә алмайһың. Һәм, үкенескә ҡаршы, ошондайҙар күп. Улар эмоцияларын йылмайыу аша ғына күрһәтә белә. Һүҙ аша белдереп өйрәнмәгәндәр. Йәғни, фекерләү ҡеүәләре үҫешмәгән. Мейенең был фазаһы, механизмдың бер төймәһе һүндереп ҡуйылған кеүек, тейешле функцияһын үтәүгә эшкә ҡушылмаған. Уйлап ҡараһаң, ул ғүмер буйына ла, был әҙәм үҫеп, уҡып, эшләп, кешеләр менән аралашып йәшәп йөрөгәндә лә, үҙенәнүҙе тоҡанып йәки үҫешеп китмәгән. Тимәк, уның уяна һәм шыта башлай торған мәле була һәм шул мәл тотоп алынмағанда ул мейелә бер үлә өләш булып тора ла ҡала. Һәм донъяға эшләй, үтәй, хатта шәп күрһәткестәр ҙә бирә алған, әммә фекерләй белмәгән роботтар армияһы килә.

Баланың фекерен уятыусы һәм үҫтереүсе иң алыштырғыһыҙ нәмә - ул хайуандар донъяһы. Ҡыҙыҡ өсөн һынап ҡына ҡарағыҙ: бала бәләкәс берәй хайуан күреп ҡалһа, шундуҡ күҙҙәрен түңәрәкләндерә. Кешеләргә ҡарата ундай ҡыҙыҡһыныу юҡ унда, ә бесәй, эт, ҡош йәки һыйыр күрһен әле, иҫе китә. Ике-өс йәшлектәрҙә шундуҡ һорау тыуа: бесәй нимә мыяулай, ул нимә ти, ат ни өсөн үлән ашай, эт ниңә телен сығара һәм башҡалар. Хайуандар менән аралашыу, уларҙы күҙәтеү баланы үҙенән-үҙе һорауҙарға, яуаптарға һәм шул юҫыҡта баш ватыуға, фекерләүгә этәрә. Дөйөм алып әйткәндә, кешегә, тәбиғәттең бер өлөшө булараҡ, шул тәбиғәттең тағы ла бер өлөшө булған хайуандар донъяһына ҡарата ҡыҙыҡһыныу һалынған һәм ул бәләкәстәрҙә айырыуса сағыу, башҡа хистәр менән тоноҡланмаған.

Балаларҙа хайуандарға ҡарата һөйөү тәрбиәләү мотлаҡ. Мәҫәлән, бесәй балаһын баланы әүрәтергә түгел, ә ҡарау, ҡурсалау өсөн алаһың икәнде төшөндөрөү мөһим. Уның ҡарашын, ихтыяждарын, теләктәрен аңларға, үтәргә өйрәтергә кәрәк. Бала тимер машина йәки резина ҡурсаҡ менән уйнағанса, бесәй йә эт менән шаярһын. Мультфильм ҡарағансы, шул уҡ бесәй йә этте күҙәтһен, шуларҙы баҡһын, ҡайғыртһын. Был тере йән балыҡ та, попугай ҙа, гөбөргәйел дә була ала. Әммә бесәй, эт һәм ат кеүек хайуандарҙың балаларға айырыуса йоғонтоло булыуын психологтар иҫбатлаған инде.

Бесәй, эт һәм атҡа ҡарата балаларҙа һөйөү тиҙ ярала һәм оло тойғоға олғаша ла икән. Уйлап ҡараһаң, был хайуандар алдында ололар ҙа теҙ сүгә, шулай бит? Уларҙы яратмағандар һирәктер. Ҡаты холоҡло ирҙәр ҙә эт менән ат тигәндә йөндәрен бирә әле. Шулай булғас, балаларҙың был хислелеге тәбиғи.

Бөгөн аҡыллы уйынсыҡтар күбәйҙе. "Умные игрушки" тигән махсус магазиндар бар. Әммә бер аҡыллы уйынсыҡ та, гаджет та, хатта һүрәтле китаптар ҙа балала бесәй һәм эт уятҡан тойғоларҙы уята алмай, тиелә. Хайуандар менән аралашҡанда сәләмәт психикалы баланың мейеһе яҡшы эшләй, унда төрлө уйҙар тыуа, булмышында ла ыңғай, яҡты эмоциялар тулыша. Бөтөн был эмоциялар солғанышы балала телмәр, фекер, логик уйлау ҡеүәләрен үҫтерә икән.

Ауыл балалары ни өсөн йомшағыраҡ күңелле, хислерәк, тыйнағыраҡ, изгерәк була? Быны күптәр ауыл балаларының аралашыуҙа сиклерәк булыуына бәйләй. Йәнәһе, улар ауылда үҫкән, донъя күрмәгән. Ә донъя белгестәренең фекере икенсерәк. Улар ауыл балалары әлеге бесәй, эт, ат менән аралашып үҫә һәм шулар йоғонтоһонда эске донъяларында дөрөҫ (!) ағым, тәбиғәткә хас, тәбиғәткә яраҡлашҡан ағым барлыҡҡа килә, ти. Ошо өс хайуанға ҡарата булған һөйөү кеше булмышын таҙарта ла, уны тәрәнерәк, байыраҡ, мәғәнәлерәк тә яһауға булышлыҡ итә икән.

Кемдәрҙер быға көлөп кенә ҡарар, әммә мин был фекер менән килештем. Килешмәҫлек тә түгел, кешелектә, эт, ат һәм бесәй әҙәмгә эйәләшкән тәүге кейектәр була һәм иң беренсе йорт хайуандарына әйләнә бит. Был йән эйәләренең беҙгә, беҙҙең уларға ниндәйҙер серле бәйләнешебеҙ бар, тимәк.

Тәбиғәт ул шундай мөғжизәле, йомаҡтарын да, уларҙы сисер серҙәрҙе лә үҙендә туплаған, сирҙәрен дә, дауаларын да белгән, бәрәкәтен дә, язаһын да бирә торған барлыҡ, Аллаһтың кешелеккә биргән бүләге. Уны аңлап, тойоп ҡына йәшәгәндә, уның менән идиллияла булғанда, уның тереклеген ҡабул итә һәм ярата белгәндә ул һинә әллә ниндәй мөғәллимдәр һәм ғалимдар бирә алмаҫ аҡыллы бирәсәк, аңыңды асасаҡ. Шул бөйөк аҡылдың бер бәләкәй генә миҫалы - баланың фекерләү ҡеүәһен уятып ебәреү өсөн уны бесәй, эт, мөмкинлек булғанда ат менән аралаштырыу, йәғни хайуандар донъяһынан сикләмәү.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

## ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА



# ИР-ЕГЕТ ХӨРМӘТЕН... нисек ҡаҙанырғамы?

**Бер үк ирҙең төрлө ҡатын-ҡыҙға төрлөсә мөнәсәбәттә булғаныша иғтибар иткәнегеҙ барҙыр. Мәҫәлән, тайғаҡ урында ул кемгәләр ҡулын бирә, кемеһенәләр - юҡ. Берәүҙе ишек асып индерә, икенсеһенең алдынан тәүҙә үҙе инеп китә. Ни өсөн шулай икәнен уйлап ҡарағаныһыҙ бармы?**

Бының сәбәбе шунда: ҡатын-ҡыҙ үҙенә ниндәй мөнәсәбәттә - ирҙәр ҙә уларға шундай мөғәмәләлә була. Гүзәл зат үҙен хөрмәт итһә, көслө зат та уны ихтирам итә. Бына һеҙ алдығыҙҙан үтеп, ишектән үҙе тәүҙә ингән ирҙең ҡылығына ризаһыҙлыҡ белдерәһегеҙме? Юҡ, шулай бит. Уны шунда уҡ ғәфү итәбеҙ, онотабыҙ, йә булмаһа, аҡлайбыҙ. Ә бынан ир кеше ниндәй һығымта яһай, тип уйлайһығыҙ? Был ҡатын алдында артыҡ тартынып тормаҫҡа ла мөмкин, ул барыбер түҙәсәк, бер ҡайҙа ла китмәйәсәк, тигән фекергә килә.

Ғәҙәттә ҡатын-ҡыҙ: "Нинә ул минең менән тупаҫ ҡылана? Уның өсөн мин бөтәһенә лә әҙермен, күпме яҡшылыҡ эшләйем, ғәфү итәм, ә ул минең ҡәҙеремде белмәй, хөрмәт итмәй", - тип ҡайғыра.

Нимә өсөн хөрмәт итә һуң ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙы?

Эскерһеҙ һәм ихлас күңел йылыһын, һөйөүен бүләк иткәне өсөн. Йыш ҡына гүзәл зат матур мөнәсәбәте, башҡарған эше өсөн ир кешенән рәхмәт һүҙе көтә. Мәҫәлән, "Мин һиңә яратҡан салатыңды әҙерләнем, ә һин бер нәмә лә әйтмәнең", ти. Бындай мөғәмәләнән, йәғни ҡатынына сикһеҙ "рәхмәтле" булып йөрөүҙән ир кеше тиҙ арый. Ул да бит тик ултырмай, һөйөклөһө өсөн барыһын да эшләй. Рәхмәт ишетмәһә лә, бәхәс-ғауға ҡуптармай. Кемгәлер бурыслы булып йөрөргә бер кем дә теләмәй. Ниндәй генә бурыс булмаһын, ул кешене артҡа һөйрәй, шуға ла ул унан тиҙерәк ҡотолорға теләй. Ҡатынына һәр ваҡыт бурыслы булып йөрөгән ир ҙә унан китеү яғын ҡарай.

Шулай уҡ ирҙе хөрмәтләгән, уның эшен күрә белгән, бергә ғорурланған ҡатын-ҡыҙҙы ирҙәр ихтирам итә.

Гүзәл заттың үҙ баһаһын белеүен, яратҡан шөғөлө булыуын, ниндәйҙер социаль статусҡа йәки матди байлыҡҡа өлгәшер өсөн генә уның менән бергә булмауын да ихтирам итә.

Быларҙан тыш, үҙенә зыян итмәй генә ирҙә иғтибар бүлгәне, ярҙам итергә әҙер булғаны йәки проблемаһын һөйләгәндә тыңлай белгәне, әммә бер ҡасан да үҙе алдында тулыһынса "иреп китмәгәне", һөйөүен яулар өсөн ирҙең һәр талабын үтәргә әҙер булмағаны өсөн хөрмәт итә.

Был аҡылдарҙы ҡолағығыҙға киртеп ҡуйығыҙ, хөрмәтле гүзәл заттар. Үҙ фекерегеҙҙе яҙа, бәхәсләшә лә алаһығыҙ.

---

**Донъяла минут эсендә генә күпме ваҡиға була, бер сәғәт эсендә әллә күпме яңы күренештәр барлыҡҡа килә, кешеләр тыуа, кешеләр үлә, яңы асыштар яһала һәм уларҙың иң шаулылары мәғлүмәт селтәрҙәренең беренсе битенән төшмәй. Шул уҡ ваҡытта донъяла үҙ бәхеттәренә төрөнөп, уны сит-ят күҙҙәрҙән һаҡлап, ғаилә институтының иң яҡшы ҡиммәттәрен үҙҙәрендә туплап, шым ғына ғүмер йомғағын һүтеүселәр ҙә юҡ түгел. Бер уйлаһаң, уларҙы республикала күптәр белә, сөнки Роза Рәжәп ҡыҙы - Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институтының башҡорт һәм башҡа туған телдәр һәм әҙәбиәт кафедраһының өлкән методисы булып эшләй, Илдар иһә - "Башҡортостан" гәзитенең мәғариф бүлеге мөдире. Шул уҡ ваҡытта уларҙың бәхете һаман да икәү генә белер сымылдыҡ эсендә ҡала килә, унда сит-ят күҙҙәргә, яман һүҙҙәргә юл ябыҡ, сөнки бәхет тынлыҡты ярата. Ә беҙ, АҠЪЮЛОВтар ғаиләһенең рөхсәте менән сымылдыҡтың бер ситен генә күтәреп, шул бәхеттең бер өлөшөнә саҡ ҡына күҙ һалырға йөрьәт иттек.**

# БӘХЕТ ТЫНЛЫҠТЫ

**▸ Һеҙҙең ғаилә ҡороуға ла сирек быуат үтеп киткән. Ул йылдарҙа йәш Илдар менән йәш Роза ниндәйерәк булды, ниндәй хыялдар менән йәшәне икән?**

**Илдар:** Кем армияла булған - тормошто, кем студент булған - йәшлекте күргән, тиҙәр. Ил алдындағы бурысты үтәп ҡайтҡас, Башҡорт дәүләт университетына уҡырға индем. Дипломлы белгес булыу, эшкә урынлашыу һәр кемдә була торған хыялдыр инде ул. III курсты уңышлы тамамлағас, ул саҡта факультеттың башҡорт бүлегендә уҡыған Роза исемле сибәр ҡыҙға өйләнергә ҡарарға иттем. 26 йыл элек нисек булдыҡмы? Артыҡ ышаныусан, бөтә ергә лә өлгөрөргә тырышыусан.

**Роза:** Тиҙҙән юғары уҡыу йортон тамамлаясаҡбыҙ, беҙҙе яҡшы эш көтә, матур итеп ғаилә ҡороп, балалар үҫтерербеҙ, тигән хыял менән йәшәгәнбеҙҙер инде ул осорҙа.

**▸ Ғаилә - ябай ғына итеп әйткәндә, ике сит ғаиләлә үҫкән кешеләрҙең бер ҡыйыҡ аҫтында, үҙенең усағын тоҡандырып йәшәүе. Әлбиттә, аңлашмаусылыҡтар ҙа килеп сығыуы бар, характер төрлөлөгө лә үҙен һиҙҙертеүе мөмкин. Һеҙҙең ғаиләлә кем - ут, кем - һыу, кем - баш, кем - түш?**

**Илдар:** Ысынлап та, икебеҙ ике, бер-беренән ныҡ айырылған мөхиттән. Розаның тыуған төйәге - Баймаҡ районына, ул тыуып үҫкән Сыңғыҙ ауылына беренсе тапҡыр аяҡ баҫҡанда уҡ был яҡ кешеләренең ихласлығы, ҡунаҡсыллығы күҙгә ташланды, бик тә оҡшаны. Башҡорт халҡының йолалары ныҡлыраҡ һаҡланғанына иғтибар иттем. Ә мин Ейәнсура районының Үрген ауылынан, был яҡ халҡы ла ихлас, әммә беҙҙә кешеләр эшкә күберәк күмелгән һымаҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бер бөтөн булырға тырышҡанбыҙҙыр инде.

Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ ут уҡ булмаһа ла, усаҡтағы утты һүндермәй һаҡлап тороусы, башты кәрәк яҡҡа бороусы муйын булмаһа, был донъяларҙа йәшәүе күпкә ауыр булыр ине. Ғөмүмән, бер-берең менән кәңәшләшеп эш итеүгә бер нәмә лә етмәй!

**Роза:** Ысын ғаилә булып ойошоп китеүе ауыр ҙа, ҡатмарлы ла һынау үтеү ул. Сөнки, ысынлап та, һәр ғаиләлә кеше үҙенсә тәрбиә ала, һәр ғаиләнен үҙ тормош ҡанундары була. Шуға күрә, ике йәш йөрәк ҡауышҡас та, һәр ҡайһыһы үҙе баш, үҙе түш булдыниһә, ғаилә булып ойоша алмай. Беҙ һәр ваҡытта ла бер-беребеҙҙе аңларға тырыштыҡ. Тәүҙә, әлбиттә, аңлашмаусылыҡтар, кем баш булыр икән, тигән һымағыраҡ хәлдәр ҙә булып алғандыр, әммә йәшәй-йәшәй төрлө ысулдарҙы эҙләйһең, ҡайһылай яҡшыраҡ булыр икәнен ҡарайһың, бер-береңә юл да бирәһең, һүҙен дә алға сығараһың. Психологтар ҙа хатта никахтың 1,3,7-се йылдарында көрсөк мәлдәре булып тора, тип фаразлай, йәғни ошо осорҙар ғаиләне ныҡлыҡҡа һынай. Бөгөнгө күҙлектән ҡарап, беҙ ундай стадияларҙы үттек, тип уйламайым, бәлки, булғандыр, әммә беҙ уны уртаҡ тел табып, енел үткәргәнбеҙҙер, мөғайын, шуға һиҙмәгәнбеҙҙер ҙә. Ә бына 10 йылдан һуң, килеп тыуған проблемаларҙы нисек хәл итербеҙ икән, тигән һорауҙар йышайҙы, сөнки ғаилә лә ҙурая, ауырлыҡтар ҙа тыуа. Әлбиттә, беҙҙең ғаиләлә Илдар - ут, мин - һыу. Ул баш булһа, мин үҙемде муйын тип әйтер инем, муйын бит башты ҡайҙа теләй, шунда бора ала.

**▸ Һауыт-һаба ла шылтырамай тормайҙыр, килеп тыуған проблемаларҙы нисек хәл итергә тырышаһығыҙ?**

**Илдар:** Ғаилә советында мәсьәләне уртаға һалып һөйләшәбеҙ.

**Роза:** Әлбиттә, тормош булғас, ул бер алдын, бер артын күрһәтә инде, ғаиләлә лә һауыт-һаба шылтырамай тормай. Социаль селтәрҙәрҙәге, инстаграмдағы сторизҙарҙа ғына барыһы ла һәйбәт ул. Ә тормош - ул ысынбарлыҡ. Шуға ғаилә усағынан ситкә сәсрәгән бәләкәй генә осҡондан ҙур ялҡын ҡабыҙмай, уны шунда уҡ туҡтатып тороу мөһим. Бының өсөн, әлбиттә, бер-берендә ихтирам итеү тәүгә урынға сыға, шул ваҡытта ғына хаталарҙы һәм проблемаларҙы уртаға һалып һөйләшеп, уларҙан бергәләп сығыу юлдарын табырға мөмкин.

Туйҙан һуң күрше-тирә апай-еңгәйҙәр, оло инәйҙәр "Барған ерен таш булып бат", тип оҙатты, шуға күрә ике ауыҙлы - бер һүҙле булып йәшәргә тырыштыҡ. Дөрөсөн әйтергә кәрәк, ғаиләләрҙә ауыр проблемалар булмай тормай, әммә, әйтеп үтеүемсә, бер-берендә ихтирам итеп, аңлап йәшәһәң генә ул ауырлыҡтар һиҙһдырмай, уларҙы еңел үтәһең.



**▸ Ҡыҙҙар үҙҙәре әсәй булмайынса - әсә хәлен, егеттәр атай булмайынса атай хәлен аңламай, тиҙәр. Тәүге мөхәббәт емешегеҙ тыуыуы донъяға ҡарашығыҙҙы, ата-әсәләрегеҙгә, бер-берегеҙгә мөнәсәбәтте үҙгәрттеме?**

**Илдар:** Бала - ир менән ҡатын араһындағы күпер, быны инҡар итеүселәр юҡтыр. Бәпестең тыуыуы өйгә бәрәкәт өҫтәү менән бер рәттән, ике араларғы союзды тик нығыта ғына. Быны әлеге лә баяғы ваҡыт үтеү менән тәрәнерәк аңлайым. Тикҡә генә мөхәббәт емеше тигән ныҡын-

✓ *Мин, ғөмүмән, 20 йылдан ашыу ҡәйнәһен ҡараған әсәй менән үҫкән кешемен. Атайым да үҙ ҡәйнәһенә шул тиклем ихтирам менән йәшәне, өләсәй 90 йәшкә етеп, һәр саҡ, кейәүем шәп, кейәүем яҡшы, тип маҡтап йәшәне.*

# ЯРАТА

ған һүҙбәйләнеш килеп сыҡмағандыр.

**Роза:** Был ысынлап та шулай тиер инем. Ысынлап та, ғаиләлә тәүге мөхәббәт емешенең донъяға килеүе тормошҡа икенсе төрлө - атай-әсәй итеп ҡарарға мәжбүр итә. Тәүге балабыҙ - Зөһрә ҡыҙыбыҙ 4-се курста уҡығанда тыуҙы. Башҡорт дәүләт университетының 1-се ятағында йәшәгәндә ниндәй күршеләребеҙ бар, ул шуларҙың барыһының да ҡулында үҫте, тиергә мөмкин. Лекцияға барырға булһа, бүлмәләр буйлап йүгереп йөрөп баланы ҡалдырыр кеше эҙләй торғайныҡ. Күршелә йәшәгән 1-се курс студенттарының "Апай, бының ҡайһы еренән тотайыҡ", тип баламды алып ҡалғаны һаман да иҫемдә. Күрәһең, ул ваҡытта Зөһрәгә бер нисә ай ғына булғандыр. Шуға студент ғаиләһе булып бала үҫтереүҙең бөтә михнәтен дә, рәхәтен дә татыныҡ, тип әйтергә мөмкин.

Әлбиттә, бала тыуыу ғаиләләге мөнәсәбәтте үҙгәртмәй, әммә атай-әсәй булыуы ҙур яуаплылыҡ өҫтәй һәм артабан яҡшыраҡ йәшәргә саҡырыу кеүек. Университет уҡытыусылары ғаиләлеләрҙе белеп тора һәм дәрескә барһаң, әсәй кеше нимә эшләп ултыра ул бында, бар ҡайт, баланды ҡара, тип әйтә торғайны. Бәлки, уҡыуҙа быға тиклем өлгәшенгән уңыштар һөҙөмтәһендә шундай ташлама яһағандарҙыр. Шуға күрә атай-әсәй булыуы беҙгә ниндәйҙер дәрәжә һәм яуаплылыҡ өҫтәгәндер, тип уйлайым.

**Бер һөйгәнем арҡаһында ҡырҡ һөймәгәнде һөйөрмөн, тигән әйтем бар. Быны бигерәк тә бөгөн бик актуаль тиергә мөмкин - ҡыҙ-егеттәр бер-береһен яратһалар ҙа, бер-береһенең ата-әсәләрен яратмайҙар. Һеҙ ҡайны-ҡәйнәгеҙҙе нисек ҡабул иттегеҙ?**

**Илдар:** Рәжәп Зөлҡәрнәй улы менән, минең ҡайным була инде, уртаҡ телде тиҙ таптыҡ. Уның ҡайҙалыр барырға, нимәнелер эшләргә йәки тамаҡ ялғап алырға кәрәк булһа: "Әйҙә, кейәү", - тип әйткәне кисәгеләй генә. Бер ҡасан да тауышын күтәрмәне, ипле ине. Ашыҡ-бошоҡ түгел, киреһенсә, һәр эште тыныс һәм яй, әммә сифатлы башҡарҙы. Ул оҙаҡ йылдар Ленин исемендәге колхозда механизатор булды. Ҡәйнәм Ғәлиә Ғилметдин ҡыҙы иһә янып-көйөп йөрөнө. "Йылдай оҙон тойолһа ла, йәй үтер ҙә китер, утын килтерергә кәрәк, ҡар яумаҫ элек кәбәнде алып ҡайтырға кәрәк", - тип, мәшәҡәттәрҙе алдан хәстәрләне. Мин яратҡан кешене, минең буласаҡ балаларымдың әсәһен донъяға килтергән, тәрбиәләгән ата-әсәне яратмау йәки яратмаҫҡа тырышыу мөмкин булыуы тураһында уй башыма ла инеп сыҡманы.

**Роза:** Мин, ғөмүмән, 20 йылдан ашыу ҡәйнәһен ҡараған әсәй менән үҫкән кешемен. Атайым да үҙ ҡәйнәһенә шул тиклем ихтирам менән йәшәне, өләсәй 90 йәшкә етеп, һәр саҡ, кейәүем шәп, кейәүем яҡшы, тип маҡтап йәшәне. Шуға күрә беҙҙең ғаиләлә ҡәйнә-ҡайныға ихтирам бәләкәйҙән тәрбиәләнгән ине, тип әйтә алам. Илдар менән ғаилә ҡорғас та бейемемә үҙемдең әсәйемә ҡараған һымаҡ ихтирам һәм һөйөү менән ҡарарға тырыштым. Әммә бейемем ҡыҫҡа ғүмерле булды, беҙ өйләнешкәндән һуң ике йыл үткәс, ҡаты сир уны беҙҙән алып китте. Шуға ла бейемемә килен хөрмәте күрһәтеп өлгөрҙөммө икән, тигән уй ҙа тыуа. Ҡайным шундай уҡ егәрле, уңған, эшлекле кеше ине. Уға ла үҙ атайыма ҡараған кеүек ҡарарға тырыштым.

**Малай тыуһа - һин атай, ә ҡыҙ тыуһа - атаҡай, тиҙәр. Һеҙҙең ғаиләлә өс ҡыҙ үҫә, был, ғәмәлдә шулаймы, ҡыҙҙар, ысынлап та, атайға яҡыныраҡмы?**

**Илдар:** Ҡыҙҙарым өсөн нисек өҙөлөп торам, уларҙың да мине йәндәй күреүҙәрен тоям. Мин, киреһенсә, өсөһөн дә, "ҡыҙҙар әсәләренә әхирәт булырға тейеш", тип өйрәтәм. "Серҙәш булығыҙ", тип тә өҫтәйем. Роза әйтеп үтеүенсә, оло ҡыҙыбыҙ Зөһрә - тыуғанда уҡ студент тормошон күреп үҫкән бала. Башҡорт дәүләт университетының роман-герман факультетын тамамланы. Студенттарҙы алмашыу программаһы нигеҙендә Ҡытайҙа уҡыны, бер нисә йыл эшләне. Быйыл каникулға Башҡортостанға ҡайтҡайны, тотош донъялағы хәл-торош менән бәйле ул яҡтарға һауа юлдары ябылды. Әле Өфөлә, инглиз теле уҡытыусыһы.

Икенсе ҡыҙыбыҙ Шәүрә Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының шәрҡиәт бүлегендә уҡый, апаһы кеүек сит телдәр өйрәнә. Бәләкәйҙән бейергә ятты. Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия бейеү ансамбленең балалар студияһында шөғөлләнде, Рәми Ғарипов исемендәге Республика Башҡорт гимназия-интернатын тамамланы һәм шунда "Аҡйондоҙ" ансамблендә бейене. Хәҙер БДУ-ның "Ирәндек" ансамблендә бейей. Иң бәләкәйебеҙ Фатима быйыл Фатима Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһының I класына барҙы. "Мин уҡыған мәктәптең дә исеме Фатима" тип көлә.

**Роза:** Беҙҙең ғаиләлә атайға ихтирам шул тиклем ҙур, атай абруйы ныҡ көслө булды. Ҡыҙҙар атайыбыҙҙы шул тиклем ныҡ яраттыҡ, хатта үҙебеҙҙең буласаҡ тормош иптәшебеҙҙе атайыбыҙ һымаҡ холоҡло булһын ине, тигән хыялдар менән йәшәнек. Юҡҡа ғына, ҡыҙҙар - атаһына, егеттәр әсәһенә оҡшатып тормош юлдашы эҙләй, тимәйҙәрҙер инде. Әлбиттә, өс ҡыҙ атаһы булараҡ Илдар, ысынлап та, атаҡай булып йөрөй тип уйлайым, сөнки ҡыҙҙар аталарын шул тиклем ярата, бигерәк тә бәләкәсебеҙ унан башҡа бер минут тора алмай. Ҡыҙ атайҙары булыу, минә ҡалһа, оло бәхеттер ул. Юҡҡа ғына, өс ҡыҙ атаһы ожмахҡа сиратһыҙ инә, тимәйҙәр бит.

**Ҡыҙ баланы ҡырҡ ерҙән тыйыу кәрәк, тип үҫтерҙеләр беҙҙең заманда. Хәҙер ҡыҙҙарҙы нисек тәрбиәләйҙәр? Малайҙар өсөн атай абруйы, атай һүҙе - ҡанун, ҡыҙҙар өсөн дә атай абруйы мөһимме?**

**Илдар:** Ғөмүмән, бала өйөндә барыһын да күреп үҫә, күңеленә һеңдереп буй еткерә. Шул үҙеңдең өлгөндә бала тәрбиәләнә инде, шул иҫәптән, ҡыҙҙар ҙа. Ҡыҙҙарыбыҙҙы тәрбиәләүҙә өләсәй һәм ҡартатайҙарының роле ҙур булды тип уйлайым. Баланың балаһы балдан татлы, тип, ауылда балаларҙы йәйгелеккә каникулға күтәреп ала торғайнылар. Өләсәй һәм ҡартатай тәрбиәһе алып үҫкәнгә балаларыбыҙ үҙ юлдарын тиҙерәк табалыр, бәлки, яңылышыуҙар булмаҫ, тип өмөтләнәбеҙ. Ауылда улар өләсәйҙең ҡартатайға мөнәсәбәтен, өйҙә әсәйҙең атайға мөнәсәбәтен күреп, белеп, һеңдереп йөрөй. Тәү сиратта атай абруйы ғаиләләге мөнәсәбәттән башлана һәм был балалар өсөн бик мөһим.

**Роза:** Беҙ ныҡ тыйылып үҫкән быуын. Ҡырҡ урындан ғына түгел, бөтөн нәмәнән тыйып, сикләп үҫтерҙеләр. Хәҙер заман башҡа - заң башҡа, ундай тыйыуҙар бик ҡулланылмай ҙа, әммә барыбер ғаилә тәрбиәһе үҙ эҙен һала, шуға ла ҡыҙҙарыбыҙ үҙ урындарын белә, яҡшы менән яманды айыра, төрлө сараларға ла йөрөйҙәр, дуҫлашалар, әммә саманан, сиктән сыҡмайҙар. Ҡыҙҙарыбыҙға үҙаллылыҡ бирәбеҙ, әлбиттә, әммә бәләкәй саҡтарынан уҡ проблемаларын дөрөҫ хәл итергә ҡушҡанбыҙ. Шуға, ул-был хәл килеп тыуһа, атай-әсәй менән кәңәшләшеп эшләйҙәр. Беҙҙең ғаиләлә шундай ҡанун йәшәй: ҡыҙҙар үҙҙәренә кәрәкле бөтөн нәмәне белергә, замандан артта ҡалмаҫҡа тейеш, шуға артыҡ сикләргә тырышмайбыҙ. Атайҙың урыны түрҙә булмаған, атай абруйы һаҡланмаған ғаиләләр ысын мәғәнәһендә аҡыллы, тәүфиҡле бала тәрбиәләй алмайҙыр, тип уйлайым. Атайың нимә әйтер, тигән һүҙ беҙҙең өсөн мөһим роль уйнаны. Борондан килгән был хәҡиҡәт бөгөн дә бик актуаль булып ҡала. Атай абруйы малайҙарға ғына түгел, ҡыҙҙарға ла кәрәк, сөнки төпкө аңға нигеҙләнеп, тормош юлдашын һайлағанда ҡыҙҙар барыбер ҙә атайҙарына оҡшаған кешене эҙләй һәм тап шундай ғаиләләр бәхетле булаларҙыр ҙа.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Был ғаилә ағзалары менән аралашыуҙан шуны аңланым: ысынлап та, бәхет тынлыҡты ярата икән, шулай булмаһа, ығы-зығы, шау-шыу араһында улар бер-береһенең уйын уҡый, күңелдәрендәге һүҙҙәрен ишетә алыр инеме ни?..**

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әңгәмәләште.**

АФАРИН!



# ҠОМАРТҠЫЛАР ТЕРГЕҘЕЛӘ

**Баймаҡ муниципаль Үҙәк китапханаһы ҡырҡ өс китапхананы берләштерә һәм республикала иң ҙурҙарҙан иҫәпләнә. Үҙәктең эшмәкәрлеге лә күп һәм төрлө яҡлы. Шундай бер фәһемле эштәренә улар күптән түгел йомғаҡ яһаны.**

2019 йылда, Башҡортостан Республикаһы автономияһының 100 йыллығы айҡанлы, китапхана "Минең ғаилә ҡомартҡыларында ил тарихы" тигән акция иғлан иткәйне. Был акцияла ғаилә альбомдарында төрлө заман фотоларын һаҡлаған, һандыҡ төптәрендә боронғо китаптар, яҙмалар, фронт хаттары ятҡан, миҙалдар, тәңкәләр һәм башҡа ҡомартҡыларын юғалтмаған кешеләр ҡатнашты. Баймаҡ ҡалаһы һәм райондың егерме ике ауылы ихлас ҡушылды акцияға. Йыл ағымында ҡомартҡылары менән бүлешергә теләүселәр һәм йәш быуын менән осрашыуҙар үткәрелеп торҙо, күргәҙмәләр ойошторолдо.

Был акцияны 2019 йылда Баймаҡ Үҙәк китапханаһы "Ғаилә реликвияһы" Милли премияһына ла тәҡдим итте. Саралар араһында "Бер фото тарихы" тигән акция бигерәк тә әһәмиәтле булғайны. Бер ғаиләнең фотоларынан башланған мозаика яйлап бөтә ил тарихына әүерелеп китә. Фотоларҙағы кешеләр күптән юҡ, хатта ул тарихи мәлдәрҙең дә тере шаһиттары ҡалмаған, тигәндәй. Улар хаҡындағы иҫтәлектәр һүрәттәрҙә, аудио-видео яҙмаларҙа, китаптарҙа һәм беҙҙең хәтерҙә генә. Китапхана хеҙмәткәрҙәре һәр фотоны өйрәнеп һәм тарихын яҙып алып, теркәп, уларға бәйле хәл-ваҡиғаларҙы тергеҙеп, оло абруйлы хеҙмәт башҡарҙы. Баймаҡ халҡына ла ҡыҙыҡ булды акция, һәр кем фотоларҙа кемделер таныны һәм яуаптар яҙҙы. "Библиотөн" акцияһында әлеге һүрәттәр интернет киңлектәренә лә сығарылғайны. Йәштәр ололарҙа һаҡланған хәтирәле фотоларҙы күрһәтеүгә ҡуйҙы, әллә күпме халыҡта тулҡынландырғыс иҫтәлектәр, үткән ваҡиғалар кисереше яңынан яралды.

Бына шундай акция Милли премия бәйгеһендә ҡатнашып, "Ғаиләнең рухи ҡиммәттәренә йәмғиәт ярҙамы" ("Общественная поддержка семейным духовным ценностям") номинацияһында лауреат булды. Башҡортостандан булған ике еңеүсенең икеһе лә Баймаҡ районынан булыуы икеләтә ҡыуаныс тыуҙырҙы. Береһе Зилә Мортазина етәкләгән Үҙәк китапхана селтәре булһа, икенсеһе "Ваҡыт һаҡсыһы" номинацияһын яулаған Айҙар Мәжитов. Быйыл иһә Милли премияла Рәсәйҙең 78 төбәге ҡатнашты һәм шулар араһында баймаҡтарҙың айырым урын биләүе ҙур мәртәбә, әлбиттә.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**

ҺАНДАР НИ҆ ҺӨЙЛӘЙ?

# НИСӘ ЙӘШТӘ ӨЙЛӘНӘЛӘР?

**Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда беренсе тапҡыр өйләнешкәндәрҙең уртаса йәше һиҙелерлек артҡан**

Башстат мәғлүмәтенә ярашлы, хәҙер беренсе рәсми никахҡа ир-егеттәр - 28,7, ҡатын-ҡыҙҙар 26,4 йәштә инә. Быға тиклем оҙаҡ йылдар дауамында был күрһәткес көслө зат өсөн 25-тән, гүзәл зат өсөн 23 йәштән артмай торғайны.

2019 йылда 30 йәшкә тиклемге 14559 ир-егет һәм 16285 ҡатын-ҡыҙ никахлашҡан. Статистиктар билдәләүенсә, һөнәри белем алыу, иҡтисади үҙаллылыҡтың булмауы, ҡатын-ҡыҙҙарҙың декрет ялына киткәнсе тейешле эш тәжрибәһенә эйә булырға ынтылыуы һуң өйләнешеүҙең төп сәбәптәре булып тора. Бынан тыш, йәмғиәт никахты теркәмәй йәшәүгә түҙемле ҡараштa.

Республикала атай-әсәй булыу процесы ла "өлкәнәйә" бара. Хәҙер беренсе баланы - 26-ла, икенсене 30 йәш тирәһендә, өсөнсөнө башлыса "йәштәр" йәшенән өлкәнерәктәр таба.

Былтыр Башҡортостанда 41767 сабый донъяға килгән. Балиғ йәшкә етмәгәндәрҙән - 260, 18-19 йәшлектәрҙән - 937, 20-24 йәшлектәрҙән - 4269, 25-30 йәшлектәрҙән 15963 бала тыуған. Йәштәр араһында никахтан тыш тыуған балалар һаны 7,1 процент тәшкил итә.

ШАҢДАУ

**Гәзитебеҙҙең 45-се һанындағы "Әсе хәҡиҡәт" рубрикаһында Әлиә Исмәғилеваның "Башҡорт байыһа... бисә аламы?" тип аталған бик ҡыҙыҡлы мәҡәләһе баҫылып сыҡты. Тормошта һәүетемсә уңышҡа өлгәшкән, нығынып, аяҡтарына ышаныслы баҫҡан бәғзе бер ир-атта, йәштән алған хәләл ефете менән берлектә йә уның ярҙамы менән донъяһын "күтәреп", әҙәм рәтенә сыҡһа ла, ҡатын алмаштырыу, яңыртыу психологияһы йәшәүе хаҡында фәлсәфә ҡора Әлиә һылыу. Авторыбыҙҙың ифрат оҫта, уҡыусының "елегенә үтеп инерлек" итеп сағылдырған был фекерен бик күптәрҙең, айырыуса гүзәл зат вәкилдәренең хуп күреүендә шигем юҡ. Ошо хаҡта мин дә бер килке һүҙемде әйтмәк булдым.**

# "БАШҠОРТ БАЙЫҺА... бисә аламы?"



***Гәзиттәге мәҡәлә эсендә килтерелгән боронғо фотоһүрәткә, моғайын, күптәр иғтибар иткәндер.*** Үҙем ир-ат вәкиле булараҡ, был мәсьәләгә бер аҙ икенсе яҡтан, башлыса, ана шул фотола төшкән ғаилә башлығы, уның хәләл ефеттәре күҙлегенән сығып ҡарамаҡ булдым әле шулай ҙа. Үҙ урынын яҡшы белгән, өҫтөнә затлы елән, башына ҡама бүрек кейгән, ҙур ғына дәрәжәле ҡырҡ биш-илле йәштәр самаһындағы һаҡалтай ирҙең уң яғында ҡараштарын бер аҙ аҫҡа йәшереп ултырған бер тиҫтер ике һылыу ҡатынға, уларҙың балаларына ҡарап, мосолман динен тотҡан боронғо тап-таҙа башҡорт ғаиләһе был, тип фаразларға була. Ғаиләнең тормошо һис кенә лә зарланырлыҡ булмағанға оҡшаған. Йорт хужаһының түшендә йылтырап торған түңәрәк миҙалды хәҙерге һымаҡ берәй сувенир, биҙәү әйбере тип түгел, ә батша тарафынан бирелгән берәй старшина тамғаһы тип ҡарау кәрәк. Ҡатындарының, ҡыҙҙарының кейем-һалымына иғтибар итәйек: шыр көмөш тәңкәнән торған (әлбиттә, ҡалайҙан түгел) түшелдерекле күлдәктәрен, баштарындағы биҙәктәрен, яулыҡтарын күреп, күптәр көнләшерлек бит! Малайҙар ҙа яҡшы кейенгән. Тирмә эсендәге йыһаздар ҙа бында байҙар йәшәгәне хаҡында һөйләй. Аҡыллы, ышаныслы ҡарашлы ир менән йәнәш ултырған ике ҡатындың ошондай тормош менән ифрат та ҡәнәғәт булып ғүмер иткәнлеген уларҙың йөҙҙәренән уҡырға була... Малайҙар, ҡыҙҙар, моғайын, уларҙың береһен "һур әсәй" ("ҙур" һүҙен беҙҙә оло кешеләр ана шулай тип әйтә торғайны), икенсеһен "бәләкәй әсәй" тип тә атағандыр. Был ике гүзәлдең олораҡы өйҙә хужалыҡты алып барһа, кесерәге балалар тәрбиәләү менән мәшғүл булғандыр. Ирҙең ихтирамын, һөйөүен яулап алыр өсөн, береһенән-береһе уҙҙырырға тырышып, ашарға ла алмашлап бешергәндәрҙер. Имам булып баҫҡан ир артында икәүләшеп намаҙға ла торғандарҙыр. Байҙың ишле мал-тыуарын ҡараусы хеҙмәтселәре лә булғандыр, әлбиттә. Хужаға "бай ағай", ә ҡатындарына "байбисә апай" тип кенә мөрәжәғәт иткәндәрҙер. Балалары ла дүртәү генә түгел, ә күпкә күберәк булыуына иманым камил. Олораҡтары, моғайын, башлы-күҙле булып, башҡа торaларҙыр. Хужалыҡта, әлбиттә, бер генә йорт түгел, ә һәр ҡатындың үҙенең өйө, һис юғында, айырым бүлмәһе, ә йәйләүҙә - айырым тирмәһе барҙыр... Хужа уларҙың икеһен дә тигеҙ ҡарағандыр. Көндөҙ уларға "әсәһе" тип өндәшһә, бер кис береһен, киләһе кис - икенсеһен "бәғрем", "гөләм", "сәскәм", "аҡҡошом" тип иркәләгәндер. Икеһенә лә "сер генә" итеп: "Йәнем, мин тик һине генә яратам", - тигән һүҙҙәрен дә йәлләмәгәндер (ғаилә татыулығын, именлеген һаҡлау маҡсаты менән үҙендең хәләл ефетеңә арттырыбыраҡ булһа ла ана шундай комплименттар әйтеү шәриғәттә рөхсәт ителә)... Ҡатындар ҙа, әлбиттә, уның был һүҙҙәрен башҡаларҙан йәшереп, йөрәк түрендә һаҡлағандыр, "тик уны ғына яратҡан", үҙенең таянысы тип һанаған ошо көслө затҡа Хисмәтулла йә Баһаутдин тип түгел, ә "атаһы", "байым" тип хөрмәтләп өндәшкәндер...

Нишләп ошо бер һүрәткә ҡарап һүҙ ҡуйырта был, тиҙер бәғзеләр. Ә бына ни өсөн: башҡорт борондан Аллаһы Тәғәләгә буйһоноп, Ислам дине ҡанундары һәм үҙенең быуындан-быуынға тапшырыла килгән милли йола-традициялары буйынса ғүмер иткән. Ҡатындарын башҡаға алмаштырыу, яңыртыу менән булышмаған, ә хәленән килһә, икенсе ҡатын итеп кенә алған (нык байҙар өс-дүрткә тиклем). Изге Ҡөрьәндә дүрт ҡатын алыуға рөхсәт бар, әммә мәжбүр итеп бойороу юҡ. Быңдай аҙымға бара алған ир барлыҡ ҡатындарына ҡарата тиң, ғәҙел мөнәсәбәттә булырға тейеш булған. Шәриғәт ҡануны буйынса, һәр ҡатынын айырым торлаҡ менән тәьмин итергә бурыслы быңдай көслө зат. Бисәләре берберейһенә тексәйешеп, бер тар өйҙә ултырмаған, тимәксемен. Раббыбыҙҙың изге Китапта төшөрөлгән ошо рөхсәтен, моғайын, бер кем дә ғәҙел түгел, тип әйтергә баҙнат итмәҫ. Баш һүҙ булып торған әлеге әйтем боронғо ата-бабаларыбыҙҙың насар ғәҙәтенән, йәғни башҡорттоң күп бисә алырға яратҡанлығынан килеп сыҡмаған. Һәммә ҡатын-ҡыҙҙа көнсөллөк тигән нәмә бар. Был - тәбиғи. Баяғы әйтемде үткер телле көнсөл ҡатындарҙың береһе уйлап сығарып, хатта рифмалап: "Урыҫ байыһа - өй һалыр, башҡорт байыһа - бисә алыр" тип, килештереп әйткәндер, тип уйлайым. Ике-өс ҡатын алыусы ирҙәргә йәне көйөп йөрөгән башҡаларҙың күңеленә хуш килеп, был әйтем, телдән-телгә күсә киләлер...

***Шәриғәт ҡанунына ярашлы, ир кешегә тик хоҡуҡтар ғына бирелмәгәнлеге, ә аныҡ бурыстар ҙа йөкмәтелгәнлеге хаҡында белмәүселәр күп.*** Әгәр ир бер ҡатынды ла таҡа-тоҡа аҫрап тора икән, икенсе ҡатын алыу хаҡында хатта һүҙ ҙә сығырға тейеш түгел, бына нимә! Кемдер әйтмешләй, "хәлеңдән килмәгән" нәмәгә ынтылыу ярамай. Ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата булырға тейешле ғәҙеллек, тейешенсә иғтибар, ихтирам һәм һөйөү Бәйғәмбәребеҙ миҫалында асыҡ күренә. Рәсүлуллаһ ғәләйһис-сәләм барса ҡатынына ла яғымлы, ифрат та яҡшы ҡараштa булған. Был хаҡта боронғолар бик яҡшы белгән. Һәммәләребеҙҙең дә ҡартатай-ҡәртәсәйҙәребеҙ ошо дәүер аша үткән бит инде. Минең үҙемдең ҡартатайым, өләсәйем уҙған быуат башында йәшәгән дини кешеләр булған. Әсәйем мәрхүмә һөйләүе буйынса, өләсәйем сирләп китә лә, ҡартатайыма: "Бабай, мин хәҙер һиңә ҡатынлыҡ бурысымды етешле үтәй алырлыҡ хәлдә түгелмен. Һин икенсе хәләл ефет алып торһаң, миңә лә, үҙеңә лә еңелерәк булыр ине", - тип тәҡдим итә. Хатта кемде алырға кәрәклеге хаҡында ла кәңәш бирә. Өләсәйемдең был һүҙенә ҡартатайым риза була һәм Сафура исемле инәйҙе икенсе ҡатын итеп ала. Бер йылдан уларҙың Әхмәтсафа исемле улдары тыуа. Был инәй менән өләсәйем нык татыу булалар. Шәриғәт ҡанундарын белгән кешеләр өсөн быңдай хәлдәр бик тә тәбиғи булғандыр инде борон. Әйткәндәй, Әхмәтсафа ағайымдың балалары менән беҙ хәҙерге ваҡытта ҡатнашып, туғандарса матур итеп йәшәйбеҙ. Шуға ла иғтибар итәйек: яңы тыуған сабыйын ҡулына алып һөйгән ҡартатайыма ул саҡта илле ике йәш була. Ошо хаҡта бер танышыма әйткәс, ул: "Ә мин тыуғанда атайыма алтмыш дүрт, ҡустым тыуғанда - алтмыш ете йәш булған", - тип ғәжәпләндергәйне... Бына шулай, ҡәҙерле милләттәштәрем, Аллаһ Тәғәләнең Ҡөрьәндә ир кешегә икенсе ҡатын алырға рөхсәт итеүенең үҙенең бер хикмәте барҙыр. Беҙ Раббыбыҙ китабының дөрөҫлөгөн, уның ғәҙеллеген бәхәскә ҡуйыу тураһында уйларға ла ҡурҡырға тейешбеҙ. Әлеге фотоһүрәттә ултырған ир (хатта ҡатындары ла) бына ошондайыраҡ инаныуҙа булғандарҙыр...

***Ә хәҙерге заманға килгәндә, ирҙәрҙең дә, гүзәл заттарыбыҙҙың да психологияһы боронғонан ҡырҡа айырыла.*** Инде тулы быуат тирәһе шәриғәт ҡанундары буйынса йәшәмәйбеҙ бит, шунлыҡтан, уны бик күптәребеҙ белмәй, унанбынан ишеткеләгән хәлдә лә, уны танырға теләмәй. Дин талаптары "хәҙер иҫкергән" тип әйтергә ҡыйыусылар ҙа бар. Хәҙерге тормош дәүерендә күпселектең икенсе ҡатын тоторға мохтажлығы ла, бының өсөн тейешенсә шарттары ла юҡтыр, тип уйлайым. Шулай ҙа бер фекер: күп ҡатынлылыҡты ҡаты тәнҡитләүҙәргә ҡарамаҫтан, бәғзе берәүҙәрҙең ҡасыпбоҫоп, "һул яҡта" рәсми булмаған, йәғни никахһыҙ ғаилә тормошо алып барыуы һис тә яҡшыраҡ түгелдер. Сөнки никахһыҙ тормош "зина" тип атала. Уның ниндәй ауыр гонаһ икәнен тәфсирләп тороу бөгөнгө мәҡәләмдең маҡсаты түгел... Бөгөнгө, "типһә - тимер өҙөрҙәй", илле-алтмышта ла әле "түлдән ҡалырға" уйламаған ир уртаһы кешенең тағы бер ҡатын алырға хәленән килһә лә, уны илебеҙ законы рөхсәт итмәй. Рөхсәт иткән хәлдә лә, дини рухта тәрбиәләнмәгән ҡатыны быға һис кенә лә үҙенең ризалығын бирмәйәсәге көн кеүек асыҡ. Бәлки, ана шул сәбәптәр арҡала ла әлеге көслө заттың ҡайһы берәүһе, Әлиә һылыуҙың һүҙҙәре менән әйтмешләй, "энергияһы кәмегән, рухи һәм физик яҡтан үҙен ҡәнәғәтләндерә алмай башлаған ҡатыны" менән рәсми айырылышыуға мәжбүр булалыр. Бер-ике быуат элегерәкке дәүер булһа, әлбиттә, оҙаҡ ҡына бергә йәшәгән ҡатынын - ғәзиздәренең әсәһен айырыу ирҙең уйына ла килмәҫ ине. Ә яңы ҡатынын өйгә алып килеп: "Таныш булығыҙ. Был - Көндәшбикәң. Минең өсөн икегеҙ ҙә бер тиң. Бер-берегеҙҙе хөрмәт итегеҙ, татыу йәшәгеҙ..."- тип, ярайһы ғына етди итеп әйтер ине лә, тормоштары артабан да дауам итер ине, моғайын. Бынығы - әлеге автор Әлиә Исмәғилева тарафынан "тетмәһе тетелгән" хәҙерге байҙың күҙ уңынан сығып әйтергә тырышҡан һүҙем. Баштағы мәҡәләлә күтәрелгән мәсьәлә, шулай ҙа, беҙҙәге бай кешегә генә түгел, башлыса, илебеҙҙә, хатта бөтә донъяла киң таралған ғаилә тарҡалыу проблемаһына ҡағылышлы, тип әйтер инем. Ә бит динебеҙ ҡануны буйынса йәшәгән хәҙерге мосолман илдәрендә быңдай һорау һис кенә лә көнүҙәк мәсьәлә булып тормай...

***Мәҡәләмде оҡшатмаусыларҙың күпселек булыуында шигем юҡ. Ҡасандыр мәшһүр яҙыусыларыбыҙҙың береһе әйтмешләй, "бөтә кеше яратырға мин бит алтын аҡса түгел"...***

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# БАЛА ҠУРҠҺА...

**Балаға өс йәш тулыуға ул тирә-яҡ мөхитте танып белә, яҡындағыларға күнегә башлай. Уның фаразлау һәләте үҫешә һәм шуның менән бергә күңелендә ҡурҡыу тойғоһо ла барлыҡҡа килә. Ваҡытында дөрөҫ йүнәлеш бирелмәгән осраҡта, был тойғо уның менән бергә үҫә.**

Ҡурҡыу тойғоһо баланың темпераментына ла бәйле булыуы мөмкин. Кескәйҙәр һәр ваҡыт ниҙәндер ҡурҡып та бармай, ваҡыты-ваҡыты менән был тойғо кире әйләнеп ҡайтыусан. Әгәр ҙә ата-әсә балаһы нишләп ҡурҡҡан, нимәнән ҡурҡҡан булыуын асыҡламаһа һәм был турала һөйләүҙе тыйып, күңелендә йәшереп тоторға мәжбүр итһә, тора-бара ул кәмселек комплексына әүерелә. Бала үҙе тураһында: "Ҡурҡаҡ булғас - мин насар. Булдыра алмаһам да ҡурҡмаҫҡа кәрәк, юғиһә, мине атай-әсәй әрләр, хатта яратмай башлар" - тип уйлап, тағы ла нығыраҡ борсоуға ҡалыуы ихтимал. Шуға ла ата-әсә баланың күңелен өйкәп торған тойғоларҙың сәбәбен асыҡлап ҡына, насар уйҙарҙан ҡотолдороп булыуын аңларға тейеш. Бының өсөн тәү сиратта балаға бөтә кешеләр ҙә нимәнәндер ҡурҡыуын аңлатып һөйләү мөһим. Артабан ҡурҡыуҙы коррекциялау юлдарын эҙләйбеҙ. Мин, психолог-практик булараҡ, ҡурҡыуҙы коррекциялауҙың проектив алымына өҫтөнлөк бирәм. Ҡурҡыу менән түгел, ә уны булдырған сәбәптәр менән көрәшергә кәрәк. Ҡағыҙ битендә нимәнән ҡурҡыуыңды һүрәтләү - уны еңеүҙең бер алымы. Был осраҡта балаға ҡурҡыуыңды ҡағыҙҙа һүрәтлә, тигән күрһәтмә бирелә. Һүрәт төшөргән ваҡытта бала ҡурҡҡан саҡтағы тойғоларын тағы ла бер тапҡыр кисерә, ҡотон алған элементтарҙы һүрәтләй. Артабан был картинаны яндырабыҙ, ҡурҡыу көл менән бергә осоп, юҡҡа сыға. Шулай уҡ балалар донъяһының тылсымсыһы - уйын тураһында ла онотторға ярамай. Мәҫәлән, яңғыҙлыҡтан ҡурҡыуҙы йәшенмәк уйыны дауалай ала. Әгәр ҙә ҡурҡыу физик факторға (укол, физик яза биреү) бәйле икән, балаға "тамға" (пятнашки) уйынын өйрәтергә була. Бала бейеклектән ҡурҡһа, уны өҫкә күтәреп, самолет итеп "осорорға" мөмкин. Ҡәҙерле атай-әсәйҙәр, балаларҙың яҙмышы һеҙҙең ҡулда булыуын хәтерҙән сығармағыҙ һәм кескәйҙәр проблемаһына иғтибарлы булығыҙ. Яҡшы тәрбиә биреүҙең төп сере - балаға бәләкәйҙән иғтибарлы булыу.

**Олеся БУРОВА,
педагог-психолог.
Учалы ҡалаһы.**

**✓ Бүлексәгә алып барып бикләгәс тә Сара оҙаҡ ваҡыт иҫенә килә алманы. Нисек тарыны һуң ул былай хәлгә? Нишләп урамда тап иткән ят ҡыҙға шул хәтлем ышанды һуң ул? Хәҙер үҙенә ғәйеп таҡһалар, нисек аҡланыр, ә?**





Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

# НИШЛӘҮЕҢ БЫЛ, САРАМ, ЙӘНКИҪӘК!

Повесть

Сара бәпәйҙе сисендереп, йылы һыуҙа йыуындырҙы. Һөт кухняһынан алған ҡушылманы имеҙҙе. Тағын күтәреп йөрөттө. Үҙе белгән бишек йырын йырланы. Кәйеф күтәрелде. Ярай бәләкәс оҙаҡ йоҡлай, тыныс күренә. Әсәһе генә... Ни йәне менән ошо сабыйҙы ят кешегә ҡалдырып китергә була? Ысынлап та, Сара Луиза өсөн төптө сит кеше. Әллә ул йәтим үҫтеме икән дә, шуға ла ғаилә тигәнде бик аңлап бөтмәйме? Юҡ, ире алама кеше. Шул әҙәмде күрмәй тороп, һорауҙарына яуап табып булмаҫы асыҡ. Их, Луиза Игорҙең адресын да, телефон номерын да бирмәне шул. "Луиза минә ҡыҙым кеүек. Уны яҡлаясаҡмын", - тип әйтергә тура килер.

Ишектең ҡыңғырауына баҫтылар. Барып асыуға "аһ" та "уһ" итеп, Луиза атылып килеп инде. Сара ауыҙ асып бер һүҙ әйтергә лә өлгөрмәне, ҡатынҡай йоҡлап ятҡан бәпәйҙе матҡып тотоп алды.

- Мине эҙәрлекләйҙәр!

- Кем?

- Беләһең бит кем икәнен!

- Асыуын әйтмәйенсә, мин һине бер ҡайҙа ла сығармайым, - тине Сара ҡәтғи тауыш менән.

Луиза илап ебәрҙе:

- Автовокзалға алып барып ҡуй инде. Үтенәм...

- Игорь менән һөйләшергә кәрәк.

- Юҡ! Аҫылынып үлеүем мең артыҡ! Автовокзалға! Зинһар, ҡәҙерлем... Мин бит хәйерсе хәлендә.

Сара йәш ҡатындың үҙенә ун мең бурысы барлығын иҫенә төшөрҙө. "Хәҙер аҡса бирһәң, бурысын әллә ҡайтара, әллә юҡ. Минә һалышып китмәһен, инде алып барып ҡуям да ҡотолам, теләһә нимә эшләһен".

Тейәнешеп сыҡтылар. Сараның иҫке "Лада"һы "һә" тигәнсе тоҡанды. Алама ғына булһа ла, йөрөргә эшкинә бит әле, шөкөр. Шунан ҡуҙғалып урам буйлап киттеләр. Машиналар күп кенә. Луиза артҡа боролоп-боролоп ҡарап ала. Көҙгә аша уны күҙәткән Сара түҙмәне:

- Нервныйһың! Нисек балаңды үҫтерерһең, былай дауам итһә!

Машиналар геүләй. Сара яй барғанға, ҡайһылары сигнал биреп үтеп китә. Сара улар ыңғайына ашыға алмай. Ул йәш әсәне балаһы менән алып китеп бара. Имсәк бала ҡосаҡлаған әсәне йөрөткәне юҡ ине әлегәсә, шуға үҙен бөтөн донъяны яҡларға әҙер баһадир һымаҡ тойҙо. Хатта ашыҡҡан йөрөтмәндәргә: "Миндә эшегеҙ булмаһын", - тигәнде аңлатып, үҙе лә яуап сигнал биргеләне, бармаҡ-ҡул менән дә ишараланы. Ары киткән һайын машиналар ҙа күбәйә генә барҙы. Артта юл-патруль хеҙмәте машинаһы сигнал бирә-бирә яҡынлашты. Берәй ерҙә авария булғандыр. Үтә тығын урында ла бәғзе йөрөтмәндәр әллә ҡайҙа ашығалар, юл ҡыялар, бер-береһенең өҫтәренә менеп киләләр... Әйтерһең, ярышҡа сыҡҡандар. Ярай, полиция машинаһы мәшәҡәтһеҙ, тотҡарлыҡһыҙ үтер, уға юл бирерҙәр, иң мөһиме, аварияға тарығандар иҫән булһындар, берүк. Юғиһә, кисә әсәһе, оло юлда ике ҡатын һәләк булған, тип әйткәйне. Патруль машиналары тәңгәлләште, тик, нишләптер, уҙып китергә ашыҡмайҙар.

- Зинһар, тиҙерәк ҡыу! - тип ҡысҡырҙы бәпәйен ҡосаҡлап артта ултырған Луиза. - Игорь минең арттан килә!

- Ул полицияла эшләмәй бит.

- Дуҫтары күп унда! Ҡыу!

Ҡуй, башты ҡатырҙы ғына бит Луиза! Әллә башы сирлеме? Нишләп ирҙең һүҙен тыңлап, дуҫтары ҡатынды эҙәрлекләһендәр, ти инде?

- Тиҙлекте арттырырға ярамай, ҡәҙерлем. Эргәлә гаишниктар. Һинең ҡулда сабый. Беҙ икеләтә яуаплы, - тине ҡаты тауыш менән Сара.

Машиналар арттан ҡалмай килә. Үткәреп ебәрергә кәрәк. Алда боролош. Хәҙер ҡотолалар! Был ни хәл? Полиция машиналары ла был яҡҡа боролдо ла баһа. Сара яңылыш ишетмәйҙер бит, етмәһә, рупорҙан ҡысҡырҙылар: "Фәлән-фәлән номерлы "Лада", юл ситендә туҡталырға!"

- Туҡтама! - тип ҡысҡырып ебәрҙе Луиза.

- Ирең беҙҙе шулай баҫтырамы? - Сараның йөрәге дөп-дөп килде.

Тегеләрҙең машинаһы сыйылдай-геүләй йәнәш бара башланы. Быны алда ултырған полицейский уға ҡул һелкте: "Туҡта!" Уғаса булмай, динамиттан йәнә һөрәнләне: "Фәлән номер! Юл ситенә барып туҡталырға!"

Был ни гәләмәт? Сара юл ҡырыйына боролоп туҡтауына бер нисә полицейский машиналарынан атылып килеп тә сыҡтылар.

- Ҡулығыҙҙы күтәрегеҙ! Сығырға! - тигән ҡаты тауыш яңғыраны.

Луизаны һөйрәп, үҙҙәренең машинаһына индереп ултырттылар, ул меҫкен сәрелдәй, сәбәләнә. Сабый икенсе полицейский ҡулына күсте.

- Йыртҡыстар, һеҙ нимә эшләйһегеҙ! Ҡағылмағыҙ йәш әсәгә! - тип ярһыны Сара.

Яуап урынына Сараның үҙенә сығырға ҡушылды.

- Был ниндәй башбаштаҡлыҡ? Ҡағылмағыҙ! Мин һеҙҙе хөкөмгә тарттырам! - тип ҡәһәтләнде йөрөтмән ҡатын. - Аңлатығыҙ! Һеҙ әсә менән сабыйҙы урлаһығыҙ!

- Артыҡ һүҙ ыҫҡындырмағыҙ. Үҙегеҙгә ҡаршы дәлил буласаҡ.

- Һеҙ Игорҙең дуҫтарымы?

- Ниндәй Игорь? - Уға яҡынраҡ килгән ауыр кәүҙәле полицейский ҡалын тауыш менән гөрөләне.

- Мин йәш әсәне үҙе атаған адрес буйынса алып китеп барам. Ире Игорь. Быны хәҙер үҙе раҫлар... Ҡайҙа алып киттегеҙ Луизаны?

Уғаса булмай, икенсе полиция хеҙмәткәре уларға яҡынлашты. Чины юғарыраҡтыр, үҙ-үҙен тотошонан шулай тойола.

- Нишләп тотҡарланаһығыҙ? - тине ул бойорған тауыш менән.

- Иптәш! - тип уға өндәште Сара һәм аҫҡан ауыҙын ябырға онотто. - Шамил!

Ләлә һеңлеһе менән бер факультетта уҡыған Шамилды нисек танымаҫҡа мөмкин? Теге лә Сараны таныны.

- Был Сара Наилевнамы? - Ир-егет үҙ күҙенә үҙе ышанмағандай һораны, -Дә, уйламағайным. Нисек былай хәлгә тарынығыҙ?

- Бер нәмә аңламайым. Луизаны атаған адресы буйынса алып китеп барам...

- Бала бит урланған.

- Ы?

- Унда, бүлексәгә алып барғас, бөтәһен дә яҡшылап аңлатырҙар, һеҙ ҙә аңлатырһығыҙ, - тине Шамил. - Тик нишләп беҙ сирена ҡысҡыртып баҫтырғанда, туҡтаманығыҙ? Артығыҙҙан күпме эйәреп барырға тура килде.

Сараның күҙҙәре маңлайына менде, ауыҙы салышайҙы.

- Ай, Хоҙай! Уны ҡайҙан беләйем, ти инде! Тәү тапҡыр былай хәлгә тарыным.

Полицейскийҙар бер-береһенә ҡарашып алдылар.

- Алып китегеҙ, - тип ымланы Шамил. Машина геүләп ҡуҙғалып китте.

Бүлексәгә алып барып бикләгәс тә Сара оҙаҡ ваҡыт иҫенә килә алманы. Нисек тарыны һуң ул былай хәлгә? Нишләп урамда тап иткән ят ҡыҙға шул хәтлем ышанды һуң ул? Хәҙер үҙенә ғәйеп таҡһалар, нисек аҡланыр, ә? Ул сабый урлауҙа ҡатнашманы. Бары тик һораған еренә алып барырға ризалашты. Уф, әсәһе, туғандары белһә, ояты ни тора! Тукта, Сара, тәрән итеп тын ал. Луизаға кеше балаһы нимәгә хәжәт? Был ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ. Игорь әллә шулай башты бутаймы?

Луиза, ире Игорҙе "Эске эштәр министры урынбаҫарының туғаны", тине. Шул әҙәмдең ҡапҡаһына эләктеләрме, юғиһә? Балалы ҡатынды бөтәнләй балаһыҙ итеп күрһәтмәкселәрме? Һуң, Луиза бит, ысынлап та, ауырлы ине! Ҡорһағы бар ине! Сара бөтөн осрашыу-күрешеүҙәрҙе күҙ алдынан үткәрҙе. Бер заман башы ауырта башланы. Хәсрәткә сумып күпме ултырғандыр, иҫләмәй, һорау алырға алып киттеләр.

- Сабый урланған. Ишеттегеҙ бит, бүтән ҡабатламайым, - тине инспектор. - Ни өсөн Ангелина Селезневаға ярҙам итештегеҙ?

- Ангелина? - Был исем-шәрифте тәүләп ишеткән Сара урынынан ҡалҡына бирҙе. - Мин Луизаны ғына беләм. Осраҡлы таныштыҡ. Мин уны ауырлы сағында уҡ күргәйнем инде. Луиза минә ире эҙәрлекләүе тураһында һөйләне.

Һорау алыусы уға тишерҙәй итеп ҡараны:

- Һеҙ нимә, гәзит уҡымайһығыҙмы?

- Юҡ.

- Телевизор ҡарамайһығыҙмы?

- Юҡ.

Интернетта ултырмайһығыҙмы?

- Юҡ.

Инспектор аптырауҙан баш сайҡап, йылмайырға мәжбүр булды,.

- Вәт клоунада.

- Өйөмә барып тикшерә алаһығыҙ, телевизор ҙа, компьютер ҙа юҡ.

- Ә нимә менән шөғөлләнәһегеҙ? Һеҙ эшһеҙ, шулаймы?

- Китап уҡыйым. Эйе! Был ҡыҙ менән мин бер ай элек урамда таныштҡайным. Әйткәнемсә, ауырлы сағында. Шулай! Ҡорһағы бар ине, үҙ күҙҙәрем менән күрҙем.

- Дауам итегеҙ, - тине тәфтишсе.

- Ул минә үҙенең аяныс хәлен һөйләне.

- Ниндәй ауыр хәлен? Ул бала урларға һеҙ ҡотортто, ти әле.

- Нимә?

- Тынысланығыҙ. Беҙ уға ышандыҡ, тигәнде аңлатмай. Ләкин һеҙҙең тормошто ҡатмарландырыуы бар.

Хәл ҡатмарланып китмәһен! Күҙ алдынан йәнә Луиза менән булған күрешеү мәлдәре, һөйләшеүҙәр ялтлап үҙҙы. Сара уны ҡасан күргәнен, нисек таныштҡандарын бәйнә-бәйнә бәйәнләне. Артабан ҡатынды кире изоляторға оҙаттылар. Сара Ғәбитова Енәйәт кодексын шаҡтай яҡшы белә, бәләгә тарығандарға ярҙам иткән саҡтары булды. Тик үҙенең ошондай хәлгә ҡалыры башҡа ла инеп сыҡҡаны булманы. Ул инде "туғандарҙан оят" тигәнде онотто, Илдар ағаһына шылтыратырға ашыҡты. Ул судья, закондарҙы яҡшы белә, тейешле бәйләнештәре бар. Илдар һеңлеһен тыңлаған саҡта аптырауҙан телен шартлатып-шартлатып алды.

- Тәк, бикле ултыраһыңмы? Ҡасан тотоп алып килделәр?

- Ағай, былай хәлгә тарығаным юҡ ине. Ышандым бит ҡыҙ балаға.

- Үҙ башыңа мажара эҙләй ҙә йөрөйһөң, һеңлекәш. Эштәгеләргә нимә тип аҡланырһың икән, ә?

"Ярай әле туғандарым эштән киткәнемде белмәй", тип Сара иркен һуланы.

Сара тикшереүселәрҙең кеҫә телефонын тартып алыуҙарын, ә унда Луиза-Ангелинаның "ҡорһаҡлы" саҡта төшөрөлгән фотоһы һаҡланыуын әйтте. Ысынлап та, был ҙур дәлил ине. Хәл асыҡлана барған һайын Сара үҙенең ни тиклем ахмаҡ һәм бер ҡатлы булыуына инана ғына барҙы. Соҡорға йығылып төшкән хикмәт эйәһе Фалес та унан эс тырнап көләр ине. Ә Сара төшкән соҡор хәтәрерәк бит. Идеал бала тәрбиәләү идеяһы ҡамауында йәшәгән психикаһы сирле Ангелина Иваново ҡалаһындағы психоневрология бүлексәһенән ҡасып сығып киткән. Юлында тап булған кешеләрҙе төп башына ултырта-ултырта Өфө яҡтарына килеп төшкән. Бында ул бер нисә бала табыу йортон күҙәтә. Шуларҙың береһен һайлап ала. Сара Луизаның нисек итеп бала табыу йорто тураһында ентекләп, тәфсирләп һорашҡанын иҫенә төшөрҙө. Аҡ халат кейеп, һиҙҙермәй генә үтеп инә, бәпәй тотоп, шулай уҡ еңел генә сығып китә. Ләкин видеояҙмаларҙы тикшерә торғас, уның кемлеге, йөҙ һыҙаттары төҫмөрләнә башлай. Парктағы камера ярҙам итә: тап ул ике ҡатындың һөйләшеп торғанын үҙенең яҙмаһына теркәй ҙә инде. Сара, һауа етмәгәндәй, күкрәк тултырып тын алды. Ике ҡатындың береһе ул үҙе шул...

Бер тапҡыр Ангелинаны саҡ эләктермәйҙәр, ләкин ул эҙ яҙлыҡтырып өлгөрә. Баланы минә ҡалдырып сығып китеүе шуға бәйле икән... Эҙләүселәренән ҡотолған һымаҡ булғас, тағы тышҡы донъяға сыға.

Телефонға "ауырлы" Луизаны төшөрөп алған фотолары хәлде еңеләйтте. Әлбиттә, ағаһының ярҙамы ҙур булды. Сараны сығарҙылар, әйберҙәрен кире ҡайтарҙылар. Уртаҡ таныштары Шамил уны бүлексәнән сыҡҡансы оҙатып ҡуйҙы.

- Фотоһүрәттәрҙе алып ташлағандарҙыр, хафаланмағыҙ, - тине.

Сараның йөрәге жыу итеп китте.

- Нисек алып ташлаһындар, ти? Улар бит минең дәлил! Ҡана, тикшерәйем әле! - тип ҡысҡырып ебәрҙе лә, телефонына йәбеште.

- Туҡтағыҙ, Сара Наилевна. Һеҙ төшөргән фотоларҙы әйтмәйем мин.

Баҡтиһәң, паркта видеокамералар төшөргән яҙмаларҙан Сара менән Луизаның бергә ултырған мәлдәренән фото эшләп, интернетҡа ҡуйған булғандар икән. Быны ишеткән Сара "аһ" итте.

- Интернетта ул фото юҡ, һеҙҙе таныусы булмаҫ,- тип йыуатты Шамил. - Былай хәлгә бүтән тарый күрмәгеҙ, эргә-тирәгә килеп, һүҙ ҡатҡан һәр кемгә ышанып бармағыҙ. Хуш булығыҙ. Инде тиҙ генә күрешмәбеҙ, Сара Наилевна.

- Юҡ-юҡ, был сүрәттә беҙ бүтән осрашмабыҙ.

Сара бер нисә аҙым атланы ла, эргәләге "Внимание. Розыск" тигән яҙыулы стендҡа аҡайҙы. Юҡ уның фотоһы. Сара иркен һуланы. Шулай ҙа юл буйынса төрлө белдереүҙәр эленгән бағаналарҙы һағайып ҡарап уҙҙы. "Внимание. Разыскивается." тигән берәүҙе күрҙе. Бәхетенә, ул икенсе кеше булып сыҡты.

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН

# АС ҠАРЫНҒА...

## күнегеүҙәр эшлә

■ Британия ғалимдары мәғлүмәттәренә ярашлы, иртәнге күнегеү ябығыуҙың һөҙөмтәһен 20 процентҡа күтәрә. Тик күнегеүҙәр ас ҡарынға башҡарылырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә 12 ир-егет ҡатнашҡан, уларҙың бер өлөшө спорт менән ас көйөнә, бер өлөшө иртәнге аштан һуң шөғөлләнгән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, иртән спорт менән шөғөлләнеүселәрҙең көн дауамында калориялы ризыҡ ашарға теләге булмай, улар асығып та бармай. Ә бына ас көйөнсә спортзалға йүнәлеүселәр уларға ҡарағанда 20 процентҡа калорияларҙы күберәк яндыра.

■ Америка ғалимдары плацебо эффекты ысынбарлыҡта бар, тип раҫлай. Һүҙ бер ниндәй тәьҫир көсө булмаған "ялған" таблеткалар тураһында бара. Баҡтиһәң, былдай дарыуҙар баш ауыртыуынан, хатта Паркинсон ауырыуынан "дауалай" икән. Йәғни, табип ҡушҡан дарыуҙарҙы эскәс, сирленең организмында ла, аңында ла үҙгәрештәр барлыҡҡа килгән. Иң ҡыҙығы, пациенттар дарыуҙарҙың "ялған" икәнен белмәгән дә. Паркинсон менән ауырыусылар ҙа традицион дарыуҙар урынына плацебо алғас, үҙҙәрен енеләрәк тойоуы раҫланған. Ауырыған кеше дарыу эскәс үҙенең һауығырына ышана, шуға ла бындай ыңғай һөҙөмтәләр була.

■ Томат һуты бик файҙалы икәнен беләһегеҙме? Бер стакан һутта каротиндың, С витамининың һәм организм өсөн башҡа кәрәкле матдәләрҙең тәүлек нормаһы бар. Тимер һәм фолий кислотаһы гемоглобиндың кимәлен күтәрә. Томат һутын һығып алғас, уға ҡатыҡ, әнис, петрушка, шәкәр, төмәнсә тоҙ өҫтәһәгеҙ, витаминлы эсемлек килеп сыға. Гипертонияны булдырмау өсөн көн һайын 1 ҡалаҡ бал өҫтәлгән томат һутын эсеү ҙә етә. Был эсемлек глаукоманан һаҡлай, ашҡаҙан һуты бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, йөрәк мускулдарын ҡан менән тәьмин итеүҙә яҡшырта. Ябығырға теләүселәр өсөн белгестәрҙән махсус салат рецепты: томат, алма, һуған, ҡаймаҡ, лимон кисәге, тоҙ ҡушып болғатырға, көн һайын ашарға.

■ Раш университеты ғалимдары яңы диета уйлап тапҡан. MIND диетаһы тип аталған был диета когнитив тайпылыштарҙы (хәтер, аҡыл ҡеүәһенең һәм башҡа когнитив функцияларҙың түбәнәйеүе) булдырмаҫҡа ярҙам итә. 4,7 йыл дауам иткән һынауҙарҙа 960 өлкән йәштәге кеше ҡатнашҡан. MIND диетаһын тотҡандарҙың баш мейеһе 7,5 йәшкә йәшерәк булып сыҡҡан. Йәғни, улар был тайпылыштар менән башҡаса туҡланыусыларға ҡарағанда һуңғараҡ осрашҡан. Диета 15 компоненттты үҙ эсенә ала. 10 төркөм аҙыҡ-түлек - мейе өсөн файҙалы, ә 5 төрлө ризыҡтан - ҡыҙыл иттән, майлы аҙыҡтарҙан, фастфудтан, майҙан һәм маргариндан, тәмтомдан баш тартырға кәрәк. Ғалимдар билдәләүенсә, сәләмәт булырға теләгән кеше көн һайын 3 порция ярма, йәшел япраҡлы йәшелсәләр ашарға тейеш. Ҡапҡылап алыу өсөн сәтләүектәр ҡулланылһын. Борсаҡ кеүек ҡуҙаҡлыларҙы көн аша ашарға кәрәк. Шулай уҡ аҙнаһына ике тапҡыр ҡош ите, еләктәр, балыҡты аҙнаһына бер тапҡыр булһа әҙерләү мөһим. Бынан тыш, көнөнә 1 балғалаҡ аҡ май рөхсәт ителә. Сырға килгәндә, ул көнөнә 1 порциянан артыҡ булырға тейеш түгел.

СИР ШАУҠЫМЫ

# ҺАҠЛАНҒАНДЫ...



**Өфөләге 22-се ашығыс медицина ярҙамы дауаханаһының реанимация һәм тиҙләтелгән дауалау бүлексәһе мөдире Рөстәм Ғәбиҙуллин ковид-госпиталь шарттарында "ҡыҙыл зона"ла ауыр пациенттар менән эшләй. Ул вирусты пневмония менән ауырығандарҙың ғүмерен ҡотҡарыу буйынса реанимация эшен ойоштороған. "Башинформ" агентлығы хәбәрсеһе уға ошо ҡурҡыныс сир тураһында бер нисә һорау менән мөрәжәғәт итте.**




### Пневмония һәм коронавирус араһында ниндәй айырма?

Врач һүҙҙәренсә, пневмония - үпкә туҡымаһының кисҡен сире. "Йәғни, вирус йә бактерия үпкә туҡымаһын зарарлай һәм һаүа тулған альвеолалар киңлеген шеш шыйыҡлығы менән тултыра. Бының нимә икәнен беләбеҙ: пациентҡа вирусҡа ҡаршы препараттар (әгәр ул вирусты пневмония булһа) йәки антибиотик (бактериаль пневмония булһа) бирәбеҙ. Үпкә туҡымаһындағы вирус йә бактерия юҡ ителһә, кеше һауыға", - ти Рөстәм Ғәбиҙуллин. Коронавирусҡа килгәндә, бында хәл күпкә ҡатмарлыраҡ. "Инфекция тын алыу юлдарына эләкһә, үпкә туҡымаһын ғына түгел, тотош организмды зарарлай башлай. Был сир шул тиклем мәкерле һәм ҡурҡыныс. Уның һөҙөмтәһендә беҙҙең организмды һаҡларға тейешле иммунитет системаһы көсәргәнешле рәүештә эшләргә тотона һәм вирус менән генә көрәшмәй, ә барлыҡ ағзаларға ла, үпкәләргә, бауырға, бөйөрҙәргә, ашҡаҙан аҫты биҙенә, баш мейеһенә зыян килтерә башлай. Беҙ уны үҙ-ара "берсерка ярһыуы" тип йөрөтәбеҙ: организмдың һаҡланыу реакцияһы үҙен-үҙе үк һәләк итергә мөмкин. Вирус китеүен-китә, әммә ул организмда ҡот осҡос эҙемтәләр ҡалдыра", - ти врач.

Ковид уртаса 14 көн үҫешә. "Кемдеңдер хәле тәүге 3-4 көндә үк насарая, ә кемдер ике-өс аҙнанан ныҡлап сирләй башлай. Шуға күрә ауырыуҙың тән температураһы өс-дүрт көн дауамында 38-40 градустан төшмәй икән, тиҙ арала дауаханаға мөрәжәғәт итергә кәрәк", - тип белдерә Рөстәм Ғәбиҙуллин.

### Коронавирустан нисек һаҡланырға?

Рөстәм Ғәбиҙуллин әйтеүенсә, иң мөһиме - ул аҡыл. "Сәләмәт тормош алып барыуға күсегеҙ. Тейешенсә йоҡлағыҙ, тәүлегенә ике сәғәттән дә кәм булмаған ваҡыт саф һауала йөрөгөҙ һәм дөрөҫ туҡланығыҙ, шулай уҡ алкоголь, тәмәке кеүек зарарлы ғәҙәттәрҙән баш тартығыҙ", - ти реанимация һәм интенсив терапия бүлексәһе мөдире. Билдәләнгән эпидемиологик нормаларын үтәгеҙ, тигәндә, бында һүҙ йәмәғәт урындарында социаль дистанция, битлек кейеү, шәхси гигиена тураһында бара.

Компьютер томографияһы һәм рентген үтергә сиратта тормаҫ өсөн врачтар өйҙә ҡандағы кислородты тикшереү өсөн махсус прибор менән файҙаланырға кәңәш итә. Эксперттар билдәләүенсә, уның ярҙамында үпкәлә проблема башланыуын белергә мөмкин. "Өй шарттарында пульсоксиметр приборы менән тикшерергә мөмкин. Уның ярҙамында ҡандағы кислород кимәлен үлсәйҙәр. Кешелә ул 95 проценттан да кәм булырға тейеш түгел. Әгәр ҙә тыныс ваҡытта 95 проценттан кәм икән, тимәк, был үпкәлә проблема бар тигәнде аңлата. Үпкә эшмәкәрлеге торошон ошондай ысул менән тикшерергә лә мөмкин: әгәр ҙә элек өсөнсө ҡатҡа енел менеп, ә хәҙер икенсе ҡатта тын алыуы ауырлашһа, уйланырға урын бар", - ти медик.

### COVID-19 вирусының төп билдәһе

"Халыҡ-ара эксперттар билдәләүенсә, коронавирустың төп билдәһенә еҫ һәм тәм тойоу һәләте юғалыуы инә. Икенсеһе - тән температураһы күтәрелеүе. Өсөнсөһө - ҡоро йүтәл", - ти медик. Уның әйтеүенсә, сирҙең тәүге стадияһында конъюнктивит барлыҡҡа килеүе, ишетеү һәләте боҙолоуы мөмкин. "Был осраҡта температураны үлсәргә кәрәк, әгәр ҙә 37-нән юғары булһа, был инфекцияның үҫеше хәүефе тураһында әйтергә була", - тип өҫтәне врач.

*ТЕМАНЫҢ ДАУАМЫ:*

● **Роспотребнадзор балаларҙа коронавирустың йыш осраған билдәләрен атаны.** Ведомствоның Эпидемиология буйынса фәнни-эҙләнеү үҙәге директоры урынбаҫары Александр Горелов әйтеүенсә, COVID-19 менән ауырыған үҫмерҙәрҙә температура һәм йүтәл күҙәтелә, респиратор инфекция билдәләре булмағанда ашҡаҙан менән бәйле проблемалар барлыҡҡа килә. Еҫ тоймау билдәһе булмауы ла бар, балалар йыш ҡына был тойғоно аңлата алмауы ла мөмкин. "РИА Новости"ға коронавирус ваҡытында балиғ булмағандарҙа Кавасаки синдромы күҙәтелеүе хаҡында мәғлүмәт бирелгәйне. Был осраҡта тән температураһы күтәрелә, тәнгә сабыртма сыға, эс ауырта, уҡшыта. Шулай уҡ ҡыҙыусанлыҡ, хәлһеҙлек, эс китеү, конъюнктивит, тел ҡыҙарыу, ирен ярылыу, муйында лимфа төйөндәре, ҡул һәм табан шешеүе күҙәтелә.

● **Медицина фәндәре докторы, врач-инфекционист Дамир Вәлишин сирләләрҙең күп өлөшөн оло йәштәгеләр тәшкил итеүен билдәләй.** "Ковид һәм пневмония менән ауырығандар һаны көнөнә 130 кеше булһа, яҡынса шуның яртыһы - 65 йәштән өлкәндәр. Был йәштә шәкәр диабеты, ишемия һәм башҡа етди хроник сирҙәр осрай. Уларҙа яңы инфекция ауыр үтеп кенә ҡалмай, ә уның фонында етди өҙлөгөү барлыҡҡа килә. Шуға күрә ауырыуға тиҙ биреүсән был төркөм үҙен һаҡларға тейеш", - тип кәңәш бирә врач. Бының өсөн мөмкин тиклем яҡындан аралашыуҙы кисектереп торорға кәрәк. Оло йәштәге туғанды күрергә барғанда бөтә һаҡлыҡ сараларын күҙәтеү мөһим. Сентябрҙә балалар мәктәпкә уҡырға барғас һәм өләсәй-олатайҙары менән тығыҙ аралаша башлағас , вирус йоҡтороусылар һаны артты, ти доктор.

Башҡортостанда 65 йәштән өлкәндәр һәм хроник сирләр өсөн үҙизоляция режимы һаҡлана. Юғары әҙерлек режимы тураһында указға ярашлы, улар өйҙә ултырырға, урамға иртәнге 11-ҙән көндөҙгө 1-гә тиклем генә сығырға тейеш. Ололар "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Беҙҙең хәстәрлек" үҙәге ирекмәндәре ярҙамын файҙалана ала. 8-800-201-89-03 телефоны буйынса оператор заявка ҡабул итә. Ирекмәндәр кәрәкле әйберҙәрҙе килтерәсәк, чек буйынса һуңынан иҫәпләшергә кәрәк буласаҡ.

● **Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында республикала йәшәүселәрҙе антибиотиктар ҡулланыуҙың коронавирусҡа тәьҫир итмәүе тураһында иҫкәрттеләр.** Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, вирус инфекцияһынан зарарланған үпкәне был дарыуҙар менән дауаламайҙар. "Табип кәңәшенән тыш антибиотиктар ҡулланыу коронавирус инфекцияһының ауыр үтеүенә килтерә. Ашҡаҙан-эсәк юлы, бөйөр, бауыр эшмәкәрлегә боҙола, аллергия барлыҡҡа килә. Икенсе тапҡыр препараттарҙың һеҙгә ярҙам итмәүе мөмкин", - тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Республикаһының Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан.

Коронавирусты иҫкәртеү һәм дауалау өсөн табиптарҙың кәңәштәрен тотоу мөһим:

- С һәм D төркөмдәре витаминдарын;
- цинк кеүек микроэлементтар;
- температура 37,5 градустан юғары күтәрелһә, шунда уҡ парацетамол кеүек температура төшөрә торған препараттар эсергә кәрәк.

✓ **"Минең ҡулдарым һеҙ киткәндә нимә эшләп ҡалды?"- тигән һорауына фәрештәләр бына нимә тип яуап бирә: "Беҙ киткәндә улар намаҙ ҡылып ҡалғайны. Беҙ килгәндә лә улар намаҙ уҡый ине".**



БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ

# ИКЕ ИҢЕБЕҘҘӘ...

## ике фәрештә

**Фәрештәләрҙе Аллаһы Тәғәлә барлыҡҡа килтергән. Нәфис нурҙан торған тәндәре төрлө ҡиәфәткә инә ала һәм улар иң киткес ҙур ҡеүәткә эйәләр. Фәрештәләр шул тиклем күп, уларҙың һанын тик Аллаһ ҡына белә. Ғәйшә һүҙҙәренә ҡарағанда, Бәйғәмбәребеҙ былай тип әйткән: "Фәрештәләр нурҙан, ендәр уттан барлыҡҡа килгән".**



**Ҡөрьән-Кәримдә фәрештәләр тураһында текстар бик күп.** Фәрештәләр бик ҙур тәнгә эйә. Бәйғәмбәребеҙ Ябраил фәрештә бына нисек һүрәтләнә: "Серле зат Ябраил булып сыҡты. Мин уны ни бары ике тапҡыр ғына күрҙем. Бер тапҡыр унын һауанан төшөп килгәнен шәйләнем: фәрештәнең кәүҙәһе шул тиклем ҙур, хатта ер менән күк араһындағы арауыҡ уның тәне менән ҡаплана ине". Имам Әхмәт түбәндәге хәҙисте әйтеп ҡалдырған: "Бәйғәмбәребеҙ Ябраил фәрештәне уның ысын ҡиәфәтендә күргән. Уның алты йөҙ ҡанаты тотош донъяны ҡаплай һәм һәр бер ҡанатынан Аллаһҡа ғына билдәле булған алтын-көмөш, гәүһәр-яҡут, аҡыҡ таш һибелә". Әбү Дауыттың хәҙисендә Бәйғәмбәребеҙҙең һүҙҙәре әйтеп ҡалдырылған: "Миңә фәрештәләрҙең береһе тураһында һөйләргә мөмкинлек бирелде. Уның ҡолағы менән яурындары араһында ете йөҙ йыллыҡ ара бар".

**Фәрештәләр бер-береһенән ҡиәфәте менән айырыла:** береһенең ике, икенсеһенең дүрт, өсөнсөһөнөң алты йөҙ ҡанаты бар. Йәғни, улар төрлөһө төрлө баҫҡыста тора. Ҡөрьән-Кәримдә: "Ике, өс, дүрт ҡанатлы фәрештәләрҙе тыуҙырған Һауаны һәм Ерҙе яратыусы Аллаһыбыҙға оло маҡтау булһын!" - тиелә.

**Фәрештәләр иҫ киткес матур.** Ябраил бына нисек һүрәтләнә: "Ул ҙур кәүҙәле генә түгел, уның йөҙө лә иҫ китерлек матур". Йософто күреп, ҡулдарын телеп бөткән ҡатындар тураһында бәйән иткәндә, Ҡөрьән-Кәримдә: "Йософто күреп ҡалған ҡатындар ҡулдарын телеп бөттөләр һәм "Был бит кеше түгел, фәрештә", тип әйттеләр", - тиелә. Фәрештәләрҙең матур йөҙлө булыуына инанған ҡатындар сағыштырыу өсөн башҡа һүҙ тапмаған, күрәһең. Улар иҫ киткес изге күңелле һәм ярҙамсыл.

**Фәрештәләрҙең йәнә бер сифаты - оялсанлыҡ.** Бәйғәмбәребеҙ бына нимә тип әйтеп ҡалдырған: "Фәрештәләр оялған кешенән мин нисек оялмайым инде".

**Аллаһы Тәғәлә фәрештәләргә ендәрҙә һәм кешеләрҙә булмаған сифаттар бирә.** Улар тураһында тағы ла нимә билдәле һуң? Фәрештәләр күктә йәшәй һәм улар Аллаһтың әмерен үтәр өсөн генә ергә төшә. Ҡөрьән-Кәримдә: "Ул үҙенең ҡушыуы буйынса ҡолдарына фәрештәләр ебәрә ала", - тиелә. Әбү Хөрәйрә Бәйғәмбәребеҙҙең һүҙҙәрен бына нисек еткерә: "Көндөҙгө һәм төнгө фәрештәләр бер-береһен алмаштырып, ергә төшә һәм бергә таңғы һәм төштән һуңғы намаҙға йыйыла". Төндө кешеләр менән ерҙә бергә үткәргән фәрештәләр күккә кире әйләнеп ҡайтҡас, Аллаһы Тәғәләнән: "Минең ҡолдарым һеҙ киткәндә нимә эшләп ҡалды?"- тигән һорауына фәрештәләр бына нимә тип яуап бирә: "Беҙ киткәндә улар намаҙ ҡылып ҡалғайны. Беҙ килгәндә лә улар намаҙ уҡый ине".

**Фәрештәләр араһында ҡатын-ҡыҙ енеслеләр юҡ.** Фәрештәләрҙе ҡатын-ҡыҙ затынан тип һанаған кешеләр Ҡөрьән-Кәримдә шулай шелтәләнә: "Ҡайны берәүҙәр фәрештәләрҙе ҡатын-ҡыҙҙар енесенән, тип уйлай. Улар фәрештәләрҙе барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнашманы". "Кем дә кем һуңғы ғүмергә ышанмай, шулар фәрештәләрҙе ҡатын-ҡыҙ тип атай".

**Фәрештәләрҙең йәнә бер сифаты - улар бер ҡасан да гонаһ ҡылмай һәм Хоҙайға ҡаршы килмәй:** "Фәрештәләр Аллаһҡа ҡаршы килмәй һәм ул нимә ҡуша, барыһын да үтәй"; "Фәрештәләр бер ҡасан да Аллаһтың һүҙен бүлмәй һәм уның ҡушыуы буйынса ғына йәшәй". Фәрештәләр Аллаһҡа табыныуҙан һәм уны маҡтауҙан арымай. Ҡөрьән-Кәримдә: "Фәрештәләр Аллаһты көнөтөнө маҡтай һәм тамсы ла арымай", - тиелә. Шулай итеп, фәрештәләр кешеләрҙән һәм ендәрҙән үҙҙәренең барлыҡҡа килеүе һәм тәбиғәте менән ҡырҡа айырыла. Кешеләргә һәм ендәргә килгәндә инде, уларҙың да бер-береһен айырған үҙенсәлектәре бар. Бының тураһында Аллаһтың үҙенә генә билдәле.

**Фәрештәләргә ышаныу - Ислам диненә ышаныуҙың бер терәге.** Кеше фәрештәләрҙең барлығына ышанмай тороп, Аллаһҡа ышанам, тип әйтә алмай. Фәрештәләргә ышаныу - Бәйғәмбәребеҙгә ебәрелгән хәҡиҡәттең өлөшө ул.

**Фәрештәләргә табынырға ярамай, сөнки тик Аллаһҡа ғына табынырға мөмкин. Улар Аллаһ тарафынан төркөмдәргә бүленгән:**

- **Ябраил фәрештә** - ул башҡа фәрештәләргә ҡарағанда күпкә өҫтөнөрәк. Ябраил фәрештәнең көсөн, ышаныслығын, һәләтен Аллаһ үҙе билдәләгән.
- **Микаил фәрештә** - уның исеме Аллаһы Тәғәлә тарафынан Ябраил фәрештәнең исеме менән бер ҡатар телгә алына.
- **Исрафил фәрештә** - иң яҡшы фәрештәләрҙең өсөнсөһө һанала. Төнгө намаҙ ваҡытында Бәйғәмбәребеҙ шулай тип әйткән: "О Аллаһы Тәғәлә, Ябраилдын, Микаилдың һәм Исрафилдың Аллаһы..."
- **Үлем фәрештәһе** - уға Хоҙай бәндәләренең йәндәрен алыу ҡушылған. Был фәрештәнең ярҙамсылары килә: яҡшыларға - матур, насарҙарға - ҡот осҡос ҡиәфәттә.
- **Тауҙар фәрештәһе** - улар тауҙар менән идара итә.
- **Әсә ҡарынын күҙәтеүсе фәрештәләр** - улар әсә ҡарынында үҫкән сабыйҙың үҫешен теркәп бара.
- **Тәхетте йөрөтөүсе фәрештәләр** - улар ҙа иң яҡшы фәрештәләр булып һанала.
- **Ожмах һаҡсылары** - Аллаһы Тәғәлә әйткән: "Кем Аллаһтан ҡурҡып йәшәгән, шуларҙы Ожмахҡа оҙатасаҡтар. Улар Ожмах ҡапҡалары янына барып еткәс, һаҡсылар бына нимә тип әйтәсәк: "Тыныслыҡ һеҙгә! Һеҙ һәйбәт булдығыҙ. Ожмахта мәңге йәшәгеҙ!"
- **Тамуҡ һаҡсылары** - улар 12 фәрештәнән тора.
- **Сәйәхәт итеүсе фәрештәләр** - улар Аллаһты иҫкә алыусыларҙы эҙләй. Аллаһты телгә алыусылар табылһа, был фәрештәләр шундуҡ бер-береһен саҡырырға тотона. Бындай кешеләрҙе ҡанаттары менән ҡамап алып, иң яҡын һауа ҡатламына тиклем күтәреләләр.
- **Яҙып алыусылар** - был фәрештәләр бәндәләрҙең һәр бер ҡылығын теркәп барырға бурыслы.
- **Мөнкир һәм Нәнкир** - ошо фәрештәләр мәрхүм булып ерләнгән кешеләрҙән һорау ала.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИНАНЫУҘАРЫҢА ҠАРШЫ СЫҠ,

## уларҙың ялған булыуы ла мөмкин

Асылда иһә, нимә һуң ул инаныу? Ул - үҙебеҙҙең тәртип схемаларының һәм этика нормаларының нигеҙен тәшкил иткән аңлы һәм аңһыҙ мәғлүмәт. Инаныуҙар беҙгә ысынбарлыҡҡа юлды ҡаплай. Беҙ үҙебеҙ күргәргә теләгәндә генә күрәбеҙ, ҡалған бөтә нәмәне кире ҡағабыҙ.

Ҡәтғи ҡараш яҡлылар бер ваҡытта ла дөрөҫлөккә өлгәшә алмаясаҡ. Һеҙ ундай кешеләрҙе беләһегеҙ: улар һәр ваҡыт "факттарҙан" цитата килтерә.

Улар, үҙ инаныуҙарынан тыш, бер нәмә менән дә иҫәпләшергә теләмәй, үҙҙәре килешмәгән нәмәне хәүеф тип ҡарай. Тормоштағы бөтә көтөлмәгән, аңлашылмаған, яңы нәмәгә "насар" тигән ярлыҡ тағалар, ә бөтә иҫке, ғәҙәти, үҙгәрешһеҙ нәмәне "яҡшы" тип иҫәпләйҙәр. Улар, дөрөҫлөк, ни тиклем ғазаплы булмаһын, тәбиғәте менән һәр ваҡыт "яҡшы", ә ялған, ни тиклем һиңә оҡшамаһын, һәр ваҡыт "насар" булыуын аңламай. Бындай кешеләр үҙ инаныуҙарын яҡлау өсөн үҙ донъяһы тирәләй ҡойма ҡора. Ҡайны бер ҡәтғи ҡараш яҡлыларҙың ҡоймаһы бейек, икенселәрҙеке тәпәшерәк, әммә ниндәй бейеклектә булыуына ҡарамаҫтан, улар бер маҡсатты күҙ уңында тота: дөрөҫлөктө һыйҙыра алған тиклем генә үткәрәләр.

Ҡәтғи ҡараш яҡлылар үҙҙәрен үҙ фекерен үҙгәртеү мөмкинлегенән мәхрүм итә, һәм был уны наҙан һәйә. Ул үҙе төҙөгән стена эсендәген генә аңлай ала, ә ошо стенанан ситтәге Дөрөҫлөктө тикшерә алмай.

Инаныу һәм ышаныс - бер үк нәмә түгел. Уларҙы бутарға ярамай. Инаныуҙан айырмалы, ышаныс сикләүсе фактор була алмай.

Ышаныс беҙҙе күп нәмәне белергә һәм асырға, бөйөк Дөрөҫлөктән яңынан-яңы өлөштәрен танып белергә ынтылырға өйрәтә. Ышаныс менән бөтә нәмәне хәл итергә мөмкин. Ҡәтғи ҡараш яҡлылар һәр ваҡыт, яуапты беләм, тип иҫәпләй. Ышаныусы кеше үҙенең бик аҙҙы ғына белеүен аңлай, шуға күрә даими рәүештә яңыны белергә ынтыла.

Беҙ инаныуҙарыбыҙға янаусы һәр төрлө идеянан ҡасабыҙ, кәрәк булһа, көсләп кире ҡағабыҙ. Миҫалға эскесене алайыҡ. Уға эсеүен дауам итеү аҡыллы ҡылыҡ булып тойола. Наркоман йәки бирән дә үҙ ҡылыҡтарын, нисек кенә хаталы булмаһын, әлеге мәлдәге аңлау кимәленән сығып, аҡлай. Яңылышлыҡтарынды үҙгәртеүҙе тоткарлаусы төп фактор булып ысынбарлыҡты аңларға һәм ҡабул итергә теләмәү тора. Шуға күрә ваҡыт-ваҡыты менән үҙ инаныуҙарыңа асыҡтан-асыҡ ҡаршы сығырға һәм хаталы ҡараштa тормайынса икенселеген тикшереп ҡарарға кәрәк.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ФӘҺЕМЛЕ ЯҘМЫШТАР

## Күңелендә ауыр таш йөрөтмә

Профессор һыу һалынған стаканды тота ла, ҡулын алға һоҙа һәм уҡыусыларҙан һорай:

- Нисек уйлайһығыҙ, был стакан күпме тарта?

Аудиторияла йәнлелек башлана:

- Ике йөҙ грамм тирәһе! Юҡ, өс йөҙ! Биш йөҙ! - тигән тауыштар яңғырай.

- Үлсәмәйенсә, мин уның ауырлығын белә алмайым. Хәйер, был кәрәкмәй ҙә. Ә һеҙгә һорауым шулай: стаканды бер нисә минут ошо килеш тотоп торһам, нимә булыр икән?

- Бер нәмә лә булмай!

- Ысынлап та, ҡот осҡос бер нәмә лә булмай, - ти профессор.

- Ә ҡулды һаман һуҙып, туҫтаҡты ике сәғәт буйы тотоп торһам?

- Ҡул һыҙлай башлаясаҡ.

- Көнө буйы тотоп торһам, нимә булыр?

- Ҡул ойоп, һенере тартыша башлаясаҡ, унан фалиж һуғыуы ла ихтимал. Һеҙгә дауаханаға барырға тура киләсәк, - ти студенттарҙың береһе.

- Ә мин көнө буйы тотоп торғандан туҫтаҡтың ауырлығы үҙгәрәсәкме?

- Юҡ! - тип аптырауға ҡала студенттар, профессорҙың ни өсөн былай тип һорауын улар аңлай алмай.

- Әле һеҙ фаразлаған ҡазаға тарымаҫ өсөн нимәне төҙәтергә кәрәк?

- Стаканды өҫтәлгә ҡуйығыҙ, тотоп тормағыҙ, бүтән бер нәмә лә эшләргә кәрәкмәй, - тип яуап бирә бер үткер студент.

- Һин доп-дөрөҫ әйттең! - ти шат тауыш менән профессор. - Тормошта килеп тыуған һәр ауырлыҡты ла шулай хәл итергә кәрәк. Проблема тураһында бер нисә минут уйлаһаң, ул һинең эргәндә нығынасаҡ. Бер нисә сәғәт буйы өҙлөкһөҙ уйлаһаң, ул инде һине үҙенә йота башлаясаҡ. Көнө буйы уйлаһаң, ул һине бөтөнләй эштән сығарасаҡ. Проблема тураһында уйларға була, ләкин туктауһыҙ уйлау, үҙеңдә тотоу, ғәҙәттә, бер нәмәне лә хәл итмәй, бынан ғына уның "ауырлығы" кәмемәйәсәк.

Проблеманы бары тик ниндәйҙер аҙым яһап, эш-хәрәкәт менән генә хәл итеп була. Уны хәл ит, йәки ситкә ҡуйып тор! Фалижға әйләнеп, һинең үҙеңә килтереп һуғасаҡ бындай ауыр ташты күңелеңдә йөрөтмә...

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ "Һәр ерҙә башҡорт теле дәрестәре бөтөрөлә йәки кәметелә, мәктәптәрҙең статусы түбән төшөрөлә йәки бөтөнләй ябыла. Һуңғы 10 йылда башҡорт теле уҡытылған мәктәптәр һаны 44-тән 10-ға ҡалыуы ла быны раҫлай.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# КЕМ ҠУЛДАРЫ ӨЙҘӨ, ЕРҘЕ ЙӘМЛӘЙ, ИЗГЕЛЕГЕ - ҮЛСӘҮ ТАПҠЫҺЫҘ?




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнә.

**48-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Вәғәз. Назаров. Раунд. Талаҡ. Алмас. Адмирал. Бегемот. Адрес. Индекс. Ҡамыт. Сәс. Әнисә. Иләк. Хата. Ислам. Оя. Елкә. Ваҡ. Ата. Теләк. Ҡырғаяҡ. Апостол.

**Вертикаль буйынса:** Биҡҡолов. Тәгәрмәс. Мифтахов. Нужа. Аҡыҡ. Ҡатил. Вәзир. Скат. Асағас. Университет. Ладья. Завод. Ҡыл. Ала. Әкиәт. Даян. Енес. Сүс. Әрмәк.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 декабрь "Йәнем, иртәгә тағы яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович). 18+

**9 декабрь "Эскәмйә"** (А. Гельман), драма. 12+

**10 декабрь "Шәмсетдин һәм Шәмсүрә"** (Т. Ғиниәтуллин), новелла. 12+

**11 декабрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 12+

**12 декабрь "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 декабрь "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+

**13 декабрь "Удивительное путешествие кролика Эдварда"** (А. Абушахманов), әкиәт. 12.00 6+

**"Униженные"** (З. Биишева әҫәре буйынса), драма. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**12-13 декабрь "Приключения белых мышей"** 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**7 декабрь "Эстрада легендалары концерты"** (Н. Ҡадырова). Онлайн. 6+

**8 декабрь Ян Френкелдең** 100 йыллығына музыкаль-әҙәби кисә. 6+

**10 декабрь "Арғымаҡ"** төркөмөнөң онлайн концерты. 6+

**11 декабрь "Камерный оркестр саҡыра"** (О. Ҡасимов). 6+

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# АВТОНОМИЯ БИШЕГЕ ЛӘ,

## шәхестәр һандалы ла ул - Ырымбур




**(Башы 6-сы биттә).**

Ырымбур өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Йәғәфәр Яманһарин үҙенең сығышында төбәктә мәғарифта яуланған үрҙәрҙән кире сигенеү барыуын билдәләне: "Һәр ерҙә башҡорт теле дәрестәре бөтөрөлә йәки кәметелә, мәктәптәрҙең статусы түбән төшөрөлә йәки бөтөнләй ябыла. Һуңғы 10 йылда башҡорт теле уҡытылған мәктәптәр һаны 44-тән 10-ға ҡалыуы ла быны раҫлай. Мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуҙы энтузиастар ғына һаҡлап тора. Радио һәм телевидениела башҡортса тапшырыуҙар юҡҡа сыҡты. Халыҡ юлдаш антенналарын ҡуйып, уларҙы БЮТ телевидениеһына көйләп, ихтыяжын үҙе ҡәнәғәтләндерергә тырыша. Быға тиклем аҙна һайын сығып килгән башҡорт телендәге "Каруанһарай" баҫмаһы 2017 йылдан нәшер ителмәй. Башҡортостан Республикаһының Ырымбур өлкәһендәге вәкиллеге лә бөтөрөлдө. Ырымбурҙа "Милли ауыл" мәҙәни комплексында асылған "Башҡорт ихатаһы"ның артабан йәшәүе лә һорау тыуҙыра, сөнки ул һатыуға ҡуйылған. Был мәсьәләләр барыһы ла Башҡортостан Республикаһы менән Ырымбур өлкәһе араһындағы хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүҙе кисекмәҫтән ҡабаттан ҡарау ваҡыты еткәнен иҫкәртә", - тине урындағы ҡоролтай рәйесе.

Ырыбур өлкәһенең төбәк һәм мәғлүмәт сәйәсәте министры урынбаҫары Роман Цуканов һөйләшеүгә йомғаҡ яһап, башҡорт телен, мәҙәниәтен үҫтереү буйынса Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранттарында ҡатнашыу буйынса әүҙемерәк эшләргә; Ҡыуандыҡ районы ата-әсәләренең балаларын башҡорт телендә уҡытыу буйынса яҙған ғаризалары буйынса мәсьәләне асыҡларға; Каруанһарайҙың киләһе йылда буласаҡ 175 йыллыҡ юбилейы буйынса сараларҙы хупларға һәм ҡатнашырға кәрәклеген билдәләне. Бынан ары ҙур өлкә гәзиттәрендә һәр милләткә ҡағылышлы гәзит эсендә гәзит нәшер ителәсәген һәм башҡорттар күпләп йәшәгән Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ районында ла ошо йүнәлештә эш алып барыласағын белдерҙе. Әйткәндәй, Эльвира Айытҡолова белдереүенсә, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлыҡ бюджетына ҙур булмаған күләмдә булһа ла республиканан ситтә нәшер ителгән матбуғат өсөн аҡса бүленә. Бөгөн бындай берҙән-бер баҫма матбуғат Пермь крайында ғына йәшәп килә. "Ҡайһы бер ваҡытта шундай хәлгә етәбеҙ: финанстар бар, әммә урындарҙа эшләрлек кадрҙар юҡ. Үкенескә күрә, быйыл, мәҫәлән, был финанстар үҙләштерелмәне", - тине Эльвира Ринат ҡыҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәргә шундай эшлекле сәфәрҙәре урындағы хәл-торош менән ҡағыҙҙа яҙылған отчеттар буйынса ғына түгел, халыҡ менән осрашып танышыу, проблемаларҙы үҙ күҙең менән күреү мөмкинлеген бирә. Ә инде уларҙың нисек хәл ителеүе - йәмәғәт ойошмалары менән юғары вазифалар биләгән, милли мәсьәләләр өсөн яуаплы етәкселәрҙең хеҙмәттәшлеге күрһәткесе булып тора һәм торасаҡ.**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ИҢ МАТУР ҺҮҘ

**1 ноябрҙә старт алған "Иң матур башҡорт һүҙе" проектына республика халҡы бөтәһе меңдән ашыу һүҙ тәҡдим иткән.**

Тауыш биреүҙәр һөҙөмтәһендә 12 һүҙ һайлап алынған: атай, йөрәккәйем, йән, йәнтөйәк, ҡот, намыҫ, өмә, сабыр, тылсымлы, хыял, һөйөм, әсәй. Ошо һүҙҙәр араһынан иң яңғырашлыһын 14 декабргә тиклем bashslovo.ru сайтында тауыш биреп һайларға кәрәк. Тауыш биреүҙә теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Проектты ойоштороусылар - Башҡортостан Республикаһының Граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды ярҙамында, шулай уҡ Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы һәм "Тамыр" балалар-үсмерҙәр телеканалы хеҙмәттәшлегендә "Медиаформат" балалар-үсмерҙәр үҙәге һәм "Телешко" балалар телевидениеһы мәктәбе. Уға республикандың дәүләт телдәрен, Башҡортостан халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үстереү өсөн республика Башлығы гранты аҡсаһы бүленгән. Проект авторы - Рөстәм Аҙнабаев.

# ТЕАТР РОМАНЫ...

**"Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры - 100 йыл. Тарих һәм хәҙерге заман очерктары" китабы "Театр романы" - 2020 премияһы исемлегенә инде. Уның авторҙары - Зәһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценттары Айһылыу Сәғитова һәм Гөлсәсәк Саламатова.**




"Театр романы-2020" премияһына театр һәм театр әһелдәре хаҡында йыйынтыҡ сығарған авторҙар, нәшриәттәр, әҙәби фондтар тәҡдим ителде. Премияның маҡсаты - театр тураһында әҙәбиәт өлкәһендәге нәшриәт эшмәкәрлегенә булышлыҡ итеү; театр хаҡында әҙәбиәттең социаль әһәмиәтен арттырыу, уҡыусыларҙың һәм йәмәғәтселектең фекерен йәлеп итеү; театр хаҡында китап сығарыу, уны таратыу менән шөғөлләнгән нәшриәттәрҙең һәм фондтарҙың абруйын күтәреү. Премияның эксперт советында һәм жюриҙа - билдәле театр һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре. Жюри рәйесе - Рәсәйҙең халыҡ артисы Константин Райкин.

# ХӘТЕРГӘ ТӨШӨРӨП...



**Өфөлә күренекле йырсы һәм композитор, башҡорт профессиональ музыка сәнғәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, йәмәғәт эшмәкәре Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тыуыуына 125 йыл уңайынан тантаналы концерт уҙа. Концерт 14 декабрҙә Башҡорт опера һәм балет театры сәхнәһендә була.**

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тәҡдиме менән 1932 йылда Мәскәү консерваторияһы ҡарамағында милли артистар һәм композиторҙар әҙерләү өсөн Башҡорт опера студияһы ойошторола. Студияны тамамлаусылар театрҙың 1938 йылда асылған опера труппаһына алына. 1938 йылдың 14 декабрендә улар тәүге спектаклде - "Һылыу тирмәнсе ҡатыны" операһын (Дж. Паизиелло) күрһәтә. "Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тыуған яҡтың мәҙәниәтенә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Йырсы һәм композитор булыуҙан тыш, ул концерт менән гастролдәрҙә, фольклор экспедицияларында йөрөгәндә бер туктауһыҙ яңы таланттар эҙләгән, бик күп буласаҡ музыканттарҙың остазына әүерелгән. Тап Ғәзиз Әлмөхәмәтов оҙаҡ йылдар республикала милли музыка театрын асыу өсөн көрәшкән. Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа бағышланған концерт - уны ихтирам иткәндәрҙең йөрәгендә йәшәгән мәңгелек хәтерҙең дәлиле", - тип билдәрҙеләр театрҙа. Концертты онлайн ҡарарға мөмкин.

# ТАҒЫ БЕР ЕҢЕҮ



**"Өс таған" фильмы "Әҙәбиәт һәм кино" кинофестивалендә (Гатчина) Гран-при яуланы һәм "үҙенсәлекле музыка" өсөн махсус диплом менән бүләкләнде. Был турала фильмдың режиссеры Айнур Асҡаров хәбәр итте.**

Жюри рәйесе Ирина Ивтеева әйтеүенсә, Мостай Кәримдең повесы буйынса төшөрөлгән фильм бер тауыштан Гран-приға лайыҡ тип табылған. Кинокартина сценаристары Айҙар Аҡманов, Мәғәфүр Тимербулатов, Дамир Йосопов, композитор - Камил Абдуллин. Унда төп ролдәрҙә Өфөнән, Баймаҡтан һәм Сибайҙан уртансы класс уҡыусылары Илдар Бикҡолов (Ғабдулла), Руслан Ҡаҙаев (Айҙар), Арыҫлан Ғәлиев (Вәзир), Ильяс Кинйәбулатов (Яҡуп) башҡара. "Өс таған"ды бөтә ғаилә менән ҡарарға мөмкин. Мин уны мотлаҡ ҡарарға тәҡдим итер инем", - ти баһалама ағзаһы Галина Бокашевская.

# ОҘОН КӨЙ БАШҠАР!



**Республикала башҡорт халҡының оҙон көйҙәрен башҡарыусыларҙың "Үлемһеҙ йырҙар" онлайн-фестивале башланды. Сара Башҡорт теле көнөнә арнала.**

Фестивалдә 16 йәштән 65 йәшкә тиклем башҡорт оҙон көйөн башҡарыусы һәүәҫкәрҙәр ҡатнаша ала. Былың өсөн башҡорт халыҡ йырын башҡарып, өс минуттан артмаған видеороликты #үлемһеҙйырҙар2020 хэштегы менән социаль селтәргә һалырға кәрәк. Онлайн-фестивалгә йомғаҡ 14 декабрҙә, Башҡорт теле көнөндә яһала.

Белешмә өсөн телефон: 8 (347) 289-65-50.

БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК

# БИҘӘРЛӘҮ ОҪТАҺЫ КЕМ?

**Биҙәр** *(көнсығыш, урта)* **биҙәк**
**Биҙәр-биҙәр** - броский, очень яркий
**Биҙәрле** *(урта)* 1) **биҙәкле** 2) **сыбар биҙәрләү** *(ырғыҙ)* **биҙәкләү. Биҙәрҙәү** *(көнсығыш)*
**Биҙәрләү оҫтаһы** - мастер по отделке
**Биҙәү** - украшать, украшение
**Бизләнеү** (тәньяҡ-көнбайыш), **укмашыу** - скомкаться
**Бикасап, бикәсәп** *(ырғыҙ)* - бекасаб *(полосотая полушелковая среднеазиатская ткань, использовалась для верхних халатов)*
**Билбау, билғау** - кушак
**Ҡәмәр билбау, камар билғау** *(ҡыҙыл)* - узорчатый шерстяной кушак.
**Ука билбау** - пояс с позументом
**Биллек** - ) пояс, поясной 2) хлястик
**Битлек** - налобная повязка
**Бишбармаҡ** *(гәйнә, дим, ҡариҙел, төньяҡ-көнбайыш, урта урал)* **бирсәткә**
**Бишбил** - приталенная форма национальной одежды-полукафтана *(дословно пять поясов)*
**Бишинә, бишәнә** *(салйоғот)* ойоҡ энәһе
**Бишмәт** - бешмет *(верхняя одежда на подкладке, тканевая или стёганая)*

**Рәмилә КӘРИМОВА.**

**"Башҡортса-урыҫса туҡыусылыҡ һәм ҡул эштәре терминдары һүҙлеге" китабынан.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫ ЕГЕТ...

## ил ғәйебен асмаҫ

Ир тауышлы ҡатында әҙәп булмаҫ, ҡатын тауышлы ирҙә ғәйрәт булмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

"Тәүҙә уйла, шунан һөйлә" - был тәнҡитселәр девизы, "Тәүҙә һөйлә, шунан уйла" - был ижадсылар девизы.

**(Эдуард Форстер).**

Зинһар өсөн, был "идеал" тигән сит ил һүҙен ҡулланып мәшәҡәтләнмәгеҙ, үҙебеҙсә генә "ялған" тиегеҙ ҙә ҡуйығыҙ.

**(Генрик Ибсен).**

Идеялар еңгәндән һуң мәйеттәр ятып ҡала.

**(Симона Вейль).**

Беҙҙең бөтөн уйлаған уйҙарыбыҙ ҙа маңлайыбыҙға яҙылһа, бөтөн ғаиләләр тарҡалып бөтәр ине.

**(Мария Эбнер-Эшенбах).**

Ихласлыҡ - бәләкәйерәк дозала булғанда ҡурҡыныс, ә ҙур дозала - үлемесле.

**(Оскар Уайльд).**

Әгәр ҙә һин берәй танышыңдың һинең турала ни уйлауын белгең килһә... уны асыуландыр.

**(Оливер Уэнделл).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Диңгеҙҙә хеҙмәт итеүсе бер моряк бер ваҡытта ла күрмәгән Роза исемле бер ҡыҙҙан хат ала башлай. Өс йыл хат алышалар былар. Егет был ҡыҙҙың хаттарынан башҡа йәшәй алмауын, үҙе лә аңламаҫтан, уға ғашиҡ булыуын аңлай. Хеҙмәтен тултырғас, улар осрашырға һүҙ ҡуйыша. Бына улар алдан билдәләнгән урында - вокзалда. Егет уйлана төшә: ул Розаның фотоһын да күргәне юҡ, уның нисә йәштә икәнен дә белмәй. Бөгөн ул уны таныр, әлбиттә, сөнки алдан һөйләшкәнсә, Роза түшенә роза сәскәһе ҡаҙарға тейеш була. Ә артабан нисек булыр? Шулай уйлап, тулҡынланып, егет вокзалды байҡай. Бына уның ҡаршыһына түшенә роза сәскәһе ҡаҙаған алтмыш йәштәр тирәһендәге ҡатын атлап килә. "Йә, Хоҙай, ҡасырға кәрәк. Әйләнергә лә китергә..." тип уйлап ала егет бер секунд эсендә. Әммә ул туҡтап ҡала. "Был ҡатын бит хаттары менән мине йыуатты, байрамдарға бүләктәр ебәрҙе, ул минең был ҡылыҡҡа лайыҡлы түгел". Шулай тип уйлай егет һәм ҡатындың алдына барып баҫа. Күрешергә ҡулын һуҙа. Шунда был өлкән ҡатын: "Мин Роза түгел, ул, ана, минең артымда", - ти. Егет ҡатындың артында йәшеренеберәк баҫып торған гүзәл ҡыҙҙы күрә һәм... Әгәр ҙә ул бая боролоп китеп барһа, был гүзәллекте күрмәҫ ине бит, тигән уйҙан тетрәнә... Ә бит күптәр үҙенең бәхетенә табан барған юлдағы бәләкәй генә ҡаршылыҡты ла аша атлап үтә алмай һәм борола ла китә..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
4 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 981/12